ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 октябрь (ҡарасай) 2021

№43 (981)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Йәмәғәтселек менән...**

Салауат Юлаев һәйкәле тураһында



5

**Ер хәтерен яңыртып**



8-9

**Үҙе йәш кенә,**

ә үҙе драматург!



11

**Берләшәйек, бар ырыуҙар башҡорттары!**



12-13

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 731 һум 66 тингә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып та бүләк итә ала. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй Президенты В.Путин тарих дәреслектәрен тәнҡитләне. Был хаҡта һеҙ ниндәй фекерҙә?

***Тәлғәт ШАҺМАНОВ, журналист, Көйөргәҙе районы:*** Урта мәктәп өсөн тарих дәреслектәрендә Рәсәй Федерацияһы дәүләтенең күренекле шәхестәренә күберәк урын бүлеү аша уҡыусыларҙа илһөйәрлек тәрбиәләүгә килгәндә, уны илебеҙ төбәктәре тарихынан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Үткән быуаттың һуңғы бер нисә тиҫтә йылында, илебеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, республикабыҙ мәктәптәрендә "Башҡортостан тарихы" төбәк компоненты индерелгәйне. Минә уны байтаҡ йылдар уҡытырға тура килде. Уҡыусылар был предметты һәр саҡ ҙур теләк менән яратып өйрәнде. Тик Рәсәй Мәғариф министрлығына нишләптер ул оҡшаманы: был төбәк компонентын уҡытыу программаларынан алып ташларға ҡуштылар. Балаларға яңынан Боронғо Греция, Боронғо Рим дәүләттәре тарихын өйрәнергә генә ҡалды.

Ә бит илһөйәрлек тап бына йәнтөйәгеңдең, республикаңдың тарихын ныҡлы белеүҙән, уның менән ғорурланыуҙан башлана. Тыуған яҡ тарихы, унда тыуып үҫкән данлыҡлы, арҙаҡлы яҡташтар - шәхес тәрбиәләүҙең шишмә башы. Бер нәмәгә ҡарамай, "Башҡортостан тарихы" предметын уҡытыуҙы тергеҙергә кәрәк, тип иҫәпләйем.

Тарих буйынса төбәк дәреслектәренән тыш, башҡорт балалар яҙыусылары күренекле шәхестәрбеҙҙең тормошона, эшмәкәрлегенә бәйле биография жанрындағы китаптар яҙһа, ҡалай һәйбәт булыр ине. Быны балаларҙың йәш үҙенсәлектәренән сығып ижад итеү зарур. Мәҫәлән, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев тураһында, уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн кескәй күләмле бер китап, урта йәштәге мәктәп балалары өсөн урта күләмдәге икенсе китап, өлкән йәштәге мәктәп уҡыусылары өсөн ҙурыраҡ күләмле өсөнсө китап ижад итергә мөмкин. Балаларыбыҙҙың ҡулдарына ҡаты күңеллелеккә, бәғерһеҙлеккә өйрәтеүсе мультиклы планшеттар биргәнсе, ошондай китаптарҙы күберәк тотторһаҡ, яҡшыраҡ булмаҫ инеме ни? Юғиһә, хәҙерге балаларҙан, Йыһанға кем беренсе булып осҡан, тип һораһаң, Ленин, тиҙәр. "Учительская газета"ла шундай хәлде уҡып аптырағайным: үткән быуаттың 90-сы йылдарында мәктәпкә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын уҡыусылар менән осрашыуға саҡырғандар. Бер бабай үҫмерҙән, Зоя Космодемьянскаяны беләһеңме, тип һорай икән. Ә тегеһе, ҡапыл ҡыҙарынып-бүртенеп китеп, минең уға насарлығым тейгәне юҡ, тип аҡлана икән үҙенсә аңлап. Шуның шикелле хәлдәр булмаһын, унан да бигерәк рухһыҙ, манҡорт әҙәмдәр артмаһын өсөн, мәктәптә, ғаиләлә, мәҙәниәт өлкәһендә илһөйәрлек тәрбиәләү эштәрен яңыртыу, көсәйтеү һис шикһеҙ кәрәк.

## ИҒТИБАР!

# ИҪӘПТӘ ЛӘ, ҺАНДА ЛА БУЛАЙЫҠ!

**"Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу-2020" кампанияһы башланды, ул 14 ноябргә тиклем дауам итәсәк. Башҡортостанда 7 меңдән ашыу иҫәп алыусы халыҡтан йыйған мәғлүмәтте махсус программалы планшеттарға теркәп бара, интернет булмаған төбәктәрҙә ҡағыҙ бланкылар ҙа файҙаланыласаҡ.**

Халыҡ иҫәбен алыу илдең социаль-иҡтисади үҫеше, ғилми тикшеренеүҙәр, демографик торошто аныҡлау кеүек мөһим маҡсаттар өсөн кәрәк булыуын барыһы ла белә. Шулай ҙа алынған мәғлүмәтте тейешенсә файҙаланмаҫтар, енәйәтселәр ҡулына эләкһә, аҡса таптырырҙар, өҫтәмә һалым килер, теркәлгән урында йәшәмәгәнде белерҙәр, махсус хеҙмәттәр хәбәрҙар булыр һәм башҡа ошондай яңылыш фекерҙәр йөрөй халыҡта. Был икеләнеүҙәр урынһыҙ, сөнки закон буйынса иҫәпкә алыу барышында алынған мәғлүмәттәр сер итеп һаҡлана һәм бер кемгә лә бирелмәй.

Иҫәпкә алыу ҡағыҙына иғтибар итһәгеҙ, унда һеҙҙән милек, килем, фатир хужаһы, паспорт белешмәләре күрһәтеү талап ителмәй. Ә бына милләт, телдәрҙе белеү, милләт-ара никахтар һаны, белем кимәле, никахтың ғәмәлдәге хәле, ғаиләләр һаны, торлаҡ шарттары, өйҙән эшкә тиклем сарыф ителгән ваҡыт тураһындағы мәғлүмәттәр йәмғиәттәге үҫеште күҙәтеү өсөн мөһим һәм бланкыларҙағы һорауҙар шуларҙы асыҡларға ярҙам итә лә инде.




**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✔ *Былай тиҙ, арзан һәм еңел юл менән халыҡты милексе итергә тырышыуҙың сәбәбе ниҙә икән? Ғәҙәттә, беҙ "тәмле нәмә"нең күп булмауына күнеккәнбеҙ.*



ИҒТИБАР!

# ИҪӘПТӘ ЛӘ, ҺАНДА ЛА БУЛАЙЫҠ!

(Башы 1-се биттә).

БӨТӘ РӘСӘЙ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ

Яуап биреүҙә 14 йәше тулған һәр кеше ҡатнаша ала, ғаиләнән бер генә кеше яуап бирһә лә ярай. Әлбиттә, был сараның төп һорауҙарының береһе: "Һеҙ ниндәй милләткә ҡарайһығыҙ?" - тип яңғырағаны. Һәр кеше унда үҙенең милләтен яҙа, ә иҫәпкә алыусыға ярҙамсы һорау биреү йәки яуапҡа ҡарата икеләнеү белдереү тыйыла. Шулай уҡ өйҙә аралашҡан бер нисә милләтте һәм телде күрһәтергә мөмкин, был ҡатнаш никахтар һаның белергә ярҙам итәсәк.

Быйыл күп функциялы үҙәктәргә барып (МФЦ) та, "Дәүләт хеҙмәттәре" ("Госуслуги") порталында ла яуап бирергә була. "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында үҙаллы яуап биргән осраҡта һәр ғаилә ағзаһына үҙенсәлекле код ебәреләсәк, икенсе тапҡыр һорау алмаһындар өсөн ул кодты үҙегеҙҙең участкаға беркетелгән иҫәп алыусыға күрһәтергә кәрәк була.

Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы барышында мутлашыусылар әүҙемләшергә мөмкин, тип билдәләй белгестәр. Мутлашыусылар үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәтте белеү өсөн иҫәп ҡағыҙында булмаған һорауҙар бирергә мөмкин. Мәҫәлән, эш графигы тураһында һорауҙар бирел, кешенең ҡасан өйҙә булмауын белдәләргә тырышыу осрағы. Шулай уҡ өлкән йәштәгеләрҙән пенсия күләме, уны ни рәүешле алыуҙары, картаның банк реквизиттары хаҡында мәғлүмәттәр һорауҙары ла бар. Был һорауҙарҙың береһе лә иҫәп ҡағыҙында юҡ һәм уларға яуап бирергә кәрәкмәй. Айырыуса оло йәштәгеләрҙә иҫкәртеү мотлаҡ.

Граждандарҙың шәхси мәғлүмәтен белеү өсөн мутлашыусылар шулай уҡ үҙҙәрен Росстат хеҙмәткәрҙәре итеп таныштырға ла мөмкин. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнашыусы һәр кеше яҡтыртыуҙы сағылдырыусы (светоотражающий) зәңгәр курткала һәм иҫәп алыу символы күрһәтелгән күк төҫтәге шарф һалған булаcаҡ. Шулай уҡ уның ҡулында фирмалы күк сумка, планшет һәм иҫәп алыусының уникаль номеры яҙылған "һыулы" билдәләр (водяные знаки) менән һаҡланған танытманың булыуы мотлаҡ.

Халыҡ иҫәбен алыуҙың төп принцибына ярашлы, яуаптарҙы документаль рәүештә иҫбатлау кәрәкмәй, йәғни иҫәп алыусы һеҙҙән паспорт йәки башҡа төрлө документ талап итергә тейеш түгел.

Иҫәп алыусыны йорт йәки фатирығыҙға индермәйенсә, ишек төбөндә йәки подъезда, ихатала ғына һорауҙарға яуаптар бирергә хоҡуҡлыһығыҙ. Мутлашыусыларҙың фатирға инеп, береһе һорауҙар биреп, йорт хужаһының иғтибарын үҙенә йүнәлткән сағында икенсеһенең ҡиммәтле әйберҙәрҙе урлау осраҡтары булыуы билдәле.

Әгәр ҙә һеҙгә телефон аша яуап биреүҙе һорап шылтыратһалар йәки телефонға ниндәйҙер сайтҡа инеп, һорауҙарға яуап биреүҙе кҫҙаллаған смс-хәбәр килһә, инҡар итегеҙ, былар - мутлашыусылар.

БЫНАҒАЙЫШ!

# КӘЗӘҢ, ТАУЫҒЫҢ МЕНӘН ХУШЛАШ!

**"Баҡса амнистияһы" нисә йыл дауам итте, хәтерләйһегеҙме? Баҡсаһы юҡтарға баштарын ҡатырмау хәйерле, башҡа хәстәрҙәре булмаһа. Ә бына баҡса хужалары һуңғы дача реформаһынан һуң үҙҙәрен нисек тоя - уларға төбәлә был һорау.**

Эйе, бик оҙаҡҡа һуҙылды амнистия - ун дүрт йыл буйы халыҡҡа ер участкаларын һәм ундағы күсемһеҙ милекте (торлаҡ һәм баҡса йорттары) ябайлаштырылған тәртиптә хосусилаштырыу мөмкинлеге бирелде. Ошо оҙайлы кампания сиктәрендә 14 млн рәсәйле баҡсаларын шәхси милек тип раҫлаусы документтарҙы артыҡ ығы-зығы, бюрократик волокитаһыҙ ғына ҡулдарына алып һөйөндө, сөнки мәғлүм булыуынса, милек итеп нығытылмаған дача һәм ер участкаларын һатып та, һатып алып та, мираҫ итеп тә ҡалдырып булмай. Ошо амнистия барышында баҡса участкаларын шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн файҙаланыусылар һаны ла бермәбер артты. Былтыр иһә амнистия проектын 2026 йылғаса оҙайтырға ҡарар ителһә, яңыраҡ уны хатта 2031 йылға тиклем дауам итергә булдылар.

Былай тиҙ, арзан һәм еңел юл менән халыҡты милексе итергә тырышыуҙың сәбәбе ниҙә икән? Ғәҙәттә, беҙ "тәмле нәмә"нең күп булмауына күнеккәнбеҙ. Шулай оҙаҡ йылдар буйы бер яҡлы ғына миһырбанлыҡ күрһәтелеүме был, халыҡ мәнфәғәтен ҡурҙәтеүме? Шулай һағайышып, амнистияның "әтнәкәһен" көттө һиҙгер күңелләләр. Һәм көткәндәре, ниһайәт, алдарына килде. "Эксперт" баҫмаһы хәбәрсеһе Екатерина Новикова яҙыуынса, "Росреестр" баҡса амнистияһын артабан тағы ла ҡоласлыраҡ итеү һәм оҙайтыу тураһында закон проекты әҙерләгән, имеш. Хатта ки хәл итеп булмаҫтай һәм доку-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

***Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй Президенты В.Путин тарих дәреслектәрен тәнҡитләне. Был хаҡта һеҙ ниндәй фекерҙә?***

***Наил ӘМИНЕВ, Өфөләге 162-се "СМАРТ" күп профилле полилингваль мәктәп директоры, тарих фәндәре кандидаты:*** Дөрөҫөн әйткәндә, был бер бөгөнгө көн мәсьәләһе генә түгел, ил Президенты бынан алда ла бер нисә тапҡыр ошо хаҡта әйтә килде. Мәҫәлән, 2014 йылда уҡ әле ҡайһы бер дәреслектәрҙәге Икенсе бөтә донъя һуғышына ҡарата баһаламаны "фашизмға ҡаршы көрәштә совет халҡының роле күрәләтә кәметеп күрһәтелә" тип тәнҡитләгәйне. 2020 йылда ла ул өлкән класс уҡыусылары өсөн "Хәтерләйһең, тимәк, беләһең" тигән девиз менән үткән Бөтә Рәсәй асыҡ дәрестә ҡатнашып, Бөйөк Ватан һуғышы тарихын боҙоп күрһәтеүгә юл ҡуйырға ярамағанын, Көнсығыш һәм Үҙәк Европаны фашисмдан азат итеүҙә Совет армияһының төп ролен онотмаҫҡа ҡушыуын яҡшы хәтерләйбеҙ. Был юлы ла ул ошо мәсьәләне ҡабатлап күтәрҙе. "Ҡайһы бер дәреслектәрҙе acham, аптырарлыҡ хәл: унда, әйтерһең дә, һүҙ беҙҙең турала бармай! Нимә генә яҙмайҙар, икенсе фронт хаҡында ла, тик бына Сталинград һуғышы хаҡында бер ни ҙә әйтелмәгән," - тине ул Мөрәжәғәтнамәлә. РФ Мәғариф министрлығы был тәнҡиттән һуң дәреслектәрҙе тикшереп сығып, уларҙа Сталинград һуғышы тураһында яҙылһа ла, етерлек кимәлдә түгел, тип тәнҡитте ҡабул итеүҙәрен белдерҙе.

Дөйөм алғанда, Рәсәй тарихы буйынса дәреслектәрҙең йөкмәткеһен яҡшыртыу, тулыландырыу проблемаһы, ысынлап та, бар. Яңынан яҙыласаҡ дәреслектәрҙә Бөйөк Ватан һуғышының бөтөн этаптарын да һәм айырыуса ана шул хәл иткес һуғыштарҙа ҡатнашҡан, баштарын һалған совет яугирҙарының ҡаһарманлыҡтарын тулыраҡ, йәнлерәк итеп бирергә кәрәк, тигән фекерҙәмен, сөнки ҡоро һандар һәм факттарҙың балаларға эмоциональ тәьҫире юҡ. Ә бит тап тарих дәреслектәрендә уҡыусыларҙа ата-бабаларыбыҙ батырлыҡтары, фиҙаҡәрлектәре менән ғорурланыу, һоҡланыу, Тыуған илде һөйөү һәм уның хаҡына йәнендә лә бирергә әҙер тороу кеүек илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләнергә тейеш. Һәр хәлдә, совет мәктәбендә шулай булды. Октябрят, пионер, комсомол сафтары нисәмә быуын патриоттар тәрбиәләне! Һәм был тәрбиә эшендә тарих дәреслектәренең дә, һуғыш хаҡындағы легендар кинофильмдар һәм әҙәби, документаль әҫәрҙәрҙең дә, мәктәп һәм ата-әсәләрҙең дә роле ифрат ҙур булды. Ә бөгөн ҡараһаҡ, яңы ғына мәктәп тамамлаған үҫмерҙәр һәм егеттәр армияла ватаныбыҙҙы һаҡларға барып, бер йыл хеҙмәт итеп ҡайтыуҙан "ялтаныл" йөрөй - шуларҙы инде илдең киләсәге? Ҡайҙа уларҙа илһөйәрлек тойғоһо?

Шуның өсөн дә аң-белем биреү генә түгел, тәрбиә сараһы ла булһын тиһәк, тарих дәрестәрен тулы ҡеүәтенә файҙаланырға тейешбеҙ. Дәреслектәрҙә Рәсәй тарихының һәр бер осорон, шул иҫәптән Бөйөк Ватан һуғышының бөтөн этаптарын, Курск дуғаһы, Мәскәү, Сталинград өсөн һуғыштар, Ленинград блокадаһы һәм башҡа шуның кеүек героик ваҡиғалар, был һуғышта тиңһеҙ батырлыҡтары менән дан алған төрлө милләт вәкилдәре, атап әйткәндә, башҡорттарҙың ҡаһарманлыҡтары (һәм, ғөмүмән, халҡыбыҙҙың Рәсәй тарихындағы бөтөн һуғыштарҙа ла ҡатнашып, Ватанды һаҡлауҙары) ентекле сағылдырылырға тейеш. Югиһә, балалар халҡыбыҙ тарихын, бөйөк шәхестәребеҙҙе, данлыҡлы полководецтарыбыҙҙы ла белмәй икән, беҙ киләсәктә быуындар бәйләнешен генә түгел, ә тотош быуындарҙың үҙҙәрен юғалтыуыбыҙ бар.

Тыуған ил тыуған төйәктән башлана, тибеҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең балаларға үҙҙәре йәшәгән төбәк - кесе ватаныбыҙ тарихын өйрәнеү мөмкинлеге ләсикләнде, сөнки республика мәктәптәрендә бөгөн Башҡортостан тарихы уҡытылмай. Әгәр ата-әсәләр уны уҡытырға тип ғариза яҙһа һәм мәктәп быны теләһә генә Башҡортостан тарихы дәрестән тыш тәртиптә уҡытылырға мөмкин, әммә быныһ өсөн дәреслектәр юҡ. Һуңғы дәреслектәрҙән 8-се кластар өсөн Ирек Аҡмановтың китабы бар, ләкин ул нәшер ителгәнгә хәҙер инде 15-20 йыллап барҙыр. 9-сы синыф өсөн Марат Ҡолшәрипов авторлығындағы дәреслектең сығыуына ла байтаҡ йылдар үтеп китте, ә яңы ҡулланмалар юҡ. Ошондай шарттарҙа балалар үҙҙәре йәшәгән төбәк хаҡында бер ни ҙә белмәйенсә мәктәп тамамлап сығып китәләр.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔22 октябргә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 669 сир йоҡтороу осрағы раҫланған. Коронавирус осраҡтарының дөйөм һаны 80 144-кә еткән. Тәүлек эсендә вафат булғандар 36-ға арткан, хәҙер улар - 2 304 кеше. Бөтәһе 69 530 кеше һауыҡҡан, 650-һе - һуңғы тәүлектә.

✔Республикала яңы коронавируслы инфекцияға ҡаршы һөҙөмтәле көрәшеү өсөн 2 484 000 кешене вакциналарға кәрәк. БР Хөкүмәте вице-премьеры - республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренә ҡарағанда, төбәктә прививка яһатмаған граждандарға коронавирусҡа ҡаршы яңы сикләүҙәр индергәс, вакцина ҡаҙатырға теләүселәр һаны арткан. 16 октябрҙә иң күп кеше - 40 321 граждан COVID-19-ҙан прививка яһатҡан. Министр белдереүенсә, бөгөнгә республикала 1 436 мең кеше вакцинаның I компонентын, 1 260 мең кеше яһатҡан.

✔БР Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә төбәк Роспотребнадзоры етәксеһе Анна Казак белдереүенсә, Башҡортостанда 242 мәктәп COVID-19 карантинында ҡала. "Мәктәптәрҙә һәм урта һөнәри белем биреү учреждениеларында ауырыусылар һаны арта бара. Бөгөнгә 242 мәктәп карантинға ябылған, был 543 класс тигән һүҙ", - тине баш санитар табип. Ведомство быға тиклем хәбәр итеүенсә, әгәр ҙә биш кешенән артыҡ сирләүсе теркәлһә, класс карантинға китә. Роспотребнадзор талабы буйынса класс 14 көнгә дистанциялы уҡыуға күсерелә.

✔Алдан хәбәр итеүебеҙсә, 18 октябрҙә Башҡортостанда COVID-19 буйынса сикләүҙәрең өсөнсө этабы ғәмәлгә инде. Матурлыҡ салонына, косметика, СПА, массаж салонына, солярий, мунса, саунаға, физкультура-һауыҡтырыу комплексына, фитнес-клубына, бассейнға, 50 ултырыу урынынан артыҡ йәмәғәт туҡланыу урынына ингәндә вакциналау тураһында QR-коды, быға тиклем ауырығаның тураһында белешмә йәки кире һөҙөмтәле ПЦР-тест күрһәтергә кәрәк.

✔Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Татьяна Голикова коронавирусҡа бәйле 30 октябрҙән 7 ноябргә тиклем ял көндәре иғлан итергә тәҡдим иткәйне. Голикова шулай уҡ ҡайһы бер төбәктәрҙә ял көндәрен 23 октябрҙән үк индерергә кәрәк тине. Премьер - министр Михаил Мишустин да был тәҡдим менән килеште. Рәсәй Президенты В. Путин 30 октябрҙән 7 ноябргә тиклем ял көндәре иғлан итеүҙе раҫланы, эш хаҡы һаҡланасаҡ, тип билдәләнә.

✔ ***Илебеҙ тарихы, минең уйымса, ғөмүмән, бер яҡлыраҡ ҡына яҡтыртыла. Күп осраҡта илебеҙҙә йәшәгән күп милләтле халыҡ тураһында башҡа осорҙарҙа ла бөтөнләй тиерлек иҫкә алынмай.***





ментһыҙ йорт һәм ер участкаларын да законлаштырыу мөмкинлеге бирәсәк был проект шарттары бик ҙур ташламаларға торошло, тиелә.

Бер объекттың бер нисә милексеһе булған бәхәсле осраҡтарҙы ла ябай юл менән теркәүҙе вәғәҙәләгән был закондың маҡсаты ниҙә? Теркәлмәгән күсемһеҙ милек объекттары илдә бик күп, тиҙәр, шунлыҡтан, дәүләт уларҙан һалым йыя алмай ыҙалай икән. Төрлө фараздар буйынса, Рәсәйҙә 70-80 процент самаһы күсемһеҙ милек рәсми теркәлмәгән. Эксперттар билдәләүенсә, 2021 йылдың тәүге кварталында күсемһеҙ милектән 423,3 млрд һум аҡса йыйылған, ә был бөтөн күсемһеҙ милек (шул иҫәптән, теркәлмәгәндәрҙе лә ҡушып) күләменең ни бары 20-30 процентын ғына тәшкил итә. Бына ни өсөн кәрәк дәүләткә "дача" амнистияһы. Ҡаҙна того бүҫкәргәс, байҙар байҙарса һалым түләмәгәс, бюджет тулыландырыу хәстәре ябай халыҡ елкәһенә төшә: һуңғы ваҡыт ниндәй генә һалым һәм штраф төрҙәре һалынмай был "ябыҡ, тарамыш", меҫкен елкәгә. Хатта ғаилә бюджетына бер аҙ файҙа, килем булһын өсөн ҡара тирен ныҡырып ус аяһылай участкаһында ер соҡоған баҡсасыларҙан да файҙа күрмәксе хөкүмәтебеҙ. Йомшаҡ итеп түшәлгән ҡатыға ултырыуыбыҙ бер бөгөн түгел дә, шулай ҙа бигүк күңелле лә түгел.

Ярай, пенсионерҙарҙан башҡаларға йылына бер һалымы нисек тә түләнер. Ысынлап та, пенсионерҙар был йәһәттән рәхмәтлелер: баҡса участкаһы тотҡан өсөн улар һалымдан азат ителгән. Уның ҡарауы, шул уҡ пенсионер, мәҫәлән, баҡсаһында үҫтергән һәм үҙенән артып ҡалған йәшелсә-емеш, картуф-фәләнен һата алмай. Документы булмаһа. Ә ул документты урындағы үҙидаралыҡ органынан барып алырға кәрәк. Продукция үҙ баҡсамда үҫтерелде һәм үҙ ихтыяжымдан артып ҡалды, тиғән был белешмәлә мотлаҡ баҡса еренең дөйөм майҙаны күрһәтелергә тейеш. Әгәр продукцияһын һатырға теләгән граждандың баҡса участкаһы майҙаны 50 сутыйҙан артыҡ булһа, был кеше эшҡыуар булараҡ теркәлгәндән һуң ғына үҙе үҫтергән хәләл йәшелсәһен һатыуға сығара ала. Өҫтәүенә, һатылған продукция килеменән дәүләткә һалым түләргә һәм хатта ки декларация тултырырға бурыслы.

Баҡсасылыҡ "әтнәкә"ләре бының менән генә бөтмәй әле. "Граждандарҙың үҙ ихтыяждары өсөн баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек менән шөғөлләнеүе хаҡында" 2017 йылғы, шулай уҡ төҙәтеүҙәр һәм үҙгәрештәр менән 2021 йыл ҡабул ителгән баҡсасылыҡ ширҡәттәре тураһындағы закондар баҡсасыларҙың һәүетемсә генә тыныс тормошон боҙоп, ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып бутаған кеүек тәьҫир итте. Хәҙер беҙҙең баҡса ширҡәтендәге Валя ҡарсыҡтың хәсрәте яҡшы аңлашыла: Маняша ҡушаматлы, мул һөтө менән бөтөн күршетирәне кинәндергән кәзәкәйе менән хушлашырға тура киләсәк уға. Бер кемгә лә ҡамасауламай, "етәкләп" йөрөтөп кенә көткән кәзәнең шифалы һөтө бала-сағаға, бөгөнгө пандемия мәлендә үпкә сирлеләргә дауа ине. Һөт һатыуҙан әҙ генә булһа ла килем ала ине әбей. Һәм, ғөмүмән, аҡыллы, йомарт кәзәкәйе менән "почти әхирәттәр" ине. Хәҙер нимә булыр улар менән?

Валентинанан өс өй аша йәшәүсе Зәкирә исемле пенсионер ҡатын иһә участкаһында тиҫтәнән ашыу тауыҡ аҫрай, ләкин уның шөғөлөнә лә юл ябыҡ хәҙер. Яңы закон буйынса баҡсасылыҡ ширҡәтендә участка ерен тәғәйенләнеше буйынса файҙаланмаған өсөн был уңған хужабикәләргә "административ хоҡуҡ боҙоуҙары өсөн" ер участкаларының кадастр хаҡынан 0,5-1 процент күләмендә штраф янай. Уйлап ҡараһаң, законлаштырылған үҙ ерендә үҙ иркең буйынса йәшәргә тейешһең дә бит, күршеләргә ҡамасауламай, улар ризалығы менән. Ә күршеләр бик тә ҡәнәғәт инеләр: уларға ла артып ҡала торғайны экологик таҙа "ауыл" һөтө менән тәмле йомортҡа. Бөгөнгө аҙыҡ-түлек ҡиммәтселеге заманында үҙ продукцияңа етәме инде! Пенсиялары наҡыҫ булыуға, илдә аҙыҡ-түлек ҡиммәтләнә барыуына был эшсән ҡатындар гәйепле түгел бит...

Яңыртылған баҡсасылыҡ законы, әйтерһең дә, граждандарҙан штраф йыйыу өсөн генә сығарылған, тиерһең. Хәҙер үҙ баҡсаңда ҡайҙа баҫҡаныңды абайлап, "ҡаса-боҫа" йәшәргә ҡала - "кругом" штраф: ҡый үләне үҫһә һәм уның бер нисәһе, Алла һаҡлаһын, күрше еренә сығып китһә; түтәлдәргә күләгәһе төшөп йонсотҡан ағастарҙы киҫкән өсөн дә; үҙ ереңдә машинаңды йыуһаң да; сүп-сарҙы яғып ебәрһәң дә; һәм хатта участкаң ҡайҙандыр шыуышып килеп ингән... ҡара йыланды үлтерһәң дә... Ә бына арғы яҡтағы күршегә кадастрҙа теркәлмәгән теплицаһы өсөн штраф сәпәгәндәр. Әйткәндәй, башҡаларға һабаҡ булһын: штраф түләмәйем, тиһәң, теплицаңды капиталь нигеҙгә ултырт һәм ул йыйылмалы булмаһын. Отпускыла-фәлән булып йә сирләп китеп оҙаҡ килә алмайынса, участкаңды ҡый үләне баҫһа, 500-ҙән алып 2 меңгәсә, ә инде зарарлы балтырған (борщевик) үҫеп сыға ҡалһа, 5 меңең менән хушлаш. Бында әле баҡсаңдағы ҡоҙоҡ, мунса, бәҙрәф, һарай кеүек ҡоролмаларҙың бер-береһенән шунса-шунса аралыҡта булғаны-булмағаны өсөн дә штраф төрҙәре байтаҡ, уларын тәсфирләп торорға, ғәфү итегеҙ, түҙемлек тә, ҡағыҙ бите лә етмәҫ кеүек.

Шуның өсөн баҡса алырға уйлаһағыҙ, закон акттары менән ныҡлап танышып сығығыҙ, ошо өлкәлә эшләгән белгестәр, юристарға мөрәжәғәт итегеҙ, ни тиһәң дә, был сығымдарығыҙ бихисап баҡса штрафтарынан күпкә кәмерәк булыр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺЕГЕҘ...

**?**

***Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй Президенты В.Путин тарих дәреслектәрен тәнҡитләне. Был хаҡта һеҙ ниндәй фекерҙә?***

***Ринат ШӘЙБӘКОВ, мәғариф ветераны, Белорет районы Йәйәк ауылы:*** Ил башлығы ғына түгел, илебеҙҙең байтаҡ граждандары ла дәреслектәр менән ҡәнәғәт түгелдер, тип уйлайым. Бер Советтар Союзы Геройына нисә милләт вәкиле тура килгәнлеге буйынса үҙ милләттәренең "оло ағай"ҙан бер ҙә кәм түгеллеген иҫәпләп сығарып та иҫбат итеүселәр бар риза булмағандар араһында (әйткәндәй, был исул менән иҫәпләгәндә осетиндар - беренсе, ә республикабыҙҙа күпләп йәшәгән милләттәрҙән урыҫтар - икенсе, украиндар - өсөнсө, белорустар - дүртенсе, башҡорттар - бишенсе, мордвалар - етенсе, татарҙар - унынсы, сыуаштар - ун икенсе урында икән). Был исулды дәлил итеп ҡоралланып, "Ҡайны халыҡ Бөйөк Ватан һуғышында батырыраҡ булған?" тип бәхәсләшеү бөтөнләй урынһыҙ, әлбиттә. Шулай ҙа күп милләтле Советтар Союзы халҡының еңеүен тик рус халҡы менән иңгә-иң терәп көрәшеүсе, уртаҡ Ватаныбыҙ өсөн ғүмерҙәрен биргән төрлө милләт халыҡтарының да Еңеүгә индергән өлөшөн күрмәмеш тә белмәмеш булыу, тарих китаптарында, айырыуса мәктәп, вуз дәреслектәрендә улар хаҡында бер ниндәй мәғлүмәт тә бирмәү яҡшы түгел. Был өлкәлә объективлыҡ талап иткәс, эҙмә-эҙлелек, намыҫ кәрәк. Дәреслектәрҙә ошо етешһеҙлектәр бөтөрөлөргә тейеш!

Һуғыш осорон яҡтыртҡан темаларҙа батыр башҡорт халҡы тураһында, исмаһам, бер генә юл да яҙылмауы менән кеүек башҡорт милләтле кеше күңеленә лә шундай ауыр, әлбиттә. Федераль дәреслектә 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры М. Шайморатов, дивизияның башҡа батырҙары, тағы Муса Гәрәев, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, Зәбәй Үтәғолов, Даян Мурзин һәм башҡалар мотлаҡ атап үтелергә тейеш тип иҫәпләйем! Иң сағыу батырлыҡтар тураһында тейешле темаһы үткәндә, йә булмаһа, өҫтәмә тема (мәҫәлән, "Еңеүҙе күп милләтле совет халҡы яуланы") индерелгән дәреслек ҡулланып, илебеҙ халыҡтарының Бөйөк Еңеүгә индергән өлөшөн өйрәнеп була. Бында минә ҡаршы сығыусылар, һәр төбәк тейешле теманы үткәндә үҙ яғы материалын өҫтәргә тейеш, тиер. Был дөрөҫ, ғүмер баҡый шулай эшләй инек инде, шунһыҙ булмай ҙа. Тик был ғына етмәй. Федераль кимәлдә илебеҙ тарихы айырым милләттәр тарихынан тороуы һыҙыҡ өҫтөнә алынырға тейеш! Шулай булмаһа, балаларҙа үҙ милләтенең тарихына ҡараш дөрөҫ формалашмауы мөмкин ("Ил тарихында беҙҙе иҫкә алмағандар, тимәк, ил тарихына индергән беҙҙең өлөш тә шулай ғына булған" тип уйлауҙары бар). Ә инде уҡытыусының да дөрөҫ ҡарашы формалашмаһа, йә тәжрибә туплап өлгөрмәүе арҡаһында ул теманы тейешле аса алмаһа, йә район кимәлендәге методик берләшмәләрҙә (шулай ҙа булып ҡуя) дөрөҫ талап ҡуйылмаһа, балаларҙа бит үҙ төбәге тарихы тураһында дөрөҫ ҡараш булмаясаҡ. Бигерәк тә хәҙерге мәғлүмәт күп төрлөлөгө шарттарында...

Илебеҙ тарихы, минең уйымса, ғөмүмән, бер яҡлыраҡ ҡына яҡтыртыла. Күп осраҡта илебеҙҙә йәшәгән күп милләтле халыҡ тураһында башҡа осорҙарҙа ла бөтөнләй тиерлек иҫкә алынмай. Мәҫәлән, А. Данилов етәкселегендәге авторҙар коллективы 10-сы синыф өсөн сығарған дәреслектә Е.Пугачев етәкселегендәге халыҡ күтәрелешендә башҡорт халҡы, Салауат Юлаев тураһында - ләм-мим! Ә бит хәрәкәттең икенсе осорон, ғөмүмән, башҡорт ихтилалы, тип атарға ла булыр ине, тиғән фекерҙәр байтаҡ тарихсылар араһында, ә дәреслектә, исмаһам, бер генә һөйләм булһасы! Башҡа осорҙарҙы яҡтыртыу ҙа шул кимәлдә генә...

Һүҙем аҙағында "В. Путин бит Сталинград һуғышы тураһында әйтә, ә һин айырым халыҡтарҙың тарихтағы роле тураһында һөйләйһең", тип, әйтерегеҙҙе аңлап, авторҙарға иң дәреслектәр буйынса эшләгәндә ил башлығы иҫкәрмәһен генә түгел, а ябай уҡытыусылар талабын да иҫтә тотһалар ине, тип теләйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Бөрйән районының Ырғыҙлы ауылында дөйөм практика табибы офисы барлыҡҡа киләсәк. Был турала БР Башлығы Радий Хәбиров ауыл халҡы менән осрашҡанда белдерҙе. Офис үҙе 2023 йылда асыласаҡ, киләһе йылда ул проектлана башлай. Бөрйән үҙәк район дауаханаһы баш табибы белдереүенсә, медучреждениела эшләргә белгес тә, ауылдың үҙ ФАП-ы ла бар. Ырғыҙлыға шулай уҡ газ үткәрелә башлаған. Радий Хәбиров Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса илдә тораҡ пункттарға газ үткәреп бөтөүҙе тамамлау программаһы башланды тип иҫкәртеп үтте. Аҙаҡтан ҡышҡа тиклем Ырғыҙлы ауылының үҙәк урамына асфальт түшәүҙе тамамларға ҡушты

✔Ошо көндәрҙә төбәктең 12 йәш ғалимы фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһының 2021 йылғы лауреаттары булды. БР Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә төбәк етәксеһе Радий Хәбиров Финанстар министрлығына был премияның күләмен арттырыу һорауы менән шөғөлләнергә ҡушты. Иҫегеҙҙә төшөрәбеҙ, фән һәм техника өлкәһендәге БР дәүләт премияһы һәр береһе 500 мең һумдан өсәү итеп ике йылға бер тапҡыр тапшырыла.

✔Башҡортостанда социаль яҡтан әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың нигеҙһеҙ артыуын күҙәтәсәк эш төркөмөн булдырыу тураһындағы ҡарарға республиканың Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Эш төркөмөнә республиканың иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов етәкселек итәсәк. Башстат мәғлүмәте буйынса йыл башынан Башҡортостанда картуфҡа хаҡ 20,4 процентҡа, йәшелсәгә 46 процентҡа артҡан. Аҙыҡ-түлеккә хаҡты бөгөн дөйөм алғанда 3,7 процентҡа күберәк түләргә кәрәк.

✔Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле илебеҙ ҡалалары буйлап ҙур ижади сәфәргә юлланды. Бейеүселәр октябрь айында Тверь, Бөйөк Новгород, Санкт-Петербург, Тихвин, Великие Луки, Мәскәү һәм Владимир ҡалаларында сығыш яһаясаҡ. Ижади сәфәр "Беҙ - Рәсәй" милли коллективтар гастролдәре" программаһы буйынса үтә. Проектты РФ Мәҙәниәт министрлығының "Беҙ - Рәсәй" программаһы буйынса "Росконцерт" ойоштора.

ҠЫҪҠАСА

# ЮҒАРЫ ӘҘЕРЛЕКТӘ...

✓ **БР Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле индерелгән юғары әҙерлек тураһындағы указға өҫтәмәләр индерҙе.** Уға ярашлы, 2021 йылдың 25 октябренән 18 йәштән оло граждандар вакцлап һатыу баҙарҙарына COVID-19-ға ҡаршы вакциналау тураһында сертификат йәки һуңғы алты айҙа коронавирус менән ауырығанды раҫлаған белешмә күрһәтеп кенә инә аласаҡ. Был ауыл хужалығы һәм махсуслашҡан аҙыҡ-түлек баҙарҙарына ҡағылмай. 2021 йылдың 1 декабренән ошо уҡ документтарҙы санатор-курорт ойошмаларына, профилакторийҙарына, пансионаттарына һәм ял йорттарына барғанда күрһәтеү мотлаҡ буласаҡ. Быға тиклем индерелгән сикләүҙәр ҙә гәмәлдә ҡала. Әйтелгән сертификат-белешмәләргә ҡушып республикала йәшәүселәр вәкәләтле вазифалы шәхестәр талабы буйынса паспорт йәки шәхесте раҫлаусы башҡа документ та күрһәтергә тейеш.

✓ **БР Ғаилә һәм хеҙмәт министрлығының Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү республика үҙәге ҡарамағында Координация үҙәге яңынан эшләй башланы.** Үҙкурсалау режимында булғандар (65 йәштәнололар һәм хроник сирлеләр) 8-800-775-0014 телефоны буйынса ғариза ҡалдыра ала. "Кызыу линия" буйынса аҙыҡ-түлек, дарыуҙар, тәү сиратта кәрәкле тауарҙар һатып алыу, сүп-сар сығарыу кеүек хеҙмәттәр башҡарылыуға ғаризалар ҡабул ителә. Шылтыратыуҙар эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем ҡабул ителә. Бынан тыш, ололар, хроник сирлеләр, 1 һәм 2 төркөм инвалидтары "Берҙәм Рәсәй"ҙең "Беҙҙең хәстәр" ирекмәндәр үҙәгенә 8-800-201-89-03 телефоны буйынса шылтыратып, ғариза ҡалдыра ала. Республикала Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге эшләүе тураһында ла иҫкәртәбеҙ. 8 (347) 218-19-19 телефоны буйынса шылтыратып, дауаланыу, бушлай дарыуҙар алыу, хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ белешмәләрен эшләтеү кеүек һорауҙар менән мөрәжәғәт итергә мөмкин. Белеүегеҙсә, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирустан прививка яһатмаған 65 йәштән оло граждандарға мотлаҡ үҙизоляция режимы тураһында указға ҡул ҡуйҙы. 13 октябрҙән уларға иртәнге сәғәт 11-ҙән төшкө сәғәт 1-гә тиклем аҙыҡ-түлек артынан магазинға, дарыуханаға, табиптарға (шул иҫәптән вакцина яһатырға), дачаға, ҡаланан ситтәге йортҡа һәм зыяратҡа барырға ғына рөхсәт ителә.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәтендә юлдарҙа газ яғыулығы тултырыу станцияларының үҫеш мәсьәләләре ҡаралды. 2023 йылға 20 газ станцияһы асыла, 2024 йылға республикала улар бөтәһе 58 буласаҡ.** "Предприятие һәм ойошмалар газ-мотор яғыулығында эшләүсе транспортты торған һайын күберәк файҙалана. Мәҫәлән, "Башавтотранс"та 256 автобус, йәғни дөйөм парктың алтынан бер өлөшө метанда эшләй. "Әле Tesla компанияһы йылдам үҫешә, автогиганттар электромобилдәр етештереүгә күберәк иғтибар бүлә. Шуға күрә водителдәргә унайлы булһын өсөн АЗС-тарҙа газ һәм электр энергияһы менән заправкалауҙы ла ойоштороу мөмкинлеген ҡарарға кәрәк. Был водителдәр өсөн бик унайлы булыр ине", - тип тәҡдим итте Премьер-министр Андрей Назаров. Сәнәғәт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса республика юлдарында бөгөн 160 электромобиль йөрөй. Төбәктә улар өсөн 10 заправка эшләй, шуларҙың алтаһы Өфөлә, икеүһе Нефтекамала һәм Бишбүләк менән Өфө райондарында - берәр. Быйыл Өфөлә тағы ла өс электр заправкаһы асыласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕР КӘРӘКМЕ, АҠСАМЫ?

**БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров үткәргән сираттағы Хөкүмәт ултырышы ташламалы категория граждандарға ер участкалары биреү мәсьәләһен ҡараны.**

- Беҙҙә күп балалы йәки инвалид бала тәрбиәләүсе ғаиләләр милкенә бушлай ер участкалары, ә 2020 йылдан башлап ер участкаһы урынына 250 мең һум күләмендә бер тапҡыр аҡсалата түләү тейешлеген иҫегеҙгә төшөрәм, - тине Андрей Назаров. - Тәжрибәнән күренеүенсә, альтернатив сара булараҡ, бер тапҡыр бирелеүсе аҡсалата түләү һорау менән файҙалана һәм был, әлбиттә, күп балалы һәм инвалид бала ҡараусы ғаиләләр араһында сираттың кәмеүенә лә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, былтырғы йылдың октябренән алып республикала аҡсалата түләү хаҡында 600 таныҡлыҡ тапшырылған.

БР ер һәм милек мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская билдәләүенсә, республикала тағы ла 18 мең ғаилә ошондай дәүләт ярҙамын көтә. 2021 йылда ер участкалары биреү бер тапҡыр түләнеүсе 250 мең аҡсаһын алырға теләүселәр иҫәбенә күпкә кәмене (төүге ярты йыллыҡта ни бары 490 участка бүленгән). Былдай хәл айырыуса ер участкаларының хаҡы бер тапҡыр түләнеүсе сумманан кәмерәк булған муниципаль райондарҙа күҙәтелә.

- Республикала үткәрелгән анкета-һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, өс һәм унан күберәк балалы, шулай уҡ инвалид бала ҡараусы 18 189 ғаиләнең 80 проценты ер участкаһы урынына аҡсалата түләү алырға теләк белдерә, - тип аңлатма бирә Наталья Полянская.- Бының өсөн республика бюджетынан 3,5 млрд һум аҡса бүлеү талап ителә.

Премьер-министр Андрей Назаров медицина хеҙмәткәрҙәре һәм уҡытыусыларға ер участкаһы бүлеү мәсьәләһенең нисек хәл ителеүе менән ҡыҙыҡһынды. "Әлеге ваҡытта шәхси йорт төҙөлөшө һәм шәхси ярҙамсы хужалыҡ өсөн бушлай ер бүлеү ҡаралған муниципаль райондарҙа эшләүсе уҡытыусыларға һәм медицина хеҙмәткәрҙәренә ер биреү хаҡында БР Мәғариф һәм БР Һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтары менән берлектә закон проекты әҙерләнә, - тине Н.Полянская. - Йәш белгестәр ауылда эшкә ҡалһын һәм бушлай бирелгән ерҙә һатып китмәһендәр өсөн участка тәүҙә 5 йылға ҡуртымға биреләсәк, аҙаҡ унда йорт һалынғас, ер уларға хосуси милек итеп тапшырыласаҡ. Был белгестәрҙе ауылда ҡалдырыу өсөн яҡшы сара. Әлеге законды ҡабул итеү был йүнәлештәрҙә белгестәр ҡытлығын хәл итеү мөмкинлеге бирәсәк һәм төбәктәге социаль-иҡтисади хәлгә ыңғай йоғонто яһаясаҡ".

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ РИЗЫҠТЫ ҺАЙЛА!

**Башҡортостанда "Беҙҙең Бренд. Халыҡ таныуы" тип аталған туҡланыу аҙыҡтарының беренсе төбәк конкурсына старт бирелде.**

Ул 25-нән 27 ноябргә тиклем Өфөлә алтынсы тапҡыр үткәрелгән "Беҙҙең бренд" аҙыҡ-түлек фестивале сиктәрендә уҙғарыла. Уны БР Ауыл хужалығы министрлығы һәм Башҡортостан күргәҙмә компанияһы ойоштора. Теләгән һәр кем беренсе тапҡыр теге йәки был район-ҡаланың фирма продуктына үҙенең тауышын бирә ала. Уны "Беҙҙең бренд" сайтында эшләргә була. Үҙ муниципаль берәмегендән иң яҡшы продукт номинацияһына әләгеү эшҡыуарҙар өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. "Беренсенән, был сара ҡайһы районда ниндәй продукт етештерелеүен белергә, фермерҙарға, предприятиеларға үҙен танытырға, продукцияһына иғтибар йәлеп итергә булышлыҡ итәсәк, - ти БР ауыл хужалығы министры урынбаҫары Юрий Лысов. - Шулай уҡ Башҡортостан халҡы үҙенең тауышы ярҙамында теге йәки был аҙыҡтың сифаты, хаҡы, тәме тураһында мәғлүмәтте еткерә аласаҡ. Республикала етештерелгән аҙыҡ-түлекте таныу, Башҡортостан бренды бал һәм ҡымыҙ ғына түгеллеген, ә тағы йөҙләгән юғары сифатлы, экологик яҡтан таҙа, тәмле ризыҡтар барлығын аңлау йәһәтенән дә бик яҡшы". Конкурста ҡатнашыу өсөн ваҡыт бар. Сайтта мәғлүмәт урынлаштырыу мәсьәләһе буйынса эшҡыуарҙар үҙенең районындағы йәки ҡалаһындағы бизнес-шерифтарға мөрәжәғәт итә ала. Сайтта тауыш биреү 22 ноябргә тиклем дауам итә. Конкурс еңеүселәре 25 ноябрҙә "Беҙҙең бренд" фестивален асыу тантанаһында иғлан ителәсәк.

# ТАЛҠАҪ ҺАҠЛАНАСАҠ!

**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры яңы махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһен булдырыу тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Баймаҡ районындағы Талҡаҫ күле һаҡланыусы статусын алды. Был туралағы документ хоҡуҡи мәғлүмәт порталына һалынған.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 15 майҙа Баймаҡта үткән кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Талҡаҫ күленә махсус һаҡланыусы тәбиғәт биләмәһе статусы биреү тураһында бурыс ҡуйҙы. Төбәк етәксеһе әйтеүенсә, Баймаҡ районы халҡы бына күп йылдар дауамында файҙалы ҡаҙылмаларҙы табыу буйынса күләмле эштәр башҡарған эшҡыуарҙарҙан интегә. Улар күп осраҡта тәбиғәтте һаҡлау законДарын боҙоп эшләй. Атап әйткәндә, Иҫән, Түбә, Һаҡмар, Темәс ауылдарында йәшәүселәр "Семенов руднигы" йәмғиәтенең Талҡаҫ күленән алыҫ түгел урында карьер асырға йыйыныуына бәйле муниципалитетҡа һәм республика власторына мөрәжәғәт иткән. Хәҙер был биләмәлә тәбиғәттең һаҡланыуына зыян килтерерҙәй эшмәкәрлек тыйылды. Быға файҙалы ҡаҙылмаларҙы эҙләү, разведкалау, табыу, бырауларлау эштәре, төҙөлөш, сәнәғәт балыҡсылығы, һыу аҫты һунары кеүек эштәр инә.

# "КӨНЬЯҠ" ПАРКЫ

**Өфөлә ошо атамалағы биҫтәлә парк булдырыу һәм уны төҙөкләндереү эштәре дауам итә.**

Төҙөлөш 2019 йылда ташландыҡ баҡсалар һәм бушлыҡ урынында башланды: территорияның планировкаһы эшләнде, ҡара тупраҡ килтерелде, ағастар ултыртылды, һыу һәм ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы селтәре үткәрелде. Бында павильон, сәхнә, фонтан комплексы, бәҙрәф, яҡтыртыу системаһы, автоматлаштырылған һыу һиптереү ҡоролмаһы эшләнгән. Ял итеү майҙансыҡтарынан тыш, бер нисә спорт һәм уйын зонаһы бар, воркаут өсөн тренажерҙар ҡуйылған.

Төп подрядсы булған "Потенциал" компанияһының дөйөм мәсьәләләр буйынса директор урынбаҫары Эдуард Остапчук белдереүенсә, элек был биҫтәлә ял зонаһы етешмәгән, шуға күрә халыҡ эш башланырҙан алда уҡ үҙҙәренең тәҡдимдәрен индергән. Ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында объектты тапшырыу ваҡыты кисектерелгән. "Беренсенән, төҙөлөш барышында проект үҙгәртелде: балалар майҙансығы концепцияһы ҡабаттан эшләнде. Һуңынан тәьминәтселәр менән ауырлыҡтар килеп тыуҙы. Ҡайһы бер төҙөкләндереү элементтары республикала етештерелмәгәнлектән, уларҙы алдырыу өсөн Санкт-Петербургҡа заказ эшләргә тура килде һәм сентябрь башынан алып уның килгәнен көтәбеҙ. Шулай уҡ тажҙәхмәт сире һәм башҡа миҙгел ауырыуҙары ла үҙгәреш индерҙе" - ти ул.

Дөйөм алғанда, төп эштәр тамамланған тиерлек. Әле видеокүҙәтеү системаһы монтажлана, тротуар плиткаһы һалына, бәләкәй архитектура формалары ҡуйыла, спорт һәм балалар майҙансыҡтарын төҙөкләндереү тамамлана.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡаланың Карл Маркс һәм Пушкин урамдары киҫелешендә "Йәшлек Хаус" Йәштәр йорто асылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Йәштәр сәйәсәте буйынса БР дәүләт комитеты етәксеһе Яна Гайдукка был бинаны республикаға файҙалы һәм кәрәкле идея-проекттар менән тултырырға ҡушты. "Күп нәмә йәштәр хәрәкәте етәкселәренең эшмәкәрлегенә бәйле. Улар - сәйәси йәштәр берекмәләре етәкселәре, Йәштәр хөкүмәте ағзалары, ирекмәндәр хәрәкәте лидерҙары, төҙөлөш отрядтары етәкселәре, КВН-сылар, блогерҙар, төрлө ҡыҙыҡлы субкультуралар. Беҙҙәге йәштәр сағыу, ижади һәм көслө булырға тейеш", - тине Радий Хәбиров.

✓Өфө ҡалаһы башлығы Сергей Греков хәбәр итеүенсә, баш ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары итеп Рөстәм Ғәлиев тәғәйенләнде. Ул иҡтисади блокты етәкләйәсәк. Сергей Греков белдереүенсә, хакимиәттең был өлкәһе бик мөһим булып тора. Өфөнөң 450 йыллығына ҡарата ҙур эштәр башҡарыу көтөлә.

✓Өфө мэрияһы хәбәр итеүенсә, 25 октябрҙә төшкө сәғәт 4-тән 6-ға тиклем йорт хайуандарын прививкалау ойоштороласаҡ. Адресы: Әй урамы, 69. Хакимиәттән белдереүҙәренсә, был сараларҙы ҡулланыу сирҙең барлыҡҡа килеүен иҫкәртәсәк, ҡала халҡының именлеген тәьмин итәсәк. Үтә киҫкен инфекциялы ҡоторуу сире һөҙөмтәһендә йылы ҡанлы хайуандарҙың һәм кешенең баш мейеһе кире ҡайтарып була алмаҫлыҡ үҙгәрештәргә дусар була. Был сир ауырыу хайуандан тешләнгәндә йәки инфекциялы шайыҡ лайлалы тиресәгә, йәрәхәтләнгән тирегә эләккәндә йоға.

✓Комсомол урамының СССР-ҙың 50 йыллығы урамынан Шафиев урамына тиклемге араһын асыу йәнә кисектерелде. Хәрәкәт 1 сентябрҙә асылырға тейеш ине. Мэрия мәғлүмәте буйынса, 8 Март урамында яңы яҡтыртҡыстар, кәртәләр ҡуйыла, кеше үткәргес тротуарҙарҙы һәм техник һыҙаттарҙы ҡороу тамамлана. Комсомол урамында светофорҙар яңыртыла, яҡтыртҡыстар, һыу ағыҙыу улаҡтары, техник һыҙаттар һәм тротуарҙар ҡорола, борт таштары ҡуйыла, һуңғы участокта асфальт-бетон япмаһының өҫкө ҡатламы түшәлә. Был объекттарҙа эштәр муниципаль контрактҡа ярашлы 2021 йылдың 20 ноябрендә тамамланасаҡ.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Шулай итеп, ремонт өс этаптан тора: постамент, каркас һәм тышҡы йөҙө. Былар барыһы ла Өфөлә етди өйрәнелгән, белгестәр теманы белә. Әгәр йәмәғәтселек яғынан хеҙмәттәшлек, ярҙам булһа, барыһы ла яҡшы булыр.*



*КӨНАУАЗ*

# ЙӘМӘҒӘТСЕЛЕК МЕНӘН...

## Салауат Юлаев һәйкәле тураһында



**Республика етәкселеге йәмәғәтселек менән Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау мәсьәләһе буйынса осрашып һөйләште, сөнки активистарҙы монументтың тәүге йөҙө һаҡланып ҡалыу-ҡалмау проблемаһы борсой, шулай уҡ уға ысынлап та ремонт кәрәклегенә лә шик белдерелә ине.**

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов йәмәғәтселек менән осрашыуҙың Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың инициативаһы булыуын, Башҡортостандың һәм Өфөнөң символы, илдең хәҙерге замандағы иң сағыу скульптуралары исемлегенә ингән халыҡ батыры һәйкәле тирәләй тыуған төрлө мифтарҙы таратыу маҡсатында ойошторолоуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Билдәле булыуынса, 2019 йылда Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса фәнни-производство үҙәге белгестәре объектты тикшереү ваҡытында бик күп етешһеҙлектәр таба. Шул ваҡыттан алып коррозия майҙаны тағы ла 10 процентҡа арта, постамент 7 сантиметрға ултыра, иретеп йәбештерелгән урындар тағы ла насарлана бара, һәйкәл эсендә хатта ҡоштар оя ҡора, постамент аҫтындағы ҡая елгә бирешә һәм йыуыла.

Бында бер ни тиклем майҙандағы фонтан да ғәйепле, тип белдерә эксперттар. Шуға ремонт эштәренең төп бурысының береһе булып ҡорған тупрағын нығытыу ҙа тора. Ҡуйылыуына ярты быуат үткән һәйкәлдең эсендә лә проблемалар етерлек. Әгәр ул тышҡы яҡтан һауа торошо һөҙөмтәһендә тутлаһа, уның эске буш өлөшөндә конденсат барлыҡҡа килеп, шулай уҡ материалды ашай.

Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы Азамат Ғәлин йәмәғәтселектең проблеманы аңламауы бер нисә сәбәпкә бәйле булыу ихтималлығын аңлатты. "Тәү сиратта - ул мәғлүмәт етешмәүе. Халыҡҡа шунда уҡ фотоларҙы һәм видеоны күрһәтергә кәрәк булған. Икенсенән, ремонт хаҡы - бер урында 100 миллион тиелһә, икенсе урында 600 миллион күрһәтелә. Һәйкәл фрагменттарын иретеп йәбештереп бергә йыйғас, ярыҡтарҙың тәбиғи булыуы тураһында фекер йөрөнө. Шунда уҡ, халыҡ проблемалы яңылыҡтарҙа "хайп" йыя, тиергә түгел, ә хәл-торошто матурлап аңлатырға кәрәк ине", - тине Ғәлин.

Вице-премьер Азат Бадранов Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағында Һәйкәлде реставрациялау мәсьәләләре буйынса йәмәғәт советы булдырыласағы һәм уның барлыҡ мәғлүмәт һәм документтарҙы алыу мөмкинлегенә эйә буласағы тураһында белдерҙе. "Беҙ һәйкәлдең торошо ҡәнәғәтләнерлек булмауына, 60-сы йылдар технологияларының алмаштырыу талап ителеүенә инандыҡ. Был мәсьәләне сәйәсиләштереүҙең мәғәнәһе юҡ. Иң хәүефлеһе - власть менән йәмәғәтселек һәйкәлдең яҙмышы тураһында һөйләшеп килешә алмаһа, ул ҡасан да булһа Ағиҙелгә ҡолаясаҡ. Ул 54 йыл торған һәм ремонттан һуң тағы ла 100-150 йыл торасаҡ", - тине вице-премьер.

Документтарҙы раҫлау тамамланһа, ремонт эштәрен 2022 йылдың май-июнендә башлау күҙаллана. График һәм техник шарттарҙы үтәгәндә эштәрҙе туғыҙ айҙа тамамларға мөмкин. Монументтың тышҡы йөҙө үҙгәрмәһен өсөн уны алырҙан алда объекттың 3D-һүрәте төшөрөләсәк. Һәйкәл төҫө һайланған да инде - иң баштағыса һәүерташ-һоро (көлһыу) төҫтә буласаҡ. Алдан хәбәр ителеүенсә, ул бер ҡайҙа ла алып кителмәйәсәк, ә шунда уҡ майҙанда реставрацияланасаҡ.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

***Салауат ЩЕРБАКОВ, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы, 40-тан ашыу монументаль һәйкәл авторы:*** Дөйөм алғанда, хәл торошо сәләмәт һәм фекер алышыуҙа ҡыҙыҡһыныусыларҙың шул тиклем күп булыуы яҡшы. Улар барыһы ла рухи ҡиммәтебеҙ өсөн борсола. Салауат Юлаев образы башҡорттар өсөн ысынлап та бик мөһим... Үҙемдең атайымды ғына алғанда ла был аңлашыла: ул бит миңә юҡҡа ғына ошо исемде һайламаған. Һәр башҡорт өсөн был мөһим мәсьәлә. Шуға күрә, әйҙәгеҙ, хәл итәйек: һәйкәлгә реставрация кәрәкме, кәрәкмәйме? Яуап асыҡ кеүек. Бер кем дә уның һаҡланырға тейешлегенә шикләнмәй һәм бының менән барыһы ла риза. Уның шулай булмаҫҡа тейешлеген теләгән бер генә ойошма йәки яман ағай ҙа юҡтыр. Башҡортостанда бындай персонаждар була алмай. Барыһының да маҡсаты бер - һаҡларға һәм хаталанмаҫҡа. Һәм беҙ етди тикшеренеүҙәр үткәрелеүен, проекттың әҙерләнеүен һәм раҫланыу этабында икенлеген күрәбеҙ

Һәйкәлде алмаштырыу тураһындағы күҙаллауҙарға килгәндә, ысынлап та, ҡайһы бер урындарҙа бындай хәлдәр булды. Флоренцияла Микеланджелоның мәрмәр "Давид"ы 400 йыл торғас, уны һаҡлау өсөн Сәнғәт академияһына алып, күсермәһе менән алмаштырҙылар. Парижда шулай уҡ мәрмәр статуяларҙы Луврға алып, уларҙың күсермәләрен ҡалдырҙылар. Әммә Өфөлә суйындан ҡойолған һәйкәл торасаҡ.

Шуға күрә мәсьәләнең техник яғына ла күҙ һалайыҡ. Беренсенән, хәүеф постаментҡа һәм ярҙың грунтына янай. Икенсеһе - каркастың тұҙыуы. Эстән буш булған скульптураларҙың барыһы ла ике өлөштән тора - эске нигеҙҙән һәм "ҡабыҡ"тан. Заманында ҡабығы титандан булған билдәле "Эшсе һәм колхозсы" скульптураһын каркасы тұҙыу һөҙөмтәһендә реставрацияларға тура килә. Әммә Салауат Юлаев һәйкәле ғәҙәти булмаған материалдан - суйындан эшләнгән һәм ул 60-сы йылдарҙа скульптура өсөн яңылыҡ булып тора. Суйын тутыға, ә хәҙер каркасты тутыҡмай торған материалдарҙан эшләйҙәр.

Скульптураның үҙенең проблемаһына килгәндә, бында төп мәсьәлә - уның терәүендә. Римда Марк Аврелий һәйкәле менән дә ошоға оҡшаш хәл була: атлы статуя өс терәүҙә тора һәм спираль буйынса борола башлай. Уны нисек итеп кире урынына ҡайтарыу буйынса компьютер моделен эшләйҙәр. Хәҙер Петербургта Николай Беренсе һәйкәлен реставрациялайҙар, уны йылыға, махсус бинаға алғандар. Салауат Юлаев һәйкәлен шундағы майҙанда реставрацияларға йыйыналар - былай ҙа мөмкин.

Реставрация өсөн нимә кәрәк? Күтәреү механизмдары һәм каркасҡа инеү. Ҡабыҡҡа килгәндә, ундағы ярыҡтар емерелеү менән янамай, әммә быны ла инҡар итеп булмай. Шулай итеп, ремонт өс этаптан тора: постамент, каркас һәм тышҡы йөҙө. Конденсатты, йәғни материалдарҙың коррозияға йоғонто яһаған статик электр барлыҡҡа килтереүен бөтөрөргә кәрәк. Былар барыһы ла Өфөлә етди өйрәнелгән, белгестәр теманы белә. Әгәр йәмәғәтселек яғынан хеҙмәттәшлек, ярҙам күрһәтелһә, барыһы ла яҡшы булыр. Быны менән нимә әйтергә теләйем: йәмәғәтселек яғынан ышаныс булһа, яуаплылыҡ тағы ла артасаҡ.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# БАЙРАМ ҠАРШЫЛАП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылда үтәсәк Өфө ҡалаһе ойошторолоуҙың 450 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек мәсьәләләре буйынса эш кәңәшмәһе үткәрҙе.**

Сарала төҙөкләндерелергә тейеш объекттар исемлеге, транспорт инфраструктураһы, фасадтарҙы һәм биналарҙы архитектура яҡтыртыуы мәсьәләләре тикшерелде. Тәү сиратта ҡатнашыусылар баш ҡала парктарын һәм скверҙарын яңыртыу планын ҡараны. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Сергей Греков белдереүенсә, киләһе йылда Совет майҙанын реконструкциялау тамамланасаҡ. Бынан тыш, Черниковкала Нефтехимиктар паркы төҙөкләндереләсәк, Инорста Теплое йылғаһы ярында һәм Дан бульварында төҙәлөш-ремонт эштәре башланасаҡ. Шулай уҡ Затонда - "Тулҡын", Йәшел сауҡалыҡ биҫтәһендә - "Көньяҡ", Һупайлыла - "Ҡашҡаҙан", Черниковкала Беренсе Май парктарында эштәр тамамлана, иғтибар үҙәгенә ҡала үҙәге һәм Глумилино сыға. Баш ҡала үҙәгендә юлдарҙы төҙөкләндереү, биналарҙың фасадын ремонтлау, ял зоналары булдырыу, Октябрь Революцияһы урамын һәм Коммунистик урамында юлды реконструкциялау күҙаллана. Глумилино биҫтәһендә юлдар, социаль объекттар - балалар баҡсалары, мәктәптәр, бассейн, Спорт көрәше үҙәге барлыҡҡа киләсәк. Салауат Юлаев проспекты оҙонлоҡҡа дауам ителәсәк, Ағиҙел аша күперҙәр һалынасаҡ, Әй урамы Менделеев урамына тиклем һуҙыласаҡ. Республика Башлығы Радий Хәбиров Өфө ҡалаһы хакимиәтенә һәр объект буйынса юл картаһын эшләргә һәм төҙәлөш-монтаж эштәрен билдәләнгән ваҡытта тамамларға ҡушты.

# ЯҢЫ ДАУАХАНА

**Аэропорт ҡасабаһында Өфөнөң 1-се поликлиникаһы һәм 2-се балалар поликлиникаһы урынлашҡан бинаны асыу тантанаһы уҙҙы.**

Тантанаға йыйылыусы рәсми вәкилдәр ҡасабала йәшәгән балаларҙы һәм өлкәндәрҙе ҡабул итеү мөмкинлеге биргән яңы берҙәм урын барлыҡҡа килеүен билдәләне. 2000 йыл башынан алып Аэропорт ҡасабаһында 2-се балалар поликлиникаһының педиатр кабинеты иҫке бинала эшләп килде, 2015 йылда уны яптылар. Шул ваҡыттан алып урындағы ата-әсәләр балаларҙы медицина процедураларына, белгескә күренергә, вакцинацияға ҡалаға йөрөтөргә мәжбүр ине. Халыҡ Башҡортостан Башлығынан медкабинетты кире асыуҙы һораны. Үҙ сиратында Радий Хәбиров ҡасабала пациенттарҙы ҡабул итеүҙе яңынан ойошторорға ҡушты. Быныҡ өсөн өлкәндәр һәм балаларҙың поликлиникаһы участкалары урынлашасаҡ модулле бина ҡорорға ҡарар ҡабул итэлде. "Өфө" халыҡ-ара аэропорты модулле бинаны ҡороу сығымдарын үҙенә алды.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Яҡындан насар күреү

Кеше олоғая бара яҡындан насар, алыҫтан яҡшы күрә башларға мөм--кин. Был осраҡта түбәндәге бер нисә халыҡ дауаһын ҡулланып ҡарарға була.

❖ 8 ҡалаҡ киптерелгән гөлйемешкә 4 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас ябып, талғын утта 15 минут ҡайнатырға. Шунан термосҡа ҡойоп алып, 5 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Гөлйемеш төнәтмәһенә 4 ҡалаҡ бал ҡушырға. Йәшкә бәйле күҙ яҡындан насар, алыҫтан яҡшы күргәндә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәлә япрағына (киптереп ваҡланған йәки йәш) 1 стакан ҡайнатылған һыу ҡойорға. Утҡа ҡуйып, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм 5-7 минут тотҡас, һүндерергә. Һыуыҡансы төнәтеп һөҙөргә. Ҡыҙыл көртмәле төнәтмәһен ашарҙан 10-15 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был төнәтмә бөйәл ҡыуҙырыуын иҫәпкә алырға кәрәк.

❖ Шулай уҡ 3-әр өлөш гөлйемеш, ҡарағат япрағы йәки емеше һәм 1 өлөш кесерткән япрағынан яһалған төнәтмә лә файҙалы. Уны әҙерләү өсөн йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ауыҙын ябып 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә ике тапҡыр - иртәнсәк һәм кис яртышар стакан эсергә.

❖ 1 балғалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡапҡас ябып 30-40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Дауаны һәр ашағандан һуң 1-әр ҡалаҡ эсергә. Һары мәтрүшкәнең тәме оҡшаһа, уны сәйгә лә ҡушырға мөмкин.

### Холестерин

❖ Кәстрүлгә яҡынса ярты килограмм һоло һалып, өҫтөнә 2 литр һыу ҡойорға һәм талғын утҡа ҡуйырға. Һыуы ике тапҡырға кәмегәнсе ҡайнатырға. Ошо рәүешле яһалған кеҫәлде бер ай дауамында көнөнә бер нисә тапҡыр теләгән ҡәҙәре һыу урынына эсергә. Һөҙөмтәлә холестерин кимәле түбәнәйә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ҡалаға барһа, ауыл ҡатын-ҡыҙҙары әллә ҡайҙан айырыла ине: баштарында яулыҡ. Аяғында һәр ваҡыт ойоҡ булды. Ялан бот йөрөмәне улар. Хәҙер гүзәл заттарҙың ауылда йәшәгәндәре лә, ҡаланыҡылар ҙа бер тиң.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

1882 йылда Мәскәүҙә үткән Бөтә Рәсәй сәнәғәт күргәҙмәһенә ҡағылышлы отчеттарҙа һәм хәбәрҙәрҙә Бошма-Суун-Ҡара ҡыпсаҡ улысынан (Ырымбур губернаһы) оҫта Әхмәтйән Мөхәмәтовтың исеме телгә алына. Уның күргәҙмәгә ҡуйылған ижауҙары һәм башҡа әйберҙәре юғары баһаланған.

50-се йылдар аҙағы - 60-сы йылдар башына ҡараған этнографик архив материалдары менән танышыу барышында XIX быуаттың икенсе яртыһы - XX быуат башында Ғафури районы Түбәнге Ташбүкән ауылында ал бирмәҫ оҫта йәшәүен белдек. Был Камал Ҡунаҡкужин, ағас сылбырҙар, дүңгәләкле ижау һәм төрлө вазалар эшләгән. Ташбүкәндә йәшәгән оло йәштәгеләрҙең береһе, үҙе лә ағас оҫтаһы Ғәни Ғәзизов йәш сағында Камал менән аралашҡан. Ул Камал оҫтаны Өфөлә генә түгел, башҡа ҡалаларҙа ла яҡшы белә инеләр, тип иҫбатлай. Ғәни һүҙҙәренә таянғанда, Ҡамалға йыш ҡына сувенирҙар артынан килгәндәр һәм хатта "батша үҙе һарайға Камалдың әйберҙәрен алып барыу өсөн становой ебәрткән". Ҡунаҡтарға бигерәк тә дүңгәләге эсенә Өфө губернаһының символы - һыуһар һырылған сылбыр оҡшаған. Бер ваҡыт Камал ағас самауыр яһап барыһын да ғәжәпләндергән, тип әйтелә хәтирәләрҙә.

Был ерҙәрҙең төньяҡтараҡ урынлашҡан Ҡолҡан ауылында үҙҙәренең данлыҡлы оҫтаһы - Сөләймән Рәхимов булған. Ул 90-сы йылдарҙа армиянан ҡайтҡас, семәрле ижау, ҡымыҙ туҫтағы, ҡашыҡтар, көрәгәләр яһай башлай.

Архангел районы территорияһында семәрле ҡашыҡ-аяҡтарҙы Тәүәкәс ауылынан Ҡотлоәхмәт Ишмөхәмәтов яһаған. Уның семәрле ижауҙары, төрлө ҙурлыҡтағы туҫтаҡтары, батмандар һәм байрам көрәгәләре яҡын-тирәләге ауылдарға таралған. Ҡайһы саҡта ул әйберҙәрен Иглин баҙарына сығарған. XX быуаттың 50-се йылдарында ул эшләгән кәрәк-яраҡтар тыуған ауылының һәр өйөндә тиерлек тотонолған.

XX быуатҡа башҡа райондарҙа ла ағас эшенең йүнәлештәре айырыла башлаған. Халыҡ ҡайһы ауылда май һәм ҡымыҙ көбөһө, туҫтаҡ, ҡашыҡ, тараҡ һәм иләүестәр, орсоҡ, урынағас һ.б. эшләүҙәрен белгән. Йыш ҡына һөнәри оҫталыҡ атанан улына күскән.

XX быуат алдынан һөнәрселәр һәм сувенирҙар кәсебе үҫеш ала. Өфө губернаһында быға 1894 йылда нигеҙ һалынған Губерна Һөнәрселек Комитеты булышлыҡ иткән. Күргәҙмә оҫтаханалар асылған, ваҡыты-ваҡыты менән һөнәрсе-етештереү күргәҙмәләре ойошторолоп торған. 1910 йылдың көҙөндә Стәрлетамаҡ күргәҙмәһе эшләй, унда киң һатыуға тиҫтәләгән әйбер сығарылған; күп кенә экспонаттар Стәрлетамаҡ өйәҙе кәсептәрен сағылдырған. Шулай уҡ кустарь әйберҙәрҙе Ҡазан (1909 йыл) һәм Омскиҙа (1911 йыл) уҙғарылған күргәҙмәләргә лә ебәргәндәр.



Һөнәрселек Комитетының эшмәкәрлеге башҡорт оҫталары ижадына йоғонто яһаған. Стәрлетамаҡ өйәҙенең бер нисә ауылында (Сәйетбаба, Түбәнге Ташбүкән, Имәндәш һ.б.) ҡала ҡулланылыусыһына тәғәйен әйберҙәр сығарыла башлай: һырланған ҡул таяҡтары, шәмдәл, ваза, ҡумта, һабы оронан яһалған бысаҡтар һ.б. Сувенир сифатында ҡымыҙ ижауҙары һәм туҫтаҡтар эшләнә. Башҡорт оҫталарының ижадын баһалаусылар байтаҡ булған.



*Һырлы ҡул таяғы һәм һырлы шәмдәл. РЭМ фондынан. XX б. башы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

КЛАСС СӘҒӘТЕ

# МИН КЕМ?

**Нимә һуң ул - эго? Телмәрҙә был һүҙ һирәк ҡулланыла. Ә бына уның тамырҙаш һүҙе - эгоизм беҙгә бик тә таныш. Шунда уҡ тик үҙен генә яратҡан тәкәббер кеше күҙ алдына баҫа. Эго һүҙенең мәғәнәһенә артыҡ төшөнөргә тырышып та тормайбыҙ. Ә кәрәк. Сөнки эго - ул "мин". Һин, йәғни һинең "мин"ең. Дөрөҫөн әйткәндә, эго - ул беҙҙең эске "мин"ебеҙ. Башҡалар өсөн билдәһеҙ "мин"ебеҙ. Был донъяла бөтәбеҙҙең дә үҙ урыны бар. Беҙ буш урын түгел, беҙҙең эгобыҙ бар! Төнөн йондоҙло күккә бағып уйланғанығыҙ барҙыр, моғайын. Уның сиге юҡ. Уйыбыҙ менән уның сигенә етә алмайбыҙ. Үҙегеҙҙең эске донъяғыҙҙың сиген тояһығыҙмы? Юҡтыр. Бына нимә ул - эго! Мәңгелек сикһеҙ йыһан уртаһында беҙҙең төпһөҙ, аңлап етмәҫтәй эгобыҙ бар. Башығыҙҙы бутаныммы? Улайһа, мәҡәләне ситкә ҡуйып, бер ябай ғына тест эшләп ҡарайыҡ.**



Ҡағыҙ бите, ҡәләм алығыҙ ҙа ҡағыҙҙың ҡап уртаһына "Мин кем?" тип яҙығыҙ. Хәҙер, бағаналап, ошо һорауға 12 тапҡыр яуап бирегеҙ. Яуаптарығыҙ төп килеш (кем? нимә?) һорауҙарына яуап бирерлек булһын. 1 минут эсендә! Башланыҡ! Секундомерҙың тауышы ишетеләме?

60 секунд үтте! Күреп торам, белеп торам, күптәрегеҙгә ваҡыт етмәне. Ябай ғына һорау, эх һеҙ! Күрәһең, беҙ үҙебеҙгә был һорауҙы бирә һалып бармайбыҙ, былай ҙа беләбеҙ һымаҡ. Шулай ҙа тикшереп ҡарайыҡ. Башта яуаптарығыҙҙы 4 өлөшкә бүлегеҙ: 1-3/ 4-6/ 7-9/ 10-12.

Әҙәм балалары өсөн тәүге башланғыс нимә? Әлбиттә, кеше булыу. Мин - кеше, тип, беренсе өлөштә моғайын яҙғанһығыҙҙыр? Эйе, беҙ үҙебеҙҙе хайуандар донъяһынан айырып ҡарайбыҙ. Улар ҙа беҙҙең кеүек йән эйәләре, әммә беҙ башҡа! Академик Павловтың эттәр менән үткәргән тәжрибәләрен мәктәп программаһы буйынса иҫләйһегеҙҙер? Эткә ашарға бирәләр ҙә ҡыңғырауҙы шылтыраталар. Ашарға бирәләр ҙә ҡыңғырау төймәһенә баҫалар. Шулай күп тапҡырҙар дауам итәләр. Әлбиттә, ашарға биргән һайын эттең шайыҡ бүленеп сыға. Тәжрибәнең дауамында эткә ашарға бирмәйҙәр, ә ҡыңғырауҙы шылтыраталар. Ашарға юҡ, ә шайыҡ бүленә. Ни өсөн? Эйе, эттә шартлы рефлекс барлыҡҡа килде. Быны, йәғни шартлы рефлексты, Павлов беренсе сигнал система тип атай.

Шартлы рефлекстар тормош барышында барлыҡҡа килә. Ә бит тыуғанда уҡ һалынған тәбиғи инстинкттар ҙа бар әле. Мәҫәлән, үҙ-үҙеңде һаҡлау менән тоҡомдо дауам иттереүҙе иҫкә төшөрәйек. Хайуандар ҙа, кешеләр ҙә гүмере өсөн көрәшә. Үлемдән ҡурҡыу тойғоһо ябай ғына йән эйәләрен дә ҡурҡыныс урындан алып ҡаса. Ҡайһы бер кешеләр, мәҫәлән, бейеклектән ҡурҡа, икенселәр - һыуҙан. Ҡурҡа инде, сөнки ул тойғо беҙгә генетик код булып, тыумыштан уҡ һалынған. Шыннан шына ҡағып ҡына сығарып була, тигәндәй, төрлө фобияларҙан көслө ҡурҡытыу менән генә ҡотолоп була, тиҙәр. Мәҫәлән, йыландан ҡурҡҡан кешене ул тойғоһонан йыландар менән тар урында бергә йәшәтеп кенә. Тере ҡалһа инде! Ярай, быныһы икенсе мәсьәлә. Әле инстинкттар тураһында һөйләшәбеҙ. Тоҡомдо дауам итеү инстинкты шулай уҡ кешеләргә лә, хайуандарға ла хас. Тимәк, тестың беренсе өлөшөндә үҙегеҙҙең кеше икәнегеҙҙе иҫкә төшөрһәгеҙ, һеҙ үҙегеҙҙе хайуандар донъяһынан айырып ҡарайһығыҙ. Әлеге лә баяғы Павловтың раҫлауы буйынса кешеләрҙә, хайуандарҙан айырмалы рәүештә, икенсе сигнал системаһы бар. Ул да булһа - телмәр! Бала аңлы рәүештә һөйләшә башлаһа, ул икенсе сигнал системаға эйә булды, тип аңларға кәрәк. Һүҙҙәр ярҙамында беҙ аралашып ҡына ҡалмайбыҙ, фекерҙәребеҙҙе белдерәбеҙ, хис-тойғоларыбыҙҙы ярып һалабыҙ.

Әҙәм балалары өсөн икенсе башланғыс нимә? Эйе, енси айырмалыҡ. Гендерлыҡты әле бер кем дә юҡҡа сығармаған. Яуаптарығыҙҙың икенсе өлөшөндә бармы ошо айырмалыҡ? Булһа, бик шәп! Әлбиттә, ир менән ҡатын тип яҙмаһағыҙ ҙа, атай - әсәй, малай - ҡыҙ, ағай - апай, олатай - өләсәй, тип яҙһағыҙ, айырмалыҡ күренә бит инде.

Яуаптарығыҙҙың өсөнсө өлөшөндә социаль хәлегеҙ күренәме? Йәғни, мин - уҡытыусы, уҡыусы, агроном, начальник, эшсе һ.б. Был яуап һеҙ үҙегеҙҙе йәмғиәттең бер өлөшө итеп тояһығыҙмы, әллә юҡмы икәнде күрһәтә.

Дүртенсе өлөш иң мөһиме, ул да булһа - ижади башланғыс. Әҙәм балаһы был донъяға булдырыу өсөн тыуған, юҡҡа сығарыу өсөн түгел. Береү өсөн - алыу һәм онтау өсөн түгел. "Бер йылға ла үҙ һыуын эсмәй, бер ағас та үҙ емешен ашамай, ҡояш яҡтырта һәм йылыта, әммә үҙ йылыһын ҡулланмай, бер сәскә лә хуш еҫен үҙе өсөн таратмай". Ниндәй матур һүҙҙәр! Яуаптарығыҙ араһында "мин - йылға, ҡояш, ағас, сәскә" һымаҡтары бармы? Булһа, һеҙ ижади кеше! Унында һеҙгә! Башҡалар өсөн йәшәгеҙ, үҙ халҡығыҙға хеҙмәт итегеҙ, Аллаһҡа яҡынайығыҙ! Эгоист булмағыҙ! Ашар өсөн генә йәшәп, яйлап кеше икәнегеҙҙе онотоп ҡуймағыҙ.

Тестың интерпретацияһы бына ошолай. Мин кем, тигән һорауға бер тамсы ғына булһа ла аныҡлыҡ индерһәгеҙ, бик шәп.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был дәрестә эгоның нимә икәненә яуап бирер өсөн тәүге генә аҙым яһаныҡ. Әле түбәнге аң тураһында һөйләшмәнек. Бәлки ул түбәнге түгелдер, ә төпкө, төптәге аңдыр? Киләһе дәрестә шул турала һөйләшербеҙ. Фекер туплағыҙ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

МАТУР ХӘТИРӘ

# АЛТЫН БАШЛЫ БИСӘНӘН...

## баҡыр башлы ир артыҡ, тиһәләр ҙә

**Олоғая килә үткәндәр йышыраҡ иҫкә төшә. Шуға ла өлкән быуын кешеләре осрашһа, күберәк бала сағын, йәшлеген иҫкә төшөрә. Беҙ ҙә йыш ҡына бергәләп инәйҙәрҙе, апайҙарҙы хәтерләп алабыҙ.**

Элек ауыл ҡатын-ҡыҙҙары заман ауырлығына ҡарамай, күңелле йәшәне. Бер-береһенә өмәгә йөрөнө, ҙур мәшәҡәттәрҙе ҡулалмаш эшләне. Ҡаҙ өмәләре нисек гөрләп үтә торғайны! Йәй етһә, сөгөлдөр утау, көҙөн уны йыйып тапшырыу ҙа күберәк гүзәл зат иңенә төштө. Туғайҙарҙа балан, муйыл тиргән дә ҡатын-ҡыҙ ине. Бигерәк тә гөлйемеште ярышып йыя инек беҙ. Күрше Күгәрсен районы Йомағужа ауыл дауаханаһында ошо киптерелгән емешкә алмаштырып мамыҡ бирә торғайнылар.

Ҡышҡы оҙон кистәрҙә лә ауыл ҡатын-ҡыҙҙары күберәк бергә үткәрә ине. Йә өмә үткәреп, юрған-түшәк яһаны, күбене. Йә йыйылышып дебет иләп, шәл бәйләне. Ул заманда үәл (вуаль) бәйләй белмәгән ҡатын-ҡыҙ булмағандыр. Ярышып бәйләй торғайнык: кемдеке матурыраҡ, ҙурыраҡ, күпереп тора. Ул ваҡытта был шөғөл ярайһы ҙур ғына килем дә килтерә ине. Бер шәлгә балаларҙы кейендерергә була ине. Бәйләм бәйләгән ҡатындарҙың ярты төнгә тиклем өйөндә ут һүнмәне. Йоҡо иҫәбенә ойоҡ-бейәләйҙәр ҙә бәйләнде, сөгөлдөр утағанда ла хатта аҙ ғына ял ваҡытында ла ҡулдан бәйләм төшмәне.

Көйөнтәләп һыу ташыҙы, усаҡтан ут өҙөлмәне, самауыр һәр ваҡыт шыжлап ултырҙы, сөнки күп ғаиләләр ишле булды. Береһен мәктәпкә оҙатаһың, икенсеһен ҡаршы алаһың. Хәҙерге кеүек электр сәйнүге, газ юҡ. Балаларҙан тыш, малтыуар, ҡош-ҡорт күп аҫралды. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары бесәнгә лә, ырҙын табағына ла, фермаға ла эшкә өлгөрҙө. Күптәр үҙҙәре менән балаларын да йөрөтөп, эшкә өйрәтте.

Ҡалаға барһа, ауыл ҡатын-ҡыҙҙары әллә ҡайҙан айырыла ине: баштарында яулыҡ. Ябынмаған осраҡта ла, аяғында һәр ваҡыт ойоҡ булды. Ялан бот йөрөмәне улар. Хәҙер гүзәл заттарҙың ауылда йәшәгәндәре лә, ҡаланыҡылар ҙа бер тиң. Уларҙы һис тә айырырлыҡ түгел. Зауыҡлы итеп кейенә лә, биҙәнә лә беләләр. Элекке кеүек, бөтәһе лә сүпрәнән баш ҡуйып, икмәк бешерә белмәһә лә, күптәр автомобилдә лә "ауыҙлыҡланы". Бәҡса ла үҫтерә, ҡаҙ-өйрәк тә алып аҫрай, сиратлап көтөү ҙә көтә. Йәй көнө ҡаланан ҡайтҡан балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен тәмле-татлы ризыҡтар бешереп ҡаршы ала һәм күстәнәстәрен тейәп оҙата ла. Һөт-ҡаймағын, майын-эремсеген, ҡоротон, һөҙмәһен сумкаһына тултырып, матур кейенеп, баҙарға барып һатып аҡса ла эшләй белә. Ә бына хәҙерге һәм элекке ауыл ҡатын-ҡыҙҙары араһында бер генә айырма бар - бөгөн гүзәл заттар сөгөлдөр утамай.

Халҡымда "Алтын башлы бисәнән баҡыр башлы ир артыҡ" тигән әйтем бар барлығын. Әммә барыбер донъя йөгөн бөгөн дә ҡатын-ҡыҙ тарта...

**Миңзәлә САНГИШЕВА,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Мәләүез районы Этҡәсәк ауылы.**

✓ *Бында ҡаршын башҡорттарының император Петр I етәкселегендә Азовта һәм Ҡырымда (1695 - 1696 йылдар) алып барылған хәрби кампанияла ҡатнашыуы хаҡында мәғлүмәт бирелә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БЕҘ - ҠАРШЫНДАР, ЯУГИР ЗАТЛЫ БАШҠОРТБОҘ



Хәҙерге замандың бәгзе бер тикшеренеүселәре, ғилми яҡтан раҫланған факттарҙы инҡар итеп, халыҡтарыбыҙҙың этник сығышын һәм дә уларҙың тарихи процестарҙағы ролен тик бер яҡлы, субъектив сәйәси ҡараштарға ярашлы хәл итергә ынтыла. Әммә тарихты боҙоп күрһәтеп кенә уны үҙгәртеп булмай. Мәҫәлән, билдәле булған тарихи документтарҙа (урыҫ йылъяҙмасылары теркәп ҡалдырған) 1552 йылда Иван Грозный батшаның Ҡазан ханлығына яу менән килгәнендә уның ғәскәре сафтарында Ҡасимов ханлығы "татарҙары" иҫәбенән "тархандар, башҡорттар, можеряндар" телгә алына. Шул уҡ рус сығанаҡтарында Иван Грозныйҙың 150 меңлек ғәскәрендә уртаҡ "татар" исеме аҫтында Әстерхан, Ҡасимов, Нуғай, Ҡабарҙы һәм хатта Мордва яугирҙары телгә алына (ул замандағы рус традицияһына ярашлы, Уралда, Волга буйында, Кавказда йәшәүсе башҡа халыҡтар бер үк "татар" этнонимы менән аталып йөрөтөлә), улар батша ғәскәренең өстән бер өлөшөн тәшкил итә.

Иҙел-Урал ерлегендә киң билдәле булған Темников кенәзе Йәнекәй тоҡомдарынан булған мырҙалар (Еникеевтар) үҙ яугирҙары менән Иван Грозный ғәскәрен Алатыр йылғаһы аша сығарышып, һуңынан Ҡаҙанды штурмлауҙа ҡатнаша. Был заманда этник сығыштың уртаҡ булыуына әллә ниндәй иғтибар бирелмәй - үҙ сюзеренына (ант биргән хакимға) тоғро ҡалыуға өҫтөнлөк бирелә. Профессиональ һуғышсылар булған башҡорттар бер үк заманда бер-береһенә сәйәси яҡтан буйһонмаған Себер, Ҡасимов, Ҡазан һәм Мәскәү хакимдарына хеҙмәт итә, улар етәкселегендәге ғәскәр сафтарында яуҙарҙа ҡатнаша. Ҡаҙан ҡалаһында рус баҫҡынсыларына ҡаршылыҡ күрһәтеүсе ғәскәр сафтарында шул уҡ башҡорт тархандары, нуғайҙар, ҡырымлылар, Әстерхан төркиҙәре, черемистар (мариҙар), ә Ҡаҙан кландарынан барын, ширин, ҡыпсаҡ, арғын һәм манғыт төркиҙәре була.

Ҡаҙан ҡалаһы баҫып алынғандан һуң уның урамдарындағы талау-үлтерештәр элекке ханлыҡ территорияһында айырым-айырым отрядтарҙан торған партизан хәрәкәте йәйелеп китеүгә сәбәп була. Ул саҡта Иван Грозный хакимиәтендә хеҙмәттә булған кенәз Андрей Курбский рус полктарының, ҡаршы тороусы "бусурман воинство"һын эҙәрлекләп, ҡайһы тарафтарҙа хәрәкәт итеүен теркәп ҡалдыра: "...аж за Уржум и Меш реку за лесы великие и оттуда аж до Башкирска язык, иже по Каме реке вверх к Сибири протязается..."

Ошо документтар Ҡаҙан һуғышынан һуң иҫән ҡалған башҡорт яугирҙарының, үҙ иленә табан йүнәлеп, Кама буйлап уран, ирәкте һәм ғәйнә башҡорттары биләгән ерҙәргә кире ҡайтыуын дәлилләй. Ошо партизан һуғышы барышында башҡорт яугирҙары Свияжск воеводаһы Борис Салтыков отряды тар-мар итә. Ҡаҙан йылъяҙмасыһы рус яугирҙарының һәләк булған урынын да теркәп ҡуйған: "...заведоша его в Башкирские улусы..."

Ҡаршын ырыуының рус хакимиәте ҡулы аҫтына инеүе хаҡында аныҡ мәғлүмәттәр табылмаған. XVII быуатҡа ҡараған сығанаҡтарҙа айырым Ҡаршын улусы теркәлгән: ул Ҡармасан йылғаһы үренән уның тамағынаса, шулай уҡ Кәрәкә, Һикеяҙ, Нурлы, Ағарҙы, Шемәк, Ҡарамалы, Күгел, Батҡаҡ һәм ошо тарафтағы башҡа вағыраҡ йылғалар буйындағы ерҙәрҙе биләй. Ҡаракүл, Аракүл, Ҡалтау, Кәрәкә һәм башҡа ваҡ күлдәр ошо олоҫ территорияһына ҡарай. Ҡаршындарҙың Ҡармасан йылғаһы үрендәге аҫаба ерҙәре Ҡырыҡ өйлә-Мең һәм Ҫыбы-Мең улустары менән сиктәш була. Ҡармасандың һул яғынан ҡаршындарға күрше булған Ҡаңлы һәм Дыуанай улустары башлана. Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйлап, Удел-Дыуанай ауылына йәнәш һәм шулай уҡ Байтур, Оса Ҡурғаш йылғалары үҙәнендә лә байтаҡ ҡына ҡаршын ерҙәре була, улар хәҙерге Благовещен һәм Мишкә районлары территорияһына инә. Ҡаршын олоҫо заманында ҙурҙарҙан булып, хәҙерге Кушнаренко, Өфө, Благовар, Шишмә һәм Бүздәк районларының да байтаҡ ҡына өлөшөн биләп тора.

Борондан яугирлыҡ һөнәре менән көн иткән ҡаршын башҡорттары Мәскәү батшалары ғәскәренә лә хәрби хеҙмәткә яллана. Бер тарихи документта 1700 йылда ҡаршын ҡарттарынан яҙып алынған мәғлүмәт теркәлгән: "...они были на нашей великого государя службе под Азовом и в Донском походе и подводы гоняют беспрестанно денно и нощно стоят на большой Казанской дороге". Бында ҡаршын башҡорттарының император Петр I етәкселегендә Азовта һәм Ҡырымда (1695 - 1696 йылдар) алып барылған хәрби кампанияла ҡатнашыуы хаҡында мәғлүмәт бирелә. Батша армияһында хәрби хеҙмәтте үҙ иткән башҡорттар Бөйөк Петрҙың Төньяҡ һуғышында ла (1700 - 1721 йылдар) ҡатнаша, беҙҙең яугирҙарҙан 1 000 кешенән торған экспедиция отряды ойошторола. Улар Нева йылғаһы тамағы һәм Ижор ере өсөн барған алыштарҙа ҡатнаша. Әлбиттә, ул замандағы башҡорт ғәскәрендә ҡаршын яугирҙары ла күп була, уларҙың аҫаба ерҙәре Өфө ҡалаһына яҡын булғанлыҡтан, ҡаршын ырыуының абруйлы юлбашсылары батша хөкүмәте сәйәсәтенә ҡаршылыҡ күрһәтмәскә тырыша.

Гөмүмән, ҡаршын бейтархандары, ә һуңынан хакимиәт тарафынан тәғәйенләнгән старшиналар бербер артлы ҡабынып торған башҡорт ихтилалдарынан ситтә ҡала. Быны бары бер сәбәп менән генә аңлатып була: ҡаршындар ҙур хәрби көстәрҙе булған Өфө ҡәлғәһе чиновниктары менән ҡапма-ҡаршылыҡҡа килмәйенсә, тоғро булып ҡалыуҙы хуп күрә.

Ике көс - рус хакимиәте сәйәсәтенә ҡаршы булған ырыуҙаштары һәм ихтилалда ҡатнашҡан өсөн күп язалар менән янаған батша һанаттары араһында ҡалған бей-старшиналар йыш ҡына батшаға тоғро ҡалыу юлына баҫа, ә был халыҡ араһында яманаты сыҡҡан "вирнай" башҡорттар феноменын барлыҡҡа килтерә. Хакимиәт тарафынан ҡуйылған старшина вазифаһы 1735 - 1740 йылғы оло башҡорт ихтилалын баҫтырыу барышында индерелә.

Ҡаршын улусы старшинаһы Шәрип Мораҡов та ошондай заттарҙан була. Көслө, ҡапма-ҡаршылыҡлы шәхес, әммә уның үҙ ырыуҙаштары ла старшиналарын яманлап, Өфөләге рус чиновниктарына шикәйәттәр яҙа. Шәрип Мораҡов, үҙенә күрә абруйлы кеше, бындағы башҡорттар араһында эшҡыуар булараҡ та билдәле була: тирмәндәр тота, кабактар тәҙәй, хакимиәттән шарап менән һатыу итеүгә рөхсәт ала, ырыуҙаштарына билдәле бер ваҡытҡа аҡса биреп тороп, бурыстарын түләгәнгә тиклем үҙенә бушлай эшләтә. Бурыстарын ҡайтара алмағандар ошо ҡомһоҙ старшинаның бер ниндәй ҙә хоҡуғы булмаған ҡолона әйләндерелә, бындай кешеләр уның шәхси милегенә әүерелә.

Рус хакимиәтенең тоғро ялсыһы Шәрип Мораҡов үҙ биләмәһендә башҡаса фекер йөрөткән ырыуҙаштарын эҙәрлекләй, хатта ҡыуып ебәрә. 1735 йылда ул үҙ ырыуҙашы Бирҙеғол Ҡасаевты тотош ауылы менән аҫаба ерҙәренән ҡыуып ебәрә, уның еренә хужа булып, барса мөлкәтен тартып ала. Ҡасай ауылы юҡ ителә. Әлбиттә, ошо яһил старшинаны күрә алмағандар ҙа етерлек була. Шул уҡ 1735 йылда күрше йәшәүсе Ҡырыҡ өйлә-Мең һәм Ҫыбы-Мең улусы башҡорттары үҙҙәренең 1 000 кешенән торған ихтилалсылар отряды менән Шәрип Мораҡовтың ауылын баҫып ала: "...приезжали Каршинской волости к башкирцу Шерипу Мрякову, у которого де Шерипа и у деревенских жителей отогнали скот и пожитки побрали, и хотели оного Шерипа убить до смерти".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 39-40-сы һандарҙа).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Немец командованиеһы, ҡамауҙа ҡалған 7-се гвардия корпусын тулыһынса тар-мар итәсәгенә ҙур өмөттәр бағлап, 16 февралдән кисенә Чернухино районына 2 пехота дивизияһын һәм 50 танкыһын йүнәлтә. Уларға кисекмәҫтән корпустың айырым частарына һөжүм итергә бойорола. 17 февралдә иртәнсәк Чернухинонан төньяҡ-көнсығыштараҡ хәрби эшелон менән килтерелеп төшөрөлгән моторлаштырылған дошман пехотаһы ла уларға ярҙамға ашыға. 17 февралдә кискә табан немецтарҙың ҙур төркөмө (500-ҙән ашыу һалдат), Чернухиноны урап уҙып, станция урамдарында алышҡан 15-се һәм беҙҙең 16-сы гвардия дивизиялары яугирҙарына ташлана. Әммә дошман атакаһы унышҡа өлгәшә алмай, ҡаһармандарса алышҡан гвардиясылар уны кире ҡаға. Немецтарҙың шундай уҡ икенсе бер төркөмө, 40-лап танк артына ышыҡланып барып, 14-се гв. атлы дивизияһы оборона тотҡан Барон станцияһына һәм Софиевка ауылына һөжүм итә. Гитлерсыларҙың был атакаһы ла кире ҡағыла. Боеприпастары бөткәс, атлыларға М. Демченко исемендәге совхоз районы йүнәлешендә хәрәкәт итергә бойорола.

Дошмандың 21 танк менән көсәйтелгән, 2 батальон пехотанан торған өсөнсө төркөмө Малоивановка ауылынан сығып, 14-се атлы дивизияның 67-се полкы биләгән Демченко исемендәге совхозға һөжүм итә. Бында ошо полктың 1-се эскадроны командиры, гвардия лейтенанты В. Ивановтың яугирҙары, атаевсылар батырлығын ҡабатлап, дошмандың төп көстәренә аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтеп, барыһы ла һәләк була. Полк яугирҙарың яңы рубежда нығыныуын тәьмин итеп, дошман рәттәрен утҡа тотҡан гв. лейтенанты С.Ф. Брагиндың артиллерия батареяһы расчеты ла тулыһынса һәләк була. 14-се гв. кавдивизияһының штаб начальнигы ярҙамсыһы, гв. майоры И.С. Басько гранаталар бәйләме менән дошман танкыһының гусеницалары аҫтына ташланып, немец танкылары атакаһын тотҡарлап тора.

17 февралгә 7-се гв. корпусы частары дошмандың нык ҡоралланған, һан яғынан бик күпкә өҫтөн булған көстәре ҡамауында ҡала. Немец самолеттары беҙҙең яугирҙар биләгән позицияларҙы бер туктауһыҙ бомбаға тота, һәләк булыусылар, яраланыусылар һаны арта бара. Боеприпастар, артиллерия өсөн снарядтар етешмәй. Рядовой яугирҙар ҙа немецтарҙан трофейға алынған ҡоралдар менән һуғыша.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

**Шағир, ғалим, филология фәндәре докторы, профессор Рәшит ШӘКҮРҙең "Ерҙең тере хәтере: топонимика серҙәре" тигән китабы былтыр донъя күргәйне. Был баҫма Башҡортостандың, йәғни Көньяҡ Урал, Урал алды һәм Урал аръяғының, өлөшләтә Урта Уралдың тау, йылға, күл, ҡала, ҡасаба, ауылдар һәм тарихи урындары, тәбиғәт ҡомартҡылары атамаларының килеп сығышын, мәғәнәләрен билдәләү, йәғни этимология мәсьәләләре менән шөғөлләнеү һөҙөмтәһе булып тора.**

**Бөгөн, ер-һыу атамаларының башланғыс исемдәре урыҫсалашып, тарихи йөкмәткеләре юйылып һәм онотолоп бөтөп барған заманда, ер аҡтарып хазина эҙләгәндәй, халыҡ хәтерен яңыртырҙай, мүк баҫҡандарҙы аҡтарып урғытырҙай булған был баҫма баһалап бөткөһөҙ ҡимməткә эйә. Һәм беҙ гәзит уҡыусыларыбыҙға китаптың дөйөм аңлайышта булған ҡыҙыҡлы урындары, топонимдар, тарихи ҡомартҡылар тураһында автор менән һөйләшеүҙе тәҡдим итәбеҙ.**

# ЕР ХӘТЕРЕН ЯҢЫРТЫП

**Рәшит Зәкир улы, китапта һеҙ Башҡортостан эсендәге генә топонимика менән сикләнмәйһегеҙ. Башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙә ер-һыуҙың боронғо атамаларын һаҡлап ҡала алыу мөмкин булған хәлме?**

- Беҙгә, башҡорт топонимистарына, ғилми эҙләнеүҙәр һәм тикшеренеүҙәребеҙҙе хәҙерге Башҡортостан территорияһы менән генә сикләнмәйенсә, күптән инде Боронғо Башҡортостан биләмәләренә ныҡлап аяҡ баҫырға ваҡыт. Әгәр беҙ эшләмәһәк, Силәбе, Ҡурған, Свердловск, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләрендәге, Татарстан Республикаһындағы, Пермь крайындағы башҡорт топонимия ҡатламдарын кем өйрәнер ҙә, ундағы хаталарҙы кем төртөп күрһәтер?

Ер-һыу атамаларын һаҡлап ҡала алыуҙың бер генә юлы - уны халыҡ телендә дөрөҫ һаҡлау һәм ҡағыҙға ла дөрөҫ теркәү. Әле үҙебеҙҙең ерлектәге, шыр башҡорттар көн иткән төбәктәрҙәге атамалар ҙа руссаға күсә һалып бара, һеҙ күпләп икенсе халыҡ йәшәгән һәм ят телдәргә эләккән топонимдарҙың хәлен күҙ алдына килтерегеҙ. Бына китапҡа индерелгән һәм төҙәтмәләр, аңлатмалар биреп кителгән миҫалдарҙы ғына алайыҡ. Силәбе өлкәһендәге Уййылға ҡушылдығы Коелга. Уны "Коелга" тип кенә атайҙар. Эткүл районында шул уҡ йылға исеме менән ауыл һәм бөтөн илгә киң билдәле мәрмәр ятҡылығы ла бар. Коелга гидронимын, уның урыҫ телендәге яҙылышынан сығып, топонимистар ғәҙәттә ҡуй - "овца" һәм йылға һүҙҙәренән яһалған, йәғни һарыҡ йылғаһы тип аңлаталар. Ләкин, әгәр был йылғаны башҡорттар Ҡуййылға түгел, ә Ҡая йылға тип йөрөткәнен белһәләр, ундай мәғәнәһеҙ топоним уйлап сығармаҫтар ине.

Силәбе өлкәһендәге тағы ла бер гидроним - Зюзельга - Зюзелка. Элегерәк был йылға урыҫ телендә бик үк боҙолмайынса Изюзелга, Узюилга формаһында ҡулланылған. Ырымбур губернаһының 1871 йылда баҫылып сыҡҡан торама пункттар белешмәһендә, мәҫәлән, ул ваҡыттағы Силәбе өйәҙендәге Өҙәйылға йылғаһы ун бер тапҡыр Изюзелга тип теркәлгән. Ә башҡортса дөрөҫ атамаһы иһә - Өҙәйылға. Йылғаның үҙенсәлеге шунда, ул тора-бара ҡайҙарҙалыр өҙөлөп ҡала һәм алдараҡ ҡабаттан йылға булып ағып китә. Был уның һыуҙары ер аҫты юлы менән дә барыуынан аңлатылыр ине, моғайын. Йылғаның был ҡыҙыҡлы ғәҙәтен белгән ерле башҡорттар уны шуға ла Өҙәйылға тип атаған да. Бына ошондай миҫалдар етәрлек.

**Беҙҙең үҙебеҙҙә шул рәүешле һәм башҡа сәбәптәр менән боҙолған топонимдар күпме? Йәки атамалары бөгөнгә башҡорттар өсөн дә аңлашылып етмәгәндәр, мәҫәлән, нисектәр асыҡланамы?**

- Ваҡыт тигән нәмә аяуһыҙ, ул атамаларҙы ғына түгел, хәтерҙе лә юйып ҡуя. Атамаларға килгәндә инде, уларҙы ҡағыҙға теркәгәндә йомшаҡлыҡ күрһәтелгән һәм урыҫсалаштырып нисек еңелерәк әйтелә - шулай яҙылған да, унан киткән, кемдең теле нисек әйтә ала шулай һупалау.

Йүрүҙән йылғаһының уң ярында, асыҡ һоро эҙбизташтарҙан торған осло ҡаялы тау күренеп тора. Дыуан районының элекке Сарапуловка ауылынан ике саҡрымда ятҡан был тауҙы урыҫтар "Сабакай", "Сабакайский камень" тип йөрөтә. Ләкин уның эткә бер оҡшашлығы ла юҡ. Йүрүҙән ошо тәңгәлдә шәп ағып килеп, тауҙың нигеҙ таштарына бәрелеп ҡаҡсый һәм тау эргәһендә йөрөгәндә ошо тулҡын сәрпегән тауыштар туҡтауһыҙ алҡышлап торған һымаҡ ишетелә. Йәғни, күмәк ҡулдар сәпәкәй иткән һымаҡ. Шуға ла урындағы халыҡ был тауҙы Сәпәкәйташ тип атаған.

Республикабыҙҙың Бөрө ҡалаһына яҡын Шәмшәҙе күле бар. Был гидронимдың мәғәнәһен аңламағандар уны Шамшадин да, хатта Шәмсетдин дә итеп бөткән. Бына, күҙ алдында күпме тарихи атамаларыбыҙҙың яҙмышында хаталар ебәрелә.

Нимәне аңлата һуң ул - шәмшәҙе һүҙе? Шәмшәҙе ҡанлы ҡәбиләһе составындағы аҙ билдәле бәләкәй ырыу исеме. Әммә ул ырыу ҙа был атаманы гидронимдан алған. "Шәм" күп төрки телдәрҙә ҡарағай ағасы, ҡарағайлы урман ерҙәре ул. "Шәҙе" - йылға. Шулай итеп, Шәмшәҙе ул ҡарағайлы йылға-күл тигәнде аңлата. Ниндәй матур атама, шулай бит - Шәмшәҙе?

Әлшәй районының үҙәге Раевка ауылы хаҡында ла әйтеп үтәйек. 1938 йылға тиклемге Башҡортостандың географик карталарында Раевка тимер юл станцияһына яҡын ғына Әлшәй ауылы бар ине. Был ауылға XVIII быуат башында Нуғай даруғаһы Яйыҫ-Ҫыбы-Мең улусы башҡорттары нигеҙ һалған. Ауылды башлап ебәреүселәрен ҡарттар оло хөрмәт менән Әлшәй Мәргән тип кенә атап йөрөткән. Әлшәй Мәргән үҙ заманының абруйлы кешеһе булған, халыҡ телендә ҡаһарман йөрәкле, ҡыйыу һәм тоғро тип нарыҡлағандар. Бөгөнгө көндә элекке Әлшәй Мәргән ауылы хәҙерге Раевканың бер өлөшө аҫтында ҡалған һәм хатта атамаһын да юғалтып ҡуйған, үкенесле, әлбиттә.

Бәләбәй районындағы Кутузинка йылғаһы хаҡында ла телгә алайыҡ әле. "Кутузинка" тигән атама һеҙгә берәй мәғлүмәт бирәме? Кутузов тип кенә уйларға мөмкин, шулай бит? Ә "ҡот" тигән һүҙ? Әлбиттә!

Боронғо башҡорттарҙа ҡот төшөнсәһе ҙур урын биләгән. Ҡот ҡойоу, ҡот килтереү, ҡот саҡырыу уларҙа айырым йолалар, ритуалдар менән килгән. Элек был йылғаның Ҡотоҙо ауылы ла, Ҡотоҙо урманы ла булған. Һәм аңлатмалар буйынса ла, ауыл ултыраһы ергә алдан уҡ йола буйынса өшкөрөлөп тоҙ күмелгән икән. Был урындар ошо атамала әле урыҫтар килеп ултырғанға тиклем үк билдәле булған. Ҡотоҙо атамаһы, тимәк, "ҡот тоҙо" тигәндән барлыҡҡа килгән.

Күрәһегеҙ, ошондай үҙгәргән, боҙолған атамалар нигеҙендә аҙыраҡ ҡына соҡонорға һәм дөрөҫөн табып, уны ҡыйыу рәүештә кире ҡайтарыуҙы талап итергә, халыҡҡа аңлатырға кәрәк.

**Ер-һыуҙың боронғо башҡортса исемдәрен ҡайтарыу өсөн нимәләр эшләргә була? Нисек итеп уларҙы халыҡ теленә кире индерергә?**

- Бөгөн, әлбиттә, халыҡтың бик аҙы ғына китап алып уҡый һәм ер-һыу атамаһы аңлатмаһын ғилми яҙмаларҙан эҙләп ултыра. Әммә бөгөн һеҙҙең заманға икенсе юлдар ҙа бар. Мәҫәлән, был хаҡта күберәк яҙырға, интернет селтәрҙәре аша сығарырға, һөйләш теленә сығарырға.

Топонимияның ижадсыһы - халыҡ, ә уның сығанағы халыҡтың үҙ ерендәге тормошо, хеҙмәте, ижады, тәбиғәтте танып белеү һәм үҙләштереү ҡеүәһе, уй-фекер һәм хыял донъяһы, заманалар аша үткән көндәлек эшмәкәрлеге, тарихи яҙмыш юлдары. Был йәһәттән топонимика фольклорға яҡын тора.

Башҡортостан һәм, дөйөм алғанда, Көньяҡ Урал, Урал алды һәм Урал аръяғы топонимияһын өйрәнгәндә беҙ иң элек төбәктең иң мөһим ҡатламын билдәләүсе башҡортса атамалар менән эш итәбеҙ. Был ҡатлам башҡорт халҡының беҙгә билдәле һәм әлегә асыҡланып бөтмәгән алыҫ боронғолоғо менән бәйле. Атамаларҙың ҡайһы берҙәре меңәр йыллыҡ төпкөл дәүерҙәргә барып тоташа. Территория яғынан был ҡатлам Урта Уралдан башлап Ырымбур далаларына, Волга - Кама буйҙарынан алып Тубыл ярҙарына тиклем йәйелеп ята һәм ул, ошо көньяҡ Уралда иң характерлы ҡатлам булараҡ, үҙенсәлекле топонимик төбәк барлыҡҡа килтерә.

Шул уҡ ваҡытта Башҡортостанға төрлө осорҙа төрлө халыҡтар ҙа килеп тула. Татар, мишәр, сыуаш, мордва, мари, удмурт ауылдары үрсей һәм килеүселәр ер-һыуҙы ла үҙләштереү эшмәкәрлегенә тотона. Был процесһа ер менән бергә ошо халыҡтар урындағы топонимик системаны ла үҙләштерә, уларҙың теленә бик күп башҡорт географик атамалары һәм башҡорт телендә һаҡланған бүтән төрлө боронғо атамалар барып инә. Икенсе яҡтан, күсеп килгән халыҡ, әйтәйек, ауылдарға, ауыл тирәһендәге билдәһеҙерәк ерҙәргә үҙенең атамаларын да бирә. Бына, мәҫәлән, Йылайыр районында башҡортса Ҡартлар ыҙмаһы тигән урында урысса Ҡартлаҙма, Мәтеле кисеү янында Мяткися исемле урыҫ һәм Берҙәш, Урыҫ Берҙәше тигән сыуаш, урыҫ ауылдары барлыҡҡа килә. Әлшәй, Бәләбәй райондарында Ыҫлаҡ йылғаһының исеме Ыҫлаҡ, Ыҫлаҡбаш, Яңы Ыҫлаҡбаш тигән сыуаш ауылдарына ҡушыла.

Башҡортостанда Исҡуш һәм Исҡушты (Осҡошто) тигән ауылдар бар. Уларҙың икеһе Балаҡатай районында: Үрге һәм Түбәнге Исҡуш. Бында башҡорттар. Ә Дүртөйлө районында Исҡуш - мари ауылы. Белорет районында Исҡушты (Осҡошто) исемле башҡорт ауылы. Был атамалар барыһы ла башҡортса "өс ҡыуыш" (өс ҡыуышлы, өс ҡыуышты) тигәндән яһалған. Ҡасандыр, ауылдар хасил бул-



***Йүрүҙән йылғаһының уң ярында, асыҡ һоро эҙбизташтарҙан торған осло ҡаялы тау күренеп тора. Дыуан районының элекке Сарапуловка ауылынан ике саҡрымда ятҡан был тауҙы урыҫтар "Сабакай", "Сабакайский камень" тип йөрөтә. Ләкин уның эткә бер оҡшашлығы ла юҡ. Йүрүҙән ошо тәңгәлдә шәп ағып килеп, тауҙың нигеҙ таштарына бәрелеп ҡаҡсый һәм тау эргәһендә йөрөгәндә ошо тулҡын сәрпегән тауыштар туҡтауһыҙ алҡышлап торған һымаҡ ишетелә. Йәғни, күмәк ҡулдар сәпәкәй иткән һымаҡ. Шуға ла урындағы халыҡ был тауҙы Сәпәкәйташ тип атаған.***

***✓ Хәҙер инде, төрлө сәбәптәр арҡаһында ошо хыялдар тормошҡа ашманы, ти. Ул сағында инде хыялда яралған балалар ҡайҙа була тиһегеҙме? Минеңсә, улар донъялыҡҡа тыуыуҙан мәхрүм ителеп, "тыумағандар зыяратына" күмеләләр.***



ғанға тиклем, беҙҙең ата-бабалар был ерҙәрҙә йәйләп, бесән сабып, мал ҡарап йөшәгән. Тимәк, ошо тирәләрҙә уларҙың ҡыуыш ҡороп торор ваҡытлыса торлағы булған. Шунан ҡалған да инде Өс ҡыуыш - Иҫҡуш-Иҫҡушты.

Боронғо иран телле ҡәбиләләрҙән ҡалған Рә, Рәз тигән исемдәрҙә, лабау, ман-мән тамырынан яһалған атамаларҙы ла күрһәтеп үтергә була. Бына күпме "лабау"ҙар беҙҙә: Ылабау күле (Дәүләкән районы, Яңы Япар ауылы), Иглин районында Лабау йылғаһы, Çарт-Лабау исемле башҡорт ауылы. Ә бүтән географик урындарҙа: Кубанда - Лаба йылғаһы, Үҙәк Азияла - Ланбор күле, Лоб тигән урын. Лоб ауылы һ.б. Был атамаларҙың төбөндә һинд-европа телдәрендәге лоб "аҡ" йәки иран телдәрендәге лаб "яр" тигән һүҙ ята.

Башҡортостанда боронғо башҡорт телендә "йылға" мәғәнәһендә -ғаҙы/-гәҙе термины менән яһалған гидронимдар киң таралған: Ауырғаҙы, Түрсәгәҙе, Көйөргәҙе, Тиләгәҙе, Баҙы, Яубаҙы. Беҙҙең төп йылғаларыбыҙ Ағиҙел, Ҡариҙел, Димдең боронғо исеме Күгиҙел иһә иҙел "ҙур йылға" тигән боронғо төрки һүҙенән яһалған. Боронғо болғар һәм башҡорттар Каманы Сулман Иҙел тип йөрөткәндәр. Волганың элекке төрки исеме лә - Иҙел, Итил, Әтил.

Башҡортостанда боронғо төрки дәүеренән килгән топонимдар мәсьәләһен дә аныҡ миҫалдар менән нығытып үткем килә. Ҡариҙел районында Маға тигән йылға һәм Мағы леспромхозы бар. Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында Мағы ҡорған тигән топонимды осратабыҙ. Учалы районы Өргөн күленең исемен, бер яҡтан, монгол телендәге өргөн "иркен" һүҙе менән аңлатып булһа, икенсе яҡтан, боронғо төрки телендә өргин "һарай" тигән һүҙ булғанлығын да иҫәпкә алырға кәрәк. Әбйәлил, Ҡырмыҫҡалы, Борай райондарындағы Үтәгән ауылдарының исеме лә тамырҙары менән боронғо төрки дәүеренә барып тоташа. Өтүкән - боронғо төркиҙәрҙең баш ҡалаһы, төрки ҡағандарының резиденцияһы, был исем яҙмаларҙа телгә алына. Был боронғо Өтүкән топонимы урыҫса Утуген формаһында Йәнәсәйҙең үрге ағымындағы бер тау һыртының исеме булараҡ һаҡланған. Атама боронғо төркиҙәрҙең дини ышаныуҙары менән бәйле рәүештә барлыҡҡа килгән: өтүкән һүҙен "божество земли" тигән мәғәнә менән аңлаталар.

Дөйөм алғанда, Көньяҡ Урал (Тарихи Башҡортостан) топонимик төбәгененң төп һәм иң ҡалын ҡатламы - башҡортса атамалар һәм ул ҡатлам, күреп үтеүебеҙсә, башҡорт халҡының алыҫ мең йыллыҡтарҙан килгән ҙур һәм бай, данлы һәм героик тарихы менән бергә үҫкән, байыҡҡан, ғәжәп үҙенсәлекле бер система булып формалашҡан. Ерҙең хәтер китабында беҙҙә яңынан-яңы асыштар һәм табыштар көтә.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА** һөйләште.

АБВ



# КЛУБ - УЛ БИНА ТҮГЕЛ, Ә КЕШЕЛӘР!

**Һуңғы ваҡытта ауыл клубтарына халыҡтың аҙ йөрөүе һәр кемгә лә мәғлүм. Был осраҡта бар сәбәпте пандемиянан ғына күреү ҙә дөрөҫлөккә тап килмәй. Сөнки 2019 йылға тиклем дә был хәл көсәйгән. Элеккеләй эркелешеп мәҙәниәт йорттарына йөрөүҙәрҙә һағынып иҫкә алырлыҡ. Шул уҡ ваҡытта клубҡа күмәкләп кеше йөрөмәүҙән сығып ҡына клуб кәрәкмәй, тип һығымта яһап буламы? Әйҙәгеҙ, ошо турала фекер йөрөтәйек:**

Элек ауыл халҡы клубҡа иң күбендә кино ҡарарға йөрөнө. Бигерәк тә һинд фильмдары килһә, урын таппай, беҙ уларҙы аяғөҫтө баҫып, йә түүгә рәттең алдына ятып ҡараныҡ. Бөгөн иһә кино телевизор аша өйөбөҙгә килде лә, клубтың ҡаҡ иҙәнен диванға алыштырҙыҡ. Улай ғына ла түгел, интернет аша йәнебеҙ теләгән фильмды ҡарай алабыҙ. Тимәк, заман технологиялары үҫеше клубтың был функцияһын өйөбөҙҙөң эсенә үк күсереп ҡуйҙы. Ауыл клубтарында шуға ла хәҙер фильмдар күрһәтелмәй.

Ҡалаларҙа ла халыҡ кинотеатрҙарға эркелеп йөрөй тип әйтмәҫ инем. Шуға күрә кинофильмдар күрһәтеүселәр ҡала кинояһарайҙарына тамашасыларҙы йәлеп итеү өсөн төрлө саралар уйлап сығара. Уларҙың береһе: кинофильмдарҙы төрлө акустик һәм башҡа 3D форматына оҡшаған ысулдар ярҙамында сифатлы итеп экранда күрһәтеү, икенсеһе - тамашасылар кино ҡарау менән бер рәттән, ял итеп тә ҡайтһын өсөн туҡланыу, уңайлы кресло кеүек хеҙмәтләндереү сараларын ойоштороу.

Бәлегерәк үҙем шаһит булған бер ҡыҙыҡлы хәлде яҙып үткем килә. Бер ҡала мәҙәниәт һарайында шәп кенә кисә үтте. Сара тамамланғас, халыҡ фойеға сыҡҡан урында телевидение хеҙмәткәрҙәре тамашасыларҙың кисә хаҡындағы фекерен төшөрөп торҙо. Барыһына ла: "Һеҙгә кисә оҡшанымы?" - тигән һорау бирелә. Шунда бер ағай: "Кисәһен белмәйем, минә бында бөгөн бер бисә оҡшаны", - тип көлдөргәйне.

Быйың менән нимә әйтергә теләйемме? Элек кешеләр йәмәғәтселек урындарына бер-береһе менән осрашыу, танышыу, фекер уртаҡлашыу өсөн йөрөнө, уларҙы бер-береһенә бәйләгән идеология бар ине. Социализм, коммунизм тураһында әйтеп тә тормайым, әммә нигеҙендә социаль тигеҙлек һаҡланған ижтимағи ҡоролош төҙөргә ынтылыуҙың ниндәй ғәйебе бар? Ул нисек кенә аталмаһын, кешеләрҙең берҙәм ынтылышы уларҙы бер маҡсатта туплап, клубтарға, мәҙәниәт йорттарына йөрөттө. Элек беҙ бер-беребеҙгә "иптәштәр" тип өндәшһәк, хәҙер "әфәнде"-ләрҙән һалдырабыҙ. Элекке иптәштәр хәҙер өйҙәрендә экран имеп кино, футбол, хоккей ҡарай, әфәнделәр иһә рестарандарҙа ултыра.

Кешеләрҙе бер-береһенә бәйләгән идеология, уртаҡ маҡсат булмаһа, индивидуализм сәскә ата инде. Был йәһәттән ошо идеологияны беҙгә һеңдерергә теләгән көнбайыш еңеүгә өлгәште. Беҙ фатирҙарыбыҙҙа бикләндек, ишек келәләрен элдек, ҡоймаларыбыҙ бейек. Әммә һәр кире күренештең ыңғай яғы булған һымаҡ, кешеләр клубтарға, мәҙәниәт йорттарына йөрөп осрашмаһа ла, шул уҡ социаль селтәрҙәр эсендә ватсап ҡушымталары, ҡыҙыҡһыныуҙар һәм башҡа принциптар буйынса чаттар, төркөмдәр барлыҡҡа килеүе шул уҡ мәҙәниәт учреждениеларының онлайн формаһын барлыҡҡа килтерҙе. "Онлайн клуб" бик заманса яңғырай.

Клубтарҙың тәүтәғәйенләнеше халыҡҡа күмәк мәҙәниәт алып килеү. Күмәк мәҙәниәт -ул шөғөлө, ҡыҙыҡһыныуы буйынса уртаҡ маҡсаттары булған кешеләрҙең йыйылыу урыны, мәҙәни-ағартыу учреждениеһы, ижтимағи ойошма. Беҙ иһә фәҡәт махсус рәүештә төҙөлөп, башына "КЛУБ" тип яҙып ҡуйылған бинаны ғына клуб тип атайбыҙ. Был һис тә дөрөҫ түгел. Ауылда клуб бинаһы булмай тороп та, мәктәптә, балалар баҡсаһында һ.б. урындарҙа шөғөлө, ҡыҙыҡһыныуы (хобби), инаныуы буйынса бер төркөм кеше йыйыла икән, был да клуб тип аталырға хаҡлы. Тимәк, ошондай төркөмдәр, ижтимағи ойошмалар булмаған ауылдарҙа ғына клуб биналары буш тороуы бик мөмкин. Шул уҡ ваҡытта клубтарҙың буш тороуы ла клуб эшләмәй тигәнде аңлатмауы бар. Тағы ла төпкәрәк төшһәк, ауылда клуб бинаһы булыуы ғына клуб бар, тигәнде аңлатмай. Клуб - ул бина түгел, ә бер маҡсаттағы, бер инаныуҙағы кешеләр!

Алға киткән Европа илдәрендә эшҡыуарҙар клубы илдең иҡтисадын, сәйәсәтен, бер һүҙ менән әйткәндә, киләсәген билдәләй ала. Англияла, Францияла ындай типтағы клубтар инвестиция мәсьәләләрен хәл итә. Тимәк бында клубты шөғөл, ҡыҙыҡһыныуҙан тыш, дәүләт мәнфәғәтен ҡайғыртыусы ижтимағи ойошма итеп тә ҡарай алабыҙ.

Ярай, социализм артта ҡалды, кинолар ҙа күрһәтелмәгәс, хәҙер клубтар ниндәй эштәр менән шөғөлләнергә тейеш һуң? Эстрада йондоҙҙары сығышына халыҡтың эркелеп килеүенә ҡарап ҡына клуб эшмәкәрлегенә баһа бирә алмайбыҙ. Сөнки себен-серәкәй балға ла, тиҙәккә лә берҙәй үк һырый.

Клуб эшен ойоштороуҙың нигеҙендә идея ятыуы фарыз. Беҙҙең ауыл клубтарында ундай башланғыстар бихисап. Балалар, ейәнейәнсәрҙәр, атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәр, ҡартатай-ҡартәсәйҙәр башланғысында мәҙәниәт һарайҙарында бик күп саралар, төрлө конкурстар үтә башланы. Шулай уҡ айырым даталарға арналған саралар ҙа даими үтеп тора. Был башланғыс тик бер тапҡыр, йәки онотҡанда бер, йәки күмәкләп фотоға төшөп, интернетҡа ҡуйыу саралары ғына булмаһын ине.

Республикабыҙ ауылдарында ойошҡан Ағинәйҙәр хәрәкәтен беҙ ысын мәғәнәһендәге клуб тип атай алабыҙ. Улар арҙамында халҡыбыҙға милли кейем, йолалар, боронғо кәсептәр, бер һүҙ менән әйткәндә, милли рухыбыҙ ҡайта башланы. Уларҙың махсус биналары юҡ, ә клубтары бар.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# "ТЫУМАҒАНДАР ЗЫЯРАТЫ" ТУРАҺЫНДА



Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән ҡалмайһың, донъялыҡ йорто булған һымаҡ, йән "һауыты" тәндең баҡыйлыҡ йорто - зыярат та бар. Зыяраттарҙың да төрлөләре була: мосолмандарҙыҡы, христиандарҙыҡы, Будда динендәгеләрҙеке. Туғандар зыяраты ла була. Ғүмере буйы дингеҙ өҫтөндә йөрөүселәрҙе, үлгәс, ҡәҙерләп дингеҙ төбөнә төшөрәләр. Һиндтар иһә, кеше үлгәс, уны яндырып, көлөн дингеҙгә һалалар. Ислам дине килгәнгә тиклем бик күп халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа, зыярат ролен ағас ботаҡтары, ҡая-тау баштары үтәгән. Тағы ла... һәр табиптың үҙ ҡәберлеге була, тиҙәр. Ул ҡәберлектә табиптың "быҫағы аҫтында" донъялыҡ менән хушлашҡандар ерләнә, имеш. Тағы ла хыялда яралып, донъялыҡҡа тыумағандар зыяраты ла бар...

Кешенең барлығы өс тыуған көнө була. Ҡайһы көн әҙәм балаһының ысын тыуған көнө булып иҫәпләнә ала? Әсәһенән кендеге өҙөлөп, донъяға тыуған көнөмө, әллә яралған мәлеме? Тәүҙә метрикәгә, аҙаҡ паспортҡа теркәлгәне - кешенең әсә ҡарынынан айырылып, донъялыҡҡа пәйҙә булған көнө. Дини тәғлимәт кешенең тыуған көнө итеп әсә ҡарынында яралған һәм йән ингән көндө таныу яғында.

Хәҙер инде тағы ла тәрәнгәрәк төшәйек. "Иң тәүҙә һүҙ булған, ул һүҙ - Аллаһы Тәғәлә", тиелә Тәүратта. Тимәк, кешенең дә тәүге тыуған көнө - һүҙҙә йәғни хыялда барлыҡҡа килгән көнөләр. "Был фәлсәфә үтә ҡатмарлы, ябайлаштырып, үҙебеҙсә аңлат", тиер берәү. Аңлатам, фәлсәфә яп-ябай. Яңы танышып, өйләнешергә йөрөүсе ҡыҙ менән егет киләсәккә яҡты хыялдар ҡороп, бер-береһенә шундай һүҙҙәр әйтешә: "Минең һинә үҙеңә оҡшаған батыр ир-азамат, ҡыйғыр бөркөт бүләк иткем килә", - ти булаһаҡ кәләш. "Ә мин һинең кеүек оҙон толомло, күҙҙәре һинекенә оҡшаған ҡыҙыбыҙ тыуыуын теләйем", - ти булаһаҡ атай кеше.

Үҙегеҙ күрәһегеҙ, иң тәүҙә кеше хыялда ярала. Ҡыҙмы, малаймы, уның образы хыялдан һүҙгә әүерелеп, аҙаҡ шул һүҙ матдиләшә генә. Әгәр ҙә иң тәүҙә хыялда яралмаһа, ул барыбер ҙә осраҡлы тыуған булып иҫәпләнәсәк һәм был комплекс уға үҙен бәхетле итеп тойорға ҡамасаулаясаҡ, тиҙәр. Ғаилә ҡорорға уйлаған егет менән ҡыҙ бер-береһен осратҡанға тиклем үк әле ғаилә һәм бала хаҡындағы хыял уларҙың һәр икеһендә айырым йәшәй. "Алла бирһә, мин үҫеп еткәс, мине һәм беҙҙең балаларыбыҙҙы яратҡан, беҙгә ныҡлы терәк булырлыҡ, атайыма оҡшаған егетте осратып, уның менән бәхетле ғаилә ҡорасаҡбыҙ, итәк тултырып балалар үҫтерәсәкбеҙ", - тип хыял йөрөтә үҫмер ҡыҙ бала. Үҫмер егет тә үҙенең әсәһенә оҡшаған, һөйкөмлө, уңған, балаларына ағымлы әсә булырлыҡ буласаҡ кәләше хаҡында хыялланып, оҙон төндәрҙә керпек ҡаҡмай.

Хәҙер инде, төрлө объектив һәм субъектив сәбәптәр арҡаһында ошо хыялдар тормошҡа ашманы, ти. Ул сағында инде хыялда яралған балалар ҡайҙа була тиһегеҙме? Минеңсә, улар донъялыҡҡа тыуыуҙан мәхрүм ителеп, "тыумағандар зыяратына" күмеләләр. Иҫәпкә бар, һанға юҡ, булып. Хыялда йәшәгән кеше тик шунда ғына тороп ҡалмайҙыр бит... Һуңғы утыҙ-ҡырҡ йыл эсендә урбанизация һөҙөмтәһендә ауылдарыбыҙҙан күпме ҡыҙҙар ҡалаға килеп, күпме егеттәребеҙҙе кәләшһеҙ ҡалдырҙы. Тикшеренеүҙәр һәр ауылда кәләшһеҙ ҡалып, хәҙер инде ҡырҡын-илленән тултырыусы ир-аттарҙы 30-40 тип иҫәпләй. Ун ауылға 300-400, йөҙ ауылға - 3000-4000, мең ауылға - 30000-40000 буйҙаҡ. Ә инде уларҙан тыумайынса, хыялда ҡалған балаларҙың һаны йөҙәр меңләп. Шул уҡ ваҡытта ҡалаға килеп, башҡа милләт вәкилдәренә кейәүгә сығыусы ҡыҙҙар хыялдағы беҙҙең милләт балаларының күпмеһен башҡаларға бүләк итте икән? Уйлаһаң - уйылып китерлек...Уйылып китһәк тә, уйланайыҡ әле, йөмәғәт.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**




Ишмырҙа дуҫының кәйефен төшөндө, башҡаса ныҡышманы. Бер аҙ тын торҙолар, тағы яртышар йотом йоттолар. Ишмырҙа, онотолоп киттеме, тағы һораны:

- Әй, мәрйәләр нисек була ул?

- Нигә, маржа күргәнең юкмыни? Шул ук нәрсә инде!.. - Мәснәүи асыу менән әйтте. - Сүзенә караганда, башкорттан артыкны күргәнең юк, ахырсы!

- Нинә, минең бисә татар ул.

- Ә үзең миннән көлгән буласың!

- Сүтәки ҙә татар урыҫ түгел бит инде! - Ишмырҙа еңгән кеше ҡиәфәтендә әйтте.

- Анысы шулай... Ярар, болай да көйгән жанымны көйдереп торма әле. "Син маржа" диеп, ун ел торған хатынны куып чыгарыйммы ни!

- Татар тип кәмһетмәйме һуң үзеңде? Улар бит "вилок" тип мыҫҡыллай торған.

- Әйтеп карасын! Правда, башта бер абыйсы шул син әйткән сүзне ычкындырган иде. Җилкәсеннән эләктереп алдым да моны: "А ну-ка, повтори!" - дим. Урыс куркак бит ул, шыр жибәрде. "Прости, зятек, я так спьяну сглупил", - ди. Шуннан соң берсенең дә авызыннан сүз чыкканы булмады. Ә былай маржалар милләт аермый, аларға лишь ир булсын. Ир булсын да, акча китерсен! Шулай, брат, менә син дә татарға каршы йөргән буласың, ә үзеңнең хатыныңың татар булып чыкты.

- Кем ҡаршы йөрөй, үҙең килеп тотонғас, мин нәмә!..

- Каян килеп тотынсын! Син үзен башладың ла! Мин бит сиңа ул вакыт, болай, шаяртып кына әйткән идем, "башкорт" дип, син "татар" дидең, китте дә барды инде. Ярар, Ишморҙа дус, судьялар очына чыга алмаганны, без икәү чыга алмабыз... Ә син ул татар кызын каян таптың соң? Сезнең якта тик башкортлар гына яши, имеш, диләр бит?

- Һуң татарҙың таралмаган ере бармы ни! Ә былай мин үҙебеҙҙең яҡтыҡын түгел, ситтән барып алдым. Благовар районынан.

- Благовар? - Мәснәүиҙең күҙҙәре таҫрайҙы. - Кайсы авылдан?

- Белмәйһеңдер, Әрәмә тигән бер бәләкәй генә ауыл ул. Йылға буйында ултыра.

- Пәттәч, нигә белмәсен, ди! Ул бит безнең күрше генә авыл!

- Үҙең әле, мин Архирей жулиғы, тип мактана инең?

- Соң без бит Уфага күчеп кенә килгәнбеҙ, мин кечкенә чакта. Әти-әниләр шунда яр башында ызба сатып алганнар да инде. Телецентр тирәсендә ярда ызбалар утыра бит, шунда инде. Ә син ул Әрәмәгә ничек барып чыктың? Кода да булып чыгарбыз әле, минем анда туганнар да бар!

- Бәлки, - тип йылмайҙы Ишмырҙа. - Беҙ ни, баяғы, ҡоролоҡ йылды Благовар яғына һалам әҙерләргә барғайныҡ, колхозға. Шунда бер әбей менән бабайҙарҙа торҙом. Матур ғына ҡыҙҙары бар ине, кәләш иттем дә алдым инде... - Ишмырҙаның йөҙҙәре яҡтырып, күҙҙәре нурланып китте, нисек итеп ҡыҙҙы йөрәшеп йөрөгән, кәләш итеп алып ҡайтҡан саҡтарын иҫенә төшөрҙө булһа кәрәк. Быны Мәснәүи ҙә тойҙо, тәрән генә һулап ҡуйҙы ла:

- Да, брат, бар иде шәп чаклар... - тине. - Менә, Ишморҙа, земляк кына түгел, кода да булып чыктык. Ә ул синең хатыныңың телен ташлаган, үзең кебек кара башкорт булып беткәндер бит инде? Син бит бик каты сөйләшәсең, телеңне аңлап бетеп тә булмый кай чакта.

- Ташлатырһың һеҙҙең татарҙан телен! Ауылда бер үҙе сутырлап йөрөгән була. Беҙҙең башҡорт ҡына ул араға бер татар килеп күрендеме, телен боҙоп ҡаңғыра. Күрерһең, минең Нәзифә үлгәнсе үз телендә һөйләшәсәк. - Ишмырҙаның күҙ алдында һаман ҡатыны торалыр, ауыҙҙары йырыҡ. - Шәп ул минең кәләш татар булһа ла!

- Нигә "татар булһа ла"? Татар чем хуже?

- Ай Алла, юҡҡа-барға ҡыйшайырға ғына тораһың! Былай ғына әйтәм инде, гәҙәт буйынса. Татарҙың кеме юҡ та, башҡорттоң кеме юҡ! Һин үҙең дә ысын татар түгелһеңдер әле: йә керәшен, йә урыҫ тоҡомонанһыңдыр. Бисәң - урыҫ, фамилияң - урыҫ!

- Каян урыс, ди! Кәлмәт диген карт булган, без шуннан таралып киткәнбез. Белсәң, Кальметовлар барсы да дворяннар, дворян нәселеннән!

Ишмырҙа бәҙрәфте яңғыратып көлөп ебәрҙе:

- Дворяндар? Нинә, ул Кәлмәт ҡарт Ленинградта йәшәгәнме ни?

- Нигә, именно Ленинград кына димәгән, безнең Благоварда ла булган ул дворяннар. Үзләре татарлар. Әле күпне белмисең икән!

- Ә дворян булғас, нинә ун етенсе йылда атмагандар һеҙҙе? - Ишмырҙа тегенең һүҙҙәрен мәрәкәгә ала: йә, гәҙәтенсә, шаштыра, йә үҙе назан. Ә Мәснәүи уның һайын ярһый:

- Во-первых, атар өчен мин ул вакыт булмаганмын, во-вторых, ул Кәлмәт картларның исеме генә дворян, ә үзләре бик ярлы булган. Шуңа аларны "чабаталы дворян" дип йөрөткәннәр. Шундый сүзне ишеткәнең юкмы ни бер дә? Менә, Ишморҙа дус, икебез дә зур кешеләр булып чыктык: син - Буранбай, ә мин - дворян токымыннан!..

"Ҡоҙалар" икеһе лә йылмайыштылар, шул туған -ырыулыҡты йыуыр өсөн тип, Мәснәүи салбар ҡайышында ҡыҫтырылыу йәшел шешәне алды. Ҡалған тамсыны теле менән генә ялаңы ла шешәне тегегә бирҙе. Араҡы бөткәйне инде, Ишмырҙа һелкетеп-һелкетеп һурып маташты ла, сыкмағас, шешәне иҙәндәге ҙур ярыҡҡа ырғытты.

- Нәрсә эшлисең? - Мәснәүиҙең күҙҙәре тоҙҙай булды.

- Бөткән бит...

- Бетсә соң, монда посуданың ничек кадерле икәнен беләсең лә!

-Ҡуй әле, йә, шешәне ҡайҙан алдың, тип таптырырҙар... Эй, сәғәт нисә булып китте икән?

Мәснәүи сәғәтенә ҡараны:

- Анаңны! - Шулай тине лә ҡулын һелтәгән кеше булды. - Котерләр...

- Ҡаңғырып кителде лә...

Былар әбрәкәйҙән сыҡты. Сыҡты ла икеһе бер юлы туктап ҡалды: цех алдында әллә күпме халыҡ йыйылған. Бер үк кейемдәге, шуғамылыр, барыһы бер төҫлө күренгән әҙәми заттар Ишмырҙа менән Мәснәүигә ҡараған да ауыҙҙарын йырған. Былар күрәнгәс, бер юлы ҡысҡырып көлөп ебәрҙеләр. Күрәһең, күптән көтәп торғандар.

- Ресторан ябылды! - тине берәһе.

- Вот артисты, сначала подрались, а сейчас песни поют! - Тегеләр тел сарларға тотондо.

"Иғтибар итмә!" - Мәснәүи шым ғына фарман бирҙе лә шәп-шәп атлап цех яғына китте. Ишмырҙа уның артынан эйәрҙе. Барып еткәс, береһе тағы төрттөрөп маташа ине лә, Мәснәүи: "А тебе завидно, да?" - тип екергәс, теге шымды. Ярай әле, Мәснәүи дуҫы бар. Ҡала кешеһе шул, кәрәк саҡта телгә аптырамай.

Тегеләр башҡаса өндәшмәне, "зэк"тың хәлен "зэк" аңлай.

Мәснәүи менән Ишмырҙаның эштәре көйләнде хәҙер. "Вор"ҙан ҡотолдолар, колонияла абруйҙары үҫте, кешеләр уларға ихтирам менән генә түгел, көнләшеп ҡараған кеүектәр. Яҡташтар буш ваҡыттарында гел бергә. Үҙ телендә һөйләшерлек бер генә кеше булғанда ла ул тиклем ят итеп тоймайһың бит үҙеңде. Һай, үҙ телең! Ошондай саҡтарҙа бигерәк ҡәҙерле бит ул үҙеңсә һөйләшеү!

Шулай ҙа төрмә - төрмә инде, бик эсендә генә тоталар, көнөнә әллә нисәмә тапҡыр һанайҙар - кеше бит малдың-малын айына һанаһа бер һанай. Үҙең кеүек әҙәмдәргә "гражданин начальник", "осужденный Буранбаев" тип торорға кәрәк. Шуныһы бигерәк йәнде кимерә. Ҡайһы саҡ ошо бәндәләрҙе тысҡылдатып бәргеләп ташлағы килә лә, ни ҡылаһың, ахырҙа, яҡташыңа барып зарланып алаһың. Ә тегенең иҫе китмәй!

- Төкер син шуларга! Мәңгегә кермәгән дә бу тишеккә! Ирекка чыгып кына алыйм әле, сөйләшә белермен!

Йәне көйөп йөрөй торғас, үҙ алдына әллә ниҙәр уйлап сығара. Быны, имештер, төрмәнән имен-аман ҡотолоп, ауылында һин дә мин йәшәп ята. Бөтәһе лә онотолған, тормош бығаса нисек булған, шулай бара. Ишмырҙа утынға тип Ирәндек яғына юл тотто. Көҙ, бысраҡ ваҡыт. Ҡарамалы соҡорон үтәм тигәндә, батып ултырған ҙур машинаны күреп ҡала. Янында әллә ниндәй хәрби кеше. Тракторға ҡаршы килә. "Машинаны сығарыш әле! Бер ярты бирербеҙ!" - ти. Ишмырҙа ни күҙе менән күрһен, алдында ошо колония начальнигы тора. Теге лә аптырап ҡала, хатта ҡаушап төшә. Ҡасандыр меҫкен генә ҡиәфәттә "осужденный Буранбаев" тип торған кеше ҡайһылай гәүәләтеп йөрөп ята! Ә был шуға йомошҡа килде. Бына бит донъялар!

Тегеләр, бәктиһәң, халыҡтан картуф йыйырға килгәндәр ҙә ҡайтырға тип ҡуҙғалғанда батҡан да ултырғандар. Икенсе юлдан китергә кәрәккән дә ни, белмәгәндәр инде. Ишмырҙа ни тросын тағы ла тарттырып сығара быларҙы. Ауан кеше бит инде, теге ваҡыттағы асыуҙары онотолған. Хатта уларҙы үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡыра. Һуң бит ошондай ваҡытта кешене нисек итеп төнгә ҡарай сығарып ебәрәһең.

Былар ризалаша. Ишмырҙа әллә кем булып китә. Даны ни тора бит: Ишмырҙа үҙен төрмәлә бикләп торған әҙәмдәрҙе алып ҡайтҡан! Дыуамал кеше бит ул, ҡара эсле түгел.

Башта донъяһы менән таныштыра - ихатаһын, аҙбарын, келәтен, гаражын күрһәтә. Шунан ҡатынына мунса яғырға ҡуша ла тегеләрҙе йортона алып инә. Бер аҙ ял иткәндәй булғас, ҡунаҡтарҙы алдында бер һарығын йығып һуя. Бишбармаҡ бешерәләр, күршеләрҙән үтескә алып булһа ла байтаҡ араҡы таба. Мунса инеп сыҡҡандан һуң төнө буйы ҡунаҡ булалар. Эсеп алғас, колония начальнигы быны маҡтап бөтә алмай: "Молодец, Буранбаев, һин тегендә лә өлгөлө булдың!" - ти. Иртән инде Буранбаев уларҙы оло юлға тиклем оҙата бара.

Быны шулай үҫ ала ул үҙен ике йыл биктә тотҡан кешеләрҙән.

Бер көн Ишмырҙа ошо хыялдарын Мәснәүигә һөйләне. Теге сәсрәп төштө:

- Эйе, шуларны сыйлап утырмага! Битләренә төкереп китәр идем! Аз издеваться иттеләрме!

Ишмырҙа бәхәсләшеп торманы, былар хыял ғына бит. Әле ҡотолоп сығыу өсөн ике ай ярым ваҡыт бар. Ғәҙәттә бит, өй яҡынайған һайын, юл оҙонораҡ күренә, ҡайтыр саҡ еткән һайын, ваҡыт аҡрыныраҡ үтә...

## 5

Ни тиклем генә хыялланмаһындар, дуҫтарҙы, ҡарышҡан шикелле, бер көндә сығарманылар. Хатта иҫкәртеп тә торманылар, Ишмырҙаны саҡырттылар ҙа: "Буранбаев, һин бөгөндән азат - тулы хоҡуҡлы гражданин! Ҡотлайбыҙ!" - тинеләр. Ҡараһы, һөйләшеүҙәре бөтөнләй икенсе, былар ҙа әҙәмсә була белә икән! Тейешле аҡсаһын бирҙеләр, башҡаса енәйәткә бармауын һәм матур тормош теләп, сығып китергә ҡуштылар.

- Гражданин начальник, ә Кальметов? - тине Ишмырҙа.

- Хәҙер инде "гражданин начальник" түгел, "иптәш начальник", - тине офицер.

- Беҙ бит Кальметов менән "подельниктар", бер үк эш буйынса бер үк срокка хөкөм ителдек, гражданин, әй... гражданин начальник...

- Беләһеңме, Буранбаев, ишек асыҡ саҡта шылып ҡал. Ҡалғаны... - "иптәш начальник" йылмайҙы, - һинең эш түгел.

Ишмырҙаның танау төштө, бөтә хыялдары емерелде. Ҡотолғас, шулай итербеҙ, былай итербеҙ, тип әллә ниндәй пландар ҡороп бөткәйнеләр, бына һиңә мә! Ни ҡылмаҡсы булалар икән, әллә Мәснәүи бер-бер эш боҙоп ташланымы? Ул-был булһа, ишетелер ине. Ни хәл итһен, теге "иптәш начальник" әйткәненсә, ишек асыҡ саҡта "шылып ҡалыуҙан" артығы юҡ ине.

Аптыраҡ, ҡасан ҡотолам ошонан, тип ниндәй генә хыялдарға бирелмәне, сыҡҡайны - етемһерәне лә китте. Төйәнсөгән тотоп бер аҙ торған булды, тегеләй әйләнде, былай әйләнде, уға һүҙ ҡушыу түгел, иғтибар иткән кеше лә юҡ, теләһәң нишлә. Хатта ҡайтҡы ла килмәгән кеүек. Ҡайтҡы килеүен килә, тик әкиәттәге кеүек күҙендә асып йом да ишек алдында ултыр ине. Ә яңғыҙы ғына оло юлға ҡуҙғалғыһы килмәй. Берҙән, шәп түгел, дуҫыңды ташлап ҡалдырған һымаҡ, икенсенән, бергә ҡайтыуы күңелле лә инде. Икәү ышаныслыраҡ та була, бараһы юл байтаҡ ҡына бит әле.

Ишмырҙа поезға ултырырға ашыҡманы, Мәснәүиҙе көтөп ҡарарға булды. Бәлки, "подельниктар" тип бер юлы сығармаҫҡа уйлағандарҙыр, тип төшкә тиклем ошо колония тирәһендә йөрөштөрҙө, ҡапҡанан күҙен алманы. Инде лә булмағас, колониянан ун биш саҡрым тирәһендәге поселокка юлланды. Бынан йөрөй торған автобус менән китте.

Башта ул ашханаға инеп туйғансы ашаны. Барынса иң затлы аҙыҡтарҙы алырға тырышты. Ашап туйғас, әллә кем булып, урам буйынса китте.

Бөтә халыҡ уға ҡарайҙыр, бына ирекле кеше китеп бара, тип һоҡланалыр һымаҡ күренде. Арыуыраҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы аяғынан алып башына тиклем тикшереп үтте, ҡайһы берҙәренә һүҙ ҙә ҡушты. Үҙе эстән генә аптырап та ҡуя: бер ҙә онотолмаған да, һүҙе табыла бит! Әммә тегеләр Ишмырҙаның һүҙенә яуап бирергә ашҡынып торманы, ерәнгән төҫ менән ситкә борола һалды. Ә Ишмырҙа гәрләнмәне, кәрәгегеҙ бар ине, бына Баймаҡҡа килә ҡалһағыҙ, йылмайырһығыҙ ҙа, мин һеҙҙең кеүек үтеп китермен ул саҡта, тип ғорурланды.

**(Дауамы. Башы 38-42-се һандарҙа).**

ИЖАДХАНА

# ҮҘЕ ЙӘШ КЕНӘ,

## ә үҙе драматург!



**Нәшриәттә китаптар баҫтырған, театр сәхнәләрендә спектаклдәре уйналған авторҙар нисә йәштәрҙә була? Дөрөҫ, арыу ғына йәштә була ундай әҙиптәр. Ә бына был егеткә... 24 кенә йәш. Һәм быйыл Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрында уның "Яратыусы йөрәк" пьесаһы буйынса ҡуйылған спектакленең премьераһы булды. Әңгәмәбеҙ - йәш ижадсы Рәфис ҠУЙБАҒАРОВ менән.**

**Ижад юлы нисек башланды, Рәфис? Ғаиләләме, мәктәптәме?**

- Ижад юлына иң беренсе аҙымдарымды Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнголда урынлашҡан Башҡорт гимназияһында 5-се синыфта уҡығанда яһаным, тиһәм, яңылышмаҫмын, сөнки тап шунда һүрәт төшөрөү менән мауығып, Бөтә Рәсәй кимәлендәге конкурстарҙа призлы урындар ала инем. Шул саҡта "Кош юлы" түңәрәгенә йөрөп, шиғыр яҙыу менән шөғөлләнә башланым. 7-се класҡа Республика политехник лицей-интернатына уҡырға килгәс, ижадымды дауам иттем һәм тағы ла күңелемә яҡын шөғөл - видео төшөрөү менән мауыға башланым. Гимназияла ла, лицейҙа ла ошо башланғысымды күтәреп алған, төрлө яҡлап үҫешемә булышлыҡ иткән уҡытыусыларыма ныҡ рәхмәтлемен! Ижади фекерләүем тап мәктәптә уҡыған ваҡытта үҫешә башланы. БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалындағы башҡорт һәм төрки филологияһы факультетында уҡыуым дәүерә ошо башланғыстарымдың дауамы булды.

**Стәрлетамаҡ театрында ҡуйылған әҫәрегеҙ тәүге ҡәләм тибрәтеүме, ул нимә тураһында? Ғөмүмән, ниндәй темалар ҡыҙыҡһындыра йәш кешене?**

- Эйе, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрында 2020 йылда минең иң беренсе пьесамдың премьераһы булды. "Яратыусы йөрәк" пьесаһының бәләкәй генә яҙылыу тарихы ла бар. Был әҫәр - 2020 йылдың ғинуар айында Стәрлетамаҡта Зиннур Сөләймәнов етәкселегендәге Башҡортостан Республикаһы драматургия һәм режиссура үҙәге ойоштороған семинар емеше ул. Бөтә республиканан йәш драматургтарҙы йыйып, беҙгә драматургия иленә сәйәхәт ойоштороп, күңелебеҙгә осҡон һалдылар. Күптәребеҙҙә был осҡон ялҡын булып яна башланы - ошондай семинарҙар, оҫталыҡ дәрестәре ижади кешеләргә бик шәп этәргес, мотивация, минең уйымса. Тик был башланғыс ҡына. Алла бирһә, яңы пьесалар тыуыр тигән өмөттәмен. "Яратыусы йөрәк" - драма, был әҫәрҙә йәштәрҙең диспансер эсендәге мөнәсәбәттәре, ауырлыҡтарға нисек ҡаршы тороуҙары сағыла. Ә хәҙер комедия өҫтөндә эшләйем - яҙылып бөтмәһә лә, исеме бар, әммә әлегә сер булып торһон. Мине бик күп төрлө темалар ҡыҙыҡһындыра - йәштәр араһындағы мөнәсәбәт, хәҙерге актуаль социаль проблемалар, "бәләкәй кеше" проблемаһы, кеше һәм тәбиғәт араһындағы мөнәсәбәт һ.б.

**Бөгөнгө йәштәрҙең ниндәй ҡылыҡтары оҡшай йә оҡшамай? Улар тураһында ниҙер яҙырға уй юҡмы?**

- "Кешелеклерәк булайыҡ!" тип ҡысҡырып, пьеса яҙғы килә, әммә... Театрға йөрөгән кешеләрҙең күбеһе мораль принциптарға таянып йәшәй, минеңсә. Яҙылмаған тема, күтәрелмәгән проблема ҡалманы һымаҡ. Йәштәрҙең ҡылыҡтарына килгәндә - һәр замандың үҙ проблемалары бит. Хәҙер ниндәй проблема бар? Беренсенән, төрлө сәбәптәр арҡаһында хатта йәштәрҙең дә һаулыҡ яғы насарлығы (наркомания, алкоголизм, аҙ хәрәкәт итеү, дөрөҫ туҡланмау), икенсенән, эшһеҙлек (икенсерәк әйткәндә, урам һепереү - хәҙер профессия түгел, әммә кемдер бит юлдарыбыҙҙы таҙа тоторға тейеш, һәр кемдең етәксе булып ҡына ултырғыһы килләр ҙә ул), өсөнсөнән, инфантилизм (рәхәткә кеше тиҙ өйрәнә, тиҙәр бит). Проблемалар күп, әммә кәрәкме уларҙы күтәрергә? Кәрәкме ҡысҡырырға? Минеңсә, халыҡ былай ҙа арыған... Көн дә авария, көн дә ҡайҙалыр ғәҙәттән тыш хәлдәр. Шуға ла комедия аша ошо проблемаларға ҡағылып китеү - иң отошло вариант, сөнки күптәр ауыр эш көнөнән һуң театрға ял итергә килә.

**Сәйәсәткә мөнәсәбәтегеҙ тураһында ла белге килә. Мәҫәлән, берәй ҙур вазифалы етәксе булһағыҙ, иң төп хәстәрлек ни булыр ине?**

- Рәсәй кимәлендәге вазифала булһам, беренсенән, илебеҙҙән бер тин дә ситкә китмәҫ ине, сөнки илебеҙҙәге бар байлыҡ - халыҡтыҡы. Икенсенән, эске сәйәсәт тураһында ныҡыраҡ уйлар инем, сөнки унһыҙ тышҡы сәйәсәттең булыуы мөмкин түгел. Өсөнсөнән, ресурстарҙы (нефть, газ, ағас һ.б.) эшкәртеп кенә ҡырға ебәрергә рөхсәт бирер инем. Башҡа илдәрҙә байытабыҙ, ә үҙебеҙ яп-яланғас ҡалмаҫбыҙмы, тип уйлап ҡуям ҡайһы саҡ...

Ысынында, Рәсәй халҡы дөрөҫ уйлай, әммә эштәр икенсерәк эшләнә шул...

**Һеҙ үҙегеҙҙе илһөйәр һәм телһөйәр тип иҫәпләйһегеҙме?**

- Илемде лә, телемде лә, әлбиттә, яратам, тик был турала ҡысҡырып йөрөргә тырышмайым. Иленде һөйөү нимәнән башлана? Минеңсә, иң ябай эштән - йәшәгән ереңде таҙа тотоу, сүп-сарҙан таҙартыуҙан. Фотоға төшөп, бына, мин үҙ илемде яратам, тип әйтеп, һүҙҙәреңде эшең менән күрһәтмәү, минеңсә, "показуха". Телгә килгәндә лә шул уҡ позициялаймын. Бер ерҙә, мин телем менән ғорурланам, яратам, тип торған кеше урыҫтар араһына барып эләгеп, башҡортлоғон йәшереп йөрөргә лә мөмкин. Ундайҙар бар, бер кемгә лә сер түгел. Дөйөмләштереп әйткәндә, яратаһың икән, нисек ятраҡаныңды һүҙ менән генә түгел, эш менән күрһәтергә кәрәк...

**Йәш кешенең пландары, хыялдары күп була инде. Шулар тураһында ла әйтеп китһәгеҙ ине...**

- Эйе, йәш кеше булараҡ, пландар ҡороп та, хыялланып та йәшәргә тырышам - береһе икенсеһенә ҡамасауламай шикелле. Быйыл Мәскәүҙәге Юғары иктисад мәктәбе дәүләт университетының гуманитар факультеты магистратураһына уҡырға индем. Бында инер өсөн инглиз теле буйынса белемемде нығыттым, портфолио әҙерләнем. Магистратура программаһына инеүселәрҙе портфолио буйынса ла баһалайҙар, шуға үҫешергә теләгән йүнәлеш буйынса эшләнеү эштәре, сертификат, диплом, фәнни әүҙемлекте күрһәтеүсе башҡа документтарың да булырға тейеш. Минең портфолио яҡшы баһаланды. Артабан әңгәмәгә саҡырҙылар. Бар һынауҙарҙы үткәс, август башында шылтыратып, һине бюджет урынға тәҡдим итәбеҙ, тип әйттеләр. Һәм бына, Аллаға шөкөр, уҡып та йөрөйөм. Беҙҙең төркөмдә Мәскәүҙең иң абруйлы юғары уҡыу йорттарын тамамлаусылар уҡый. Күп предметтар тик инглиз телендә генә уҡытыла. Уҡытыусыларҙың һәр береһе ике-өс телдә иркен аралаша. Иң мөһиме, был уҡыу йортонда уҡыған студенттың мотивацияһы, үҫергә теләге юғары булырға тейеш. Шуға ла иң төп ниәтем - яҡшы ғына уҡып бөтөргә! Донъябыҙ кен дә үҙгәреп тора, шуға күрә лә бар булған уйҙарымды әле һөйләп бөтөрә алмайым. Барыһы ла алда әле!

ХӘТЕРКИТАП

# ШАҒИРҘЫ ИҪКӘ АЛЫП...

**Гимназиянан эштән сығып, ҡайтыр яҡҡа юл алғас та, көн һайын тигәндәй "Совет майҙаны" туҡталышында ҡара плащ, ҡара кепка кейгән ҡап-ҡара һаҡаллы ағай йыраҡтан уҡ иғтибарҙы йәлеп итә. Мин эргәмдәге коллегамдың беләгенә төртәм: "Әйҙә, әйҙә инде, янына яҡын барайыҡ, һүҙ ҡушайыҡ, аҙаҡ фотоға төшөрбеҙ". "Эй, оялам, бар үҙең генә, һин әрһеҙерәк бит!" - тип коллегам дилбегәне миңә тотторол маташа. Эйе, анһат уға, әрһеҙ генә булһам да, мин дә тартынам бит әле. Нисектер, батырсылыҡ етмәй, ҡыйынһынам...**

Йыраҡтан уҡ танылып торған ағай - оло шәхес, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаев үҙе. Ошолай ояла-ояла олуғ кешенең янынан үтеп китәбеҙ. Коллегам хатта һаулыҡ ҡушырға ла "ояла", ә мин былай ҙа көр тауышымды тағы ла көрләндереп: "Һаумыһығыҙ!" - тим, йылмайыулы ҡараш аша: "Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар!" - тигән яуап алам. Бөгөн килеп, үҙ-үҙемә асыуым килә. Кит инде, йүнһеҙ, алсаҡлығы, ябайлығы, кешелеклелеге йөҙөнә сыҡҡан ағайҙың эргәнә килеп, матур итеп һаулыҡ һорашып, мин - башҡорт теле уҡытыусыһы, тип танышып, телебеҙ тураһында әңгәмәләшеп, һуңынан фотоға төшөргә күңдерһәм ни була инде?..

Шиғриәткә ғашиҡтарҙың, бигерәк тә тел уҡытыусыларының, ныҡ яратҡан, ихтирам иткән, күп шиғырҙарын яттан белгән шағирҙары була. Минең исемлектә лә улар байтаҡ: М. Кәрим, Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, Р. Ғарипов, З. Биишева, Т. Йосопов, Ҡ. Аралбай, А. Игебаев... Уларҙың шиғырҙарынан күңелем ял ала, рухым байый, ҡайһы саҡта үҙемә лә ижад ҡомары килә. Ошо исемлектәге шағирҙарҙың күп кенә шиғырҙарын яттан беләм, хатта ете төн уртаһында уятып һораһалар ҙа, шартлатып ятлап бирәсәкмен. Бөгөн дә бына хәтер китабымды аҡтарып ултырам да ошо исемлектә Рауил Бикбаевтың юҡлығын шәйләйем. Хатта уның бер генә шиғырын да яттан белмәйем шикелле. Юҡ! Юҡ! Яңылышам, беләм бит, беләм яттан уның ошо шиғырын:

*Таш һыныңды Урал, оҡшатамын*
*Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа ...*

Ниндәй матур юлдар... Асылмаған китап икән дә баһа минең өсөн Рауил Төхфәт улы. Башҡорт теле уҡытыусылары форумында бүләк ителгән "Аҫыл һинйылар кәрәҙе" китабын аҡтарам, был китапҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры исеменә лайыҡ булған әҙиптәребеҙҙең ижад емештәре ингән. Тиҙ генә Р. Бикбаев шиғырҙарын асам. Мин яратҡан темаларҙың барыһына ла шиғырҙары бар икән Р.Бикбаевтың: бына мөхәббәт темаһы, бына туған телгә маҡтау һүҙҙәре, бына туған еребеҙҙең әсе яҙмышы хаҡында уйланыуҙар, бына тәбиғәтебеҙгә дан юлдары, бына тормоштоң әсе хәҡиҡәттәренә яуаптар, уйланыуҙар, әсенеүҙәр, йөрәк һыҙланыуҙары, тормош һабаҡтары...

*... Нишләтһә лә, айырмаһын яҙмыш*
*Күңел ҡошом - сыуаҡ хисемдән.*
*Донъяла мин бер нәмәнән ҡурҡам:*
*"Мөхәббәтһеҙ" тигән исемдән.*

Ошо шиғыр юлдарында мөхәббәттең бар булмышын, бар бөйөклөгөн, бар мәғәнәһен асып һала бит автор.

*...Телем бөтһә, ерем йәме бөтөр,*
*Мәғәнәһе ҡалмаҫ ғүмерҙең.*
*Берҙән-берем, йәнем -*
*Туған телем -*
*Иң ҙур мөғжизәһе был ерҙең.*

Тел тураһында әйтелгән был һүҙҙәргә өҫтәп, артыҡ бер нәмә лә әйтеп булмайҙыр, телдең кәрәклеген, кеше йәшәйешендә ниндәй мәғәнәгә эйәләген, уның мөһимлеген ошо биш юллыҡта бирә алған Рауил ағай. Иғтибарымды фәлсәфәүи шиғырҙары ла йәлеп итә:

*... Һабантуй үткәрер өсөн,*
*Башта һабан һөрөр кәрәк.*

Бигерәк тә тормошсан юлдар! Был юлдарҙы хәләл көстөң, хәләл хеҙмәттең, хәләл ризыҡтың тәмен, ҡәҙерен, хаҡын белгән кеше генә яҙа алалыр. Ә инде исеменән үк үҙенә тартып, ылыҡтырып, уҡырға саҡырып торған "Уралыма", "Салауат ҡылысы", "Берләшегеҙ, бөтә донъя башҡорттары", "Башҡортостан бында башлана", "Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда", "Халҡыма хат", "Һыуһаным - һыуҙар биреге̌ҙ!" әҫәрҙәре ысын патриоттың үҙ халҡы яҙмышы өсөн, туған башҡорт теле өсөн, Башҡортостандың мөғжизәле тәбиғәте өсөн бар күңеле менән өҙгөләнеп, йөрәгенән сыҡҡан һүҙҙәре!

Тел һағында тороусы булараҡ, минең күңелемә тел, тыуған ер, башҡорт халҡы тураһындағы әҫәрҙәр яҡын. Яратҡан, үҙ иткән шағирҙарым - М. Кәрим, Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, Р. Ғарипов, З. Биишева, Т. Йосопов, Ҡ. Аралбай, А. Игебаев һәм, әлбиттә, Рауил Төхфәт улы Бикбаев! Эйе, эйе. Ул да хәҙер ошо исемлектә.

*...Ете генә мөғжизә бар, имеш,*
*Бар тарихта! -*
*Аҡыл еткеһеҙ...*
*Башҡортостан!*
*Тик үҙеңдә генә*
*Мөғжизәләр һанап бөткеһеҙ.*

Ете төн уртаһында уятып ҡарағыҙ әле мине, иң яратҡан шиғырҙарынды яттан һөйләп, тиһәгеҙ, бихисап шиғырҙар араһында Рауил Бикбаевтың ошо шиғырын да ишетерһегеҙ!

**Фәнгиза НАФИҠОВА,**
**Өфөләге Халыҡтар дуҫлығы орденлы А.М. Горький исемендәге 3-сө гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АШАҒЫҢ КИЛӘМЕ?

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы үсмерҙәргә D витамины ҡабул итеү файҙалы түгел, был йөрәк сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто ла яһаймай, диабет хәүефен дә түбәнәйтмәй. Етмәһә, был холестерин артыуына килтереүе лә бар, ти эндокринологтар. Өҫтәмә рәүештә D витамины ҡабул итеүсе балаларҙы 10 йыл тикшергәндән һуң, ғалимдар был үсмерҙәрҙең тән массаһында, тән массаһының индексында, ҡан баҫымында йәки ҡан әйләнешендә бер үҙгәрештәр ҙә күҙәтелмәгәнлеген асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе билдәләүенсә, был D витамины дифициты һәм балаларҙың хроник сирҙәре араһында бәйләнеш булмауы тураһында һөйләмәй. "D витамины ҡабул итеү кәрәкмәй, тип тә әйтмәйбеҙ, һимеҙ балаларҙың ҡайһы берҙәре был витаминға ҡытлыҡ кисерә. Беҙ бары тик D витамины ҡабул иткәндән үсмерҙәрҙең дөйөм сәләмәтлеге яҡшырыуы тураһында дәлилдәр юҡлығын ғына белдерәбеҙ", - ти ғалимдар.

■ Киото университеты белгестәре ҡыҙыҡлы асыш яһаған. 20 секундтан оҙағыраҡ бер аяғында ғына баҫып тора алмаған өлкән йәштәге кешеләрҙә инсульт йышыраҡ осрай. Тикшеренеүҙәрҙә 841 ҡатын-ҡыҙ һәм 546 ир-егет ҡатнашҡан. Уларҙың уртаса йәше - 67 йәш. Эксперимент башланыр алдынан уларҙың баш мейеһен томография ярҙамында тикшергәндәр. Һөҙөмтәлә, баш мейеһендә ҡан һауыу майҙандары булғандар бер аяғында баҫып тора алмаған.

■ Артыҡ ауырлыҡ йыймайым, тиһәң, ризыҡты яйлап аша, ти Япония ғалимдары. Тикшеренеүҙәр дүрт мең кешелә үткәрелгән, уларҙың ҡайһылары тиҙ, мәсәлән, төшкө ашты 5 минут эсендә ашауҙы ғәҙәт иткән. Белгестәр уларҙың тән ауырлығын 20 йыл элек булғаны менән дә сағыштырған. Кем тиҙ ашай, уларҙың ауырлығы күпкә артығыраҡ булған. Яй ашаусыларҙың тән ауырлығы артыҡ үҙгәрмәй. Әлбиттә, был һөҙөмтәләргә башҡа ғәҙәттәр - физик күнегеүҙәр эшләү, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр ҡулланыу ҙа тәьҫир итә.

■ Аҡса гөлө - бөгөн бик киң таралған бүлмә гөлдәренең береһе. Ул йортҡа аҡса килтерә, тиҙәр. Аҡса гөлө - халыҡ медицинаһында ла әүҙем ҡулланыла. Шифалы сифаттары буйынса алоэ, каланхоэ үсемлектәренән ҡалышмай. Әммә уны ашарға ярамай, составында аҙ ғына ҡүләмдә мышьяк бар. Ә бына япраҡтары дауаларға ярай, иренгә сыҡҡан һыуыҡ та тиҙ генә бөтә. Бының өсөн ярты сәғәт һайын аҡса гөлө япрағының һутын һөртөп торорға кәрәк.

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# БЕРЛӘШӘЙЕК, БАР ЫРЫУҘАР БАШҠОРТТАРЫ!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты иғлан иткән Башҡорт тарихы йылына йомғаҡ яһарға иртәрәк булһа ла, уның һөҙөмтәле булыуын әле үк билдәләргә мөмкин. Йыл дауамында тормошҡа ашырылған әһәмиәтле эштәрҙең барыһын да һанап үтеү кәрәк тә түгел, уларҙы киң мәғлүмәт саралары даими яҡтыртып барҙы. Ә бына тарихта беренсе тапҡыр уҙғарылған Ырыуҙар съезына ентекләберәк туҡталырға ла мөмкин.**





Мәғлүм булыуынса, бер нисә йыл дауамында республика тарихсылары башҡорт ырыуҙарына бағышланған китаптар сығарыу менән шөғөлләнде, уның һөҙөмтәһендә күптәр үҙенең тамырҙарын асыҡланы, асылына ҡайтты. Был хеҙмәттең дауамы булып заманында суверенитеттар парады менән бер рәттән башҡорт зыялыларының, атап әйткәндә, яҙыусы Булат Рафиҡов инициативаһы менән башланып, бер ни тиклем һүнеп ҡалған ырыуҙар хәрәкәтенең эше йәнләндерелеүе торҙо. Йыл башынан алып 20 ырыу үҙенең съезын үткәрҙе. Һәм әлегә тупланып өлгөрмәгән башҡа 3 тиҫтә самаһы ырыу вәкилдәре, ниһайәт, бер ҡорға йыйылды.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова белдереүенсә, был көндө һәр кем көтөп алды. "Сара көнүҙәк мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеү өсөн күптән кәрәк ине. Беҙ - башҡорттар, республика булдырыусы халыҡ, Башҡортостандағы хәл-торош, тыныслыҡ, татыулыҡ, республикалағы барлыҡ халыҡтарҙың үсеше өсөн яуаплы. Башҡорт ырыуҙары хәрәкәтен үстереп, әлбиттә, тәү сиратта уның берләштереү роленә таянабыҙ. Бөгөн кешелек алдында төрлө һынауҙар ҡуйған глобаль донъяла тарихын, тамырҙарын белгән, халҡының рухи ҡиммәттәренә таянған кеше мәғлүмәт һөжүменә дусар булмаясаҡ, үҙенең кем булыуын уйлап баш ватмаясаҡ. Ырыуҙар хәрәкәте - милләтебеҙҙе берләштереүсе көс. Беҙ күп төрлөлөк, шул иҫәптән диалекттарыбыҙ менән көслө", - тине ул үҙенең фекерен белдереп.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев башҡорт тарихының яңы биттәре асылыуын һәм барлыҡ ырыу вәкилдәренең бер ҡорға йыйылыуын ҙур ҡаҙаныш тип баһаланы.

Был мөһим сараға йомғаҡ яһап, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында киң мәғлүмәт саралары өсөн матбуғат конференцияһы ойошторолдо.

"Донъя глобалләшеү процестарын кисерә, унификация, экспансия башҡорт халҡына ғына түгел, башҡа этностарға ла кире йоғонто яһай, тәү сиратта дөйөм Рәсәй берҙәйлегә юйыла. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы кемдәлер һан буйынса енергә тырышмай, беҙ съездарҙы башҡорт халҡының сифаты түбәнәймәһен өсөн, улар үҙҙәренең тарихын, шәжәрәһен белһен, шуға бәйле төрлө саралар үткәрһен өсөн ойоштораbыҙ һәм киләсәктә уның һөҙөмтәһен күрербеҙ, тип өмөтләнәбеҙ. Әгәр тарихыбыҙҙы, ғилемебеҙҙе таратһаҡ, халыҡ кем мин, ҡайҙан мин, тип уйлана, тамырҙарын барлай башлаясаҡ. Ә глобалистарға үҙенең кемлеген белгәндәр түгел, тарихһыҙ, зат-ырыуһыҙ биологик организм кәрәк", - тип белдерҙе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡупов.

Алға китеп әйткәндә, сифатлы башҡорт ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш, тигән һорауға яуап итеп, Ғәлим Миңлеғәли улы тәү сиратта уның үҙаңы булырға тейешлеген билдәләне. Кешенең ниндәй диалектта йәки телдә һөйләшеүе мөһим түгел, сөнки бөгөнгө заманда башҡорттар донъяның төрлө мөйөштәрендә йәшәй һәм сит телдәрҙе лә туған телендәй яҡшы белә. Шуға күрә, уның үҙаңы башҡорт булырға һәм башҡортлоҡтоң бер сағылышы булған дүрт тағанын: ырыуын, тамғаһын, ҡошон, ағасын, дөйөмләштереп әйткәндә, тарихын һәм мәҙәниәтен белергә, рухлы булырға тейеш. Ҡоштар һайрашып табышҡан кеүек, бөгөн беҙҙе быуындан-быуынға ҡан хәтере һаҡлаған ырыуҙарыбыҙ берҙәм милләт итеп берләштерә ала. Тиҙ үҫешкән һәм символдар заманында ырыу атрибуттары башҡалар асып инә алмаған ысын сифатлы башҡортлоҡтоң асҡысы - коды булып тора, тип әйтергә мөмкин. Был мәсьәләне асыҡлап, тарихсы Салауат Хәмиҙуллин бөгөн уҙандың әҙәби тел менән бер рәттә тороуын шотландтар миҫалында күрһәтте. Уларҙа әҙәби шотланд теле менән тағы ике тел ҡулланыла, шулай уҡ йәһүдтәрҙә был һан бишкә етә, әммә үҙаң уларҙы үҙҙәрен шотланд йәки йәһүд тип танырға мәжбүр итә. Әгәр беҙгә ырыуҙар бүленеше кеүек ҡиммәт бирелгән икән, беҙ уны үҙ мәнфәғәтебеҙҙә һәм милләт файҙаһына ҡулланырға тейешбеҙ, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды тарихсы.

Әлбиттә, республикала ырыуҙар тураһында китаптар нәшер ителә, ырыуҙар йыйындары уҙғарыла, ырыу биләмәләре ерҙәренә ырыу таштары ҡуйыла башлағас, быға ҡаршы сығыусы көстәр ҙә булманы түгел. Шуға ла Салауат Ишмөхәмәт улы был мәлгә тағы бер тапҡыр туҡталып, ырыуҙарҙың тарихта Сыңғыҙхан осоронан билдәле булыуы һәм тап уның бейҙәргә ырыу символикаһын биреүе тураһында һөйләп үтте. Шулай уҡ революцияға тиклем Башҡортостан территорияһында булған улыстарҙың башҡорт ырыуҙары атамаһы менән йөрөүен белдерҙе. Хатта ырыу территорияларындағы топонимика ла ошо хаҡта һөйләй. Ул ғына ла түгел, башҡорт ырыуҙары атамаларын геологик ҡатламдарҙа ла осраторға мөмкин. Шулай уҡ башҡорт тарихы ысын мәғәнәһендә ташҡа ла соҡоп яҙылған. Башҡорт ырыуҙарының беренсе съезы үткән Туймазы районындағы Ырыуҙар тамғаһы ташы ла быға бер дәлил. "Ҡасандыр бында ике таш торған, - тип хәтерләй урындағы халыҡ. - Әммә икенсеһен, бәләкәйерәген, бер нисә тиҫтә йыл элек хужалыҡ ихтыяжы өсөн алып китәләр. Ә был, ата-олатайҙарыбыҙҙы иҫләгәне, тороп ҡала". Ҡандракүлдең борон-борондан башҡорт ырыуҙары съездары урыны булыуын тарихсылар ҙа раҫлай - ҡая таштарының береһендә башҡорттарҙың тамғалары һалынған. Ни өсөн тап беренсе съезға Туймазы районы билдәмәһе һайланыуы ла хәҙер аңлашыла. Хәйер, был тәбәк башҡорттарының 1812 йылда Парижға инеүе лә, Бөйөк

Ватан һуғышы йылдарында легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы сафын күпләп тулыландырыуы ла сер түгел. Тарих биттәрен ентекләберәк аҡтарырға ғына кәрәк...

Ғалим, БДБҠ Башҡарма комитетының тарих һәм башҡорт халҡын үҫтереү мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе урынбаҫары Юлдаш Йосопов тарихи йылда Ҡоролтайҙың эшмәкәрлеге төрлө йүнәлештә алып барылыуын билдәләп, уларҙың бер нисәһен атап үтте. Әйткәндәй, ырыу гербтарын эшләү инициаторҙарының береһе булараҡ, ул гербтарҙы юридик йәһәттән нығытыу буйынса алып барылған эш тураһындағы һорауға ла асыҡлыҡ индерҙе. Әле тамғаһы, ҡошо, ағасы, ораны, һауыты нигеҙендә 15 ырыуҙың гербтары эшләнгән, улар 20-гә тулһа, республиканың Геральдика комиссияһына тапшырылып, юридик йәһәттән нығытыласаҡ һәм улар ошо ырыуҙың милке булып торасаҡ. Шулай уҡ Юлдаш Мөхәмәт улы "2030 йылға тиклем Башҡорт халҡын үҫтереү стратегияһы" авторҙарының береһе булараҡ, милләтебеҙҙе үҫтереүҙең программа документында ҡаралған барлыҡ йүнәлештәр буйынса эштәрҙең нисек тормошҡа ашырылыуы 14 декабрҙә - Башҡорт теле көнөндә Башҡорт тарихы йылына йомғаҡ яһау сиктәрендә ойошторолаҫаҡ сарала секция ултырыштарында ҡараласағын, ҡайҙа уның уңышлы тормошҡа ашырылғаны, ниндәй урында иғтибар етмәгәнлеге асыҡланасағын белдерҙе. Йәғни был документ эшләнде лә онотолоуға дусар ителде түгел, ә йыл һайын йомғаҡ яһалып, аныҡ тормошҡа ашырыласаҡ.






Тарихсы Нурислам Ҡалмантаев Башҡорт тарихы йылы сиктәрендә тормошҡа ашырылған мөһим проекттар менән бер рәттән, халыҡтың тамырҙарын барлауға, шәжәрәләрен төҙөүгә ҙур иғтибар бирә башлауына туҡталды һәм миҫал итеп Рудольф Нуриевтың шәжәрәһен, профессор Миләүшә Мортазинаның архив документтары буйынса ата-олаталарының милләтен күреп аптырау кисереүе тураһында һөйләне. Онотолған исемдәрҙе кире ҡайтарыу, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итеүсе шайморатовсыларҙың исемдәрен тергеҙеү һәм мәңгеләштереү буйынса алып барылған һәм башҡа эштәр менән таныштырҙы.

Ырыуҙар съезы сиктәрендә ойошторолған саралар араһында яңылыҡ булып башҡорт ырыуҙары араһында көс күпалышы буйынса үткән "Бәйге" беренсе чемпионаты торғандыр, моғайын. Был Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ырыуҙарҙы ғына түгел, уларҙың уйындарын да тергеҙеүгә бер аҙым яһауына дәлил. Әлбиттә, тарихи уйындарға заманса элементтар ҙа өҫтәлгән, ҡайһы берҙәре уйлап сығарылған. Матбуғат конференцияһында белдереүҙәренсә, ярышта һигеҙ: "Табын" (Силәбе өлкәһе), "Юрматы" (Өфө ҡала округы), "Ғәйнә" (Пермь крайы), "Балыҡсы" (Асҡын районы), "Уран" (Яңауыл районы), "Ҡаңлы" (Туймазы районы), "Йылан" (Дүртөйлө районы), "Ҡырғыҙ" (Илеш районы) командалары ҡатнашҡан. Бәйге тураһында уның ойоштороусыһы Раил Бикмаев һәм еңеүсе "Юрматы" командаһы капитаны Альберт Мостафин менән "Йылан" командаһы капитаны Денис Ваһапов үҙ тәьҫораттары менән бүлеште. Ярыш программаһында һабантуйҙарҙың спорт программаһына индерелгән арҡан тартыу, һуңғы ваҡытта популярлыҡ яулай барған суҡмар ташлау, "тарт-эт", уҡ атыу менән бер рәттән бүрәнә ташыу, бысыу, ярыу һәм унан ырыу тамғаһын эшләү, башҡорт биатлоны, ҡымыҙ миле кеүек яңы төрҙәр ҙә индерелгән. Командалар составында көс талап ителгән спорт төрҙәре буйынса халыҡ-ара спорт мастерҙары, донъя чемпиондары, Рәсәй һәм донъя рекордсылары булһа, Асҡын районының "Балыҡсы" командаһы вахта ысулы менән ситтә эшләп йөрөгән ир-аттан тороуы менән үҙенсәлекле була. Шулай ҙа улар тәжрибәле спортсыларҙан һис тә ҡалышмай - өсөнсө урын яулай.

Юҡҡа ғына Башҡортостандың спорт министры урынбаҫары Эльза Ҡарамурзина был ярыштарҙың Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылында беренсе тапҡыр старт алыуын билдәләп, уның маҡсаты сәләмәт тормошто пропагандалау һәм йәштәрҙе спортҡа ылыҡтырыуҙың бер ысулы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алмай. Ысынлап та, хәҙер донъяла халыҡтарҙы күп нәмә менән аптыратып булмай, ә бына милли үҙенсәлек, этноспорт һәр ерҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ә инде башҡорт күпалышын ойоштороп үткәреүсе Раил Бикмаев белдереүенсә, "Бәйге" - ул ярыш ҡына түгел, уның үҙенең тәрән философияһы бар. Шулай уҡ ул - рух сығанағы ла тип әйтергә мөмкиндер, сөнки еңеүсе команда тарихта беренсе тапҡыр күсмә кубок булараҡ батыр торҡаһына (шлем) эйә булған һәм матбуғат конференцияһында уны бәйге батырҙарының иң ҙур бүләк итеп ҡабул итеүен toймау мөмкин түгел ине. Эйе, ул ҡиммәтле таштар менән дә биҙәлмәгән, алтын-көмөш тә ялатылмаған, әммә асылы бер - батыр рухы өҫтәгән еңеүсе торҡаһы. Ярыш еңеүселәре урындарына ҡарап 150, 100 һәм 50 мең һум аҡсалата бүләккә лайыҡ булды. Уны ниндәй маҡсатта тотонорға ниәтләүҙәре хаҡында һорау бирелгәс, Денис Ваһапов һис икеләнеүһеҙ: "Ярыштарҙа алған барлыҡ аҡсалата призыарҙы буласаҡ спортсы тәрбиәләү маҡсатында улыма инвестициялайым", - тип белдерҙе.

Матбуғат конференцияһында онлайн форматта ҡатнашыусы "Без -башҡортлар" хәрәкәте активистары Радик Бәхтиев менән Туймазы ҡалаһы Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәгенең баш белгесе Альберт Исмаилдың сығышы ла иғтибарға лайыҡ булды. Радик Бәхтиев сығышында төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының диалектына, ниһайәт, тейешле иғтибар бирелеүе, уның яҙма тел итеп ҡулланыла башлауы, ошо телдә нәшер ителгән баҫмаларҙы күреп, халыҡтың сикһеҙ ҡыуаныуын, хатта был ваҡиғаға тыныс ҡына ҡала алмай, күҙҙәре йәшләнеүен белдерҙе. Шулай уҡ ул 22 октябрҙә Краснокама районында үтәсәк сара менән дә таныштырып китте: былтыр октябрҙә Аҡтанышбаш ауылы клубына 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы байраҡсыһы Әхмәтхужа Әхмәҙуллин исеме бирелә һәм был аҙнала уға легендар атлы дивизия байрағының күсермәһен тапшырыу тантанаһы үтәсәк. Әйткәндәй, быйыл республиканың тарихи шәхестәре исемен мәңгеләштереү маҡсатында Краснокама районында Ә. Әхмәҙуллин менән бер рәттән, Хәнәфи Нурғәлиевҡа ла иҫтәлекле таҡтаташ асылды.

Альберт Исмаил төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектында саф башҡортса сығыш яһаны. Ул Башҡорт ырыуҙары съезындағы фекерҙәрен тағы бер тапҡыр ҡабатланы: башҡорт әҙәби теле нигеҙендә төньяҡ-көнбайыш диалектының (иҫке башҡорт теленең) алфавитын төҙөү, орфографияһын булдырыу һәм диалектта уҡытыу буйынса тәжрибә класы ойоштороу, Туймазы ҡалаһының 1-се Башҡорт гимназияһына генерал Шайморатов исемен биреү.

Матбуғат конференцияһы ике дәүләт: башҡорт һәм рус телендә барҙы һәм конференцияға ҡарағанда ихлас һөйләшеүгә яҡын булды. Әллә башҡорт теле лә яңғырағанға шулай тойолдо... Хатта сығыш яһаусылар төп бер мәлде лә әйтеп китергә онотто: Туймазыла үткән ҙур сараның резолюцияһына 15 октябрҙе Башҡорт ырыуҙары көнө тип иғлан итеү тураһында Башҡортостан Хөкүмәтенә тәҡдим индереү пункты ла керетелгән. Был көн календарҙа ҡыҙыл төҫ менән билдәләнмәһә лә, ул сифатлы башҡорт тәрбиәләүҙең һөҙөмтәләрен барлау көнө булырына өмөтләнәйек.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ижади күтәренкелек мәлендә барыһы ла һеҙҙең ҡулда

Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, тәрән итеп тын алып һәм тыныс картиналарҙы күҙаллау аша үҙегеҙҙең эске донъяғыҙға сәйәхәт ҡылыу дауалау һөҙөмтәһе лә бирә. Ул тәнгә, аңға һәм йәнгә файҙа килтерә. Әммә артабанғы аҙымды яһап, үҙегеҙ йәки икенсе берәйһе өсөн яҡшылыҡ күҙаллап, һеҙ үҙегеҙгә генә түгел, бәлки, бик күп кешегә, бөтөн донъяға ярҙам итәһегеҙ.

Әгәр бындай картиналар хыялда ғына һәм бер кемгә лә ауырлыҡ тыуҙырмай икән, уларҙың һеҙ нисек күҙ алдына килтергәнһегеҙ, шулай тормошҡа ашыуы ихтимал. Көсһөҙләнгән ваҡытта шундай ыңғай картиналарҙы уйлау - Ижадсының арҡаҙашы, ижадташы булараҡ, һеҙҙең оло бурысығыҙ. Бында ниндәй ҙә булһа сикләүҙәр бармы? Бер ниндәй ҙә сиктәр юҡ. Эйе, өндәге төш ярҙамында бөтөн нәмә үҙегеҙҙең ҡулығыҙҙа була.

Ҡапыл яңы автомобиль алыуға, ҡапыл ҡабаттан йәшәреп китеүегеҙгә өндәге төштөң ни ҡыҫылышы бар? Мәктәптә йәки ғибәҙәт ҡылған урындарҙа һөйләгән һүҙҙәр күҙлегенән ҡарағанда - бер ниндәй ҙә. Әммә яңы фән күҙлегенән ҡарағанда - туранан-тура бәйләнеше бар. Сәбәп һәм һөҙөмтә мөнәсәбәте. Уйҙағы хыял, өндәге төш сәбәп булып тора. Яңы автомобиль, проблеманы хәл итеү юлын табыу, яңы көс - һөҙөмтә. Беҙҙең тормош сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәренән тора. Аң ижадҡа һәләтле. Уны нисек файҙаланаһығыҙ - тормошоғоҙ шулай формалаша. Был һеҙҙең өсөн яңылыҡ икән, тимәк, яҡшы һәм ваҡытында ишетелгән яңылыҡ.

Һеҙҙең аңығыҙ һәм сәләмәтлегегеҙ, аңығыҙ һәм банкылағы иҫәбегеҙ, аңығыҙ һәм кешеләр менән мөнәсәбәтегеҙ сәбәп-эҙемтә бәйләнешендә тора. Һығымтаны үҙегеҙ яһағыҙ.

Барлыҡ был миҫалдарға дөйөм иҫкәрмә - тәнде көсһөҙләндергән ваҡытта ыңғай уйҙа булыу. Ыңғай фекерләү - проблеманың түгел, хәл итеүҙең бер өлөшө ул. Кешеләр үҙ аңын яҡшыраҡ файҙаланырға тырыша. Был аҡрын ғына тормошҡа ашырыла. Әммә һуғыштар туҡтаһын, төрмәләр һәм дауаханалар бушаһын, урмандар һаҡланһын, Ер планетаһы ҡотҡарылһын, тиһәк, ашығырға кәрәк.

Көндәлек бер төрлөлөктән ялҡып, Кэрол ижади фекерләү курстарына килә. Эше ҡәнәғәтлек килтермәй, шәхси тормошо бөтөнләй яйланмай. Ике аҙна үҙен яҡшы вазифала, ысын фекерҙәштәр солғанышында тип хыялланып, өндәге төш күнегеүҙәренән һуң ул перспективалы эш таба, бер ир-ат менән танышып, артабан уға кейәүгә сыға.

Ә һеҙ нимәнән башланыгыҙ? Өндәге төшөгөҙҙә тормошоғоҙҙоң мөхәббәт менән тулыуын йәки банк иҫәбендәге сумманың артыуын күҙалланығыҙмы? Яуап тәүҙә үк бирелгәйне. Мин үҙегеҙгә түгел, ә башҡаларға ярҙам итеүҙән башларға тәҡдим иттем. Был һеҙҙе Ижадсының арҡаҙашы итә. Ижадсы һеҙҙә үҙенең арҡаҙашын таныһа, үҙегеҙгә генә түгел, тотош Ер шарына ижади ярҙам итеү һәләтенә эйә буласаҡһығыҙ.

Минең һеҙгә кәңәшем: тормошоғоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртергә теләһәгеҙ, гел ыңғай фекерләгеҙ. Бындай фекерләү аңығыҙҙың бөйөк көсөн файҙаланыуҙы күрһәтә. Шул саҡта һеҙ күҙгә күренгән генә түгел, хатта күренмәгән мәсьәләләрҙе хәл итәсәкһегеҙ. Һеҙ, әйтерһең, Аллаһтың уң ҡулы аҫтында булырһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 25 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Медиум". [12+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**10.45, 17.45 История одного села. [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Д/ф "ООО ПХ "Артемида"". [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Хроники армагеддона". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Однажды в санатории". [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 26 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Медиум". [12+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**10.45, 15.45, 17.15 История одного села. [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30 Интервью. [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Хазина о хазине". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец). КХЛ.**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Короли льда". [6+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 27 ОКТЯБРЯ СРЕДА РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Медиум". [12+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Х/ф "И тогда придут другие". [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Притворись моим женихом". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 28 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Медиум". [12+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "И тогда придут другие". [12+]**
**10.45, 17.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 17.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Вечерний телецентр.**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.00 "Елкән".**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Агент Роза: Мишень киллера". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Лебедушка моя".[12+]**
**4.00 "Бай". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 29 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Юморина. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.50 Х/ф "Жили-были". [12+]
2.20 Х/ф "Диван для одинокого мужчины". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 17.15 Х/ф "И тогда придут другие". [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00, 16.00, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 Памяти Ульфата Мустафина. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.20 Хоккей. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30, 4.00 Х/ф "Спецагенты на отдыхе". [12+]**
**2.15 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә Сәсән". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 30 ОКТЯБРЯ СУББОТА РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.35 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.40 Доктор Мясников. [12+]
13.50 Т/с "Наследница поневоле". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Призрачное счастье". [12+]
1.10 Х/ф "Месть как лекарство". [12+]
4.25 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Уфимского фольклорного ансамбля песни и танца "Мирас". [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет.[12+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Вне поля зрения". [16+]**
**2.45 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 31 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ РОССИЯ 1

5.15, 3.20 Х/ф "Путь к сердцу мужчины". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.50 Т/с "Наследница поневоле". [12+]
18.00 Дуэты. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Х/ф "Петрович". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Д/ф "Караван-сарай". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Ай ҡыҙы". 20 лет спустя". [12+]**
**18.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.00 Хоккей. "Динамо" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.45 Новости недели (на рус.яз).**
**22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.30 Х/ф "Опасный квартал". [16+]**
**1.15 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**3.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**27 октябрь "Гөлбостан" (**Ҡ. Даян, Д. Йосопов). 12+
**29 октябрь "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт story. 16+
**30 октябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Я. Пулинович, Г. Яхина). 18.00 16+
**31 октябрь "Эҙләнем, бәғрем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26-27 октябрь "Республика ШКИД"** (Г. Белых, Л. Пантелеев). 12+
**28 октябрь "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+
**30 октябрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+
**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 18.00 14+
**31 октябрь "Алые паруса"** (А. Грин), романтик фантазия. 12.00, 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28 октябрь "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 18+
**30-31 октябрь Премьера! "Кошкин дом"** (С. Маршак). 11.00, 13.00 0+
**"О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 октябрь "Пульс нашего времени... Наш Мустай"** әҙәби дүшәмбе. 6+
**29 октябрь Рөстәм Шаһыбаловтың** концерты. 6+
**30 октябрь** Башҡорт филармонияһының Биг-бенды һәм Татарстан филармония джаз оркестры концерты. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**29 октябрь "Тамашасы күңеле - беҙҙең илаһи донъя!"** 30 йыллыҡ юбилейға. 6+
**31 октябрь Премьера! "Первая ступенька в мир музыки"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**27-28 октябрь Премьера! "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Октябрь (Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (19) дүшәмбе | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 16:22 | 17:52 | 19:22 |
| 26 (20) шишәмбе | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 16:20 | 17:50 | 19:20 |
| 27 (21) шаршамбы | 6:41 | 8:11 | 13:30 | 16:18 | 17:48 | 19:18 |
| 28 (22) кесе йома | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 16:16 | 17:46 | 19:16 |
| 29 (23) йома | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 16:14 | 17:44 | 19:14 |
| 30 (24) шәмбе | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 16:11 | 17:41 | 19:11 |
| 31 (25) йәкшәмбе | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 16:09 | 17:39 | 19:09 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Ҙур, ҡеүәтле ырыуҙар тураһында мәғлүмәт күп, ә бәләкәйерәктәре тураһында - әҙерәк. Шуның өсөн дә 3-4 минутлыҡ ролик әҙерләү өсөн тарих китаптарын арыу уҡ аҡтарырға тура килде.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 31 ОКТЯБРЬ - БӨТӨН ДОНЪЯ ҠАЛАЛАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**42-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Хәйри. Диктант. Маҡар. Йөрәк. Үзбәк. Өйөр. Ут. Төмән. Әрмәк. Шаммас. Иврит. Баш. Тирмә. Елкә. Игеҙ. Матәм. Ватан. Ауыл. Опера. Елкән. Көснәсе. Тантана.

**Вертикаль буйынса:** Таһирова. Йөмһүриәт. Нейтрино. Дөйә. Плакат. Көпшә. Хаким. Баҙар. Аманат. Ҡарамышева. Уэльс. Ифтар. Үтә. Тәмле. Рәми. Әрем. Күк. Әрмән.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# "АШҠАҘАР" РАДИОҺЫНДА...

**Республиканың тәүлек әйләнәһенә эшләгән "Ашҡаҙар" радиоһының фонды башҡорт ырыуҙары тураһындағы роликтар циклы, 49 ролик менән менән тулыланды. Тарихсылар фекере буйынса, башҡорт халҡының генофондын нәҡ ошо ырыу вәкилдәре тәшкил итә.**

"Роликтар өс өлөштән тора. Уның тәүге өлөшөндә ырыу йәшәгән ерҙәр, икенсеһендә - ырыу тарихынан ҡыҙыҡлы факттар тураһында бәйән ителә. Өсөнсө өлөш иһә ырыуҙың билдәле шәхестәре менән таныштыра. Ҙур, ҡеүәтле ырыуҙар тураһында мәғлүмәт күп, ә бәләкәйерәктәре тураһында - әҙерәк. Шуның өсөн дә 3-4 минутлыҡ ролик әҙерләү өсөн тарих китаптарын арыу уҡ аҡтарырға тура килде. Әлбиттә, тарих фәндәре докторы Рим Янғужин, тарих фәндәре кандидаттары Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов, Рәфил Аҫылғужин, Искәндәр Сәйетбатталов һәм башҡа билдәле ғалимдарыбыҙҙың хеҙмәттәренә таяндыҡ. Роликтарҙы "Ашҡаҙар" һәм "Юлдаш" радиостудияһы журналистары бергә эшләне. Ижад кешеләренең күҙе яна икән, тимәк, яҡшы материал килеп сығасаҡ. Шулай булды ла. Тауыш режиссерҙары Гөлйемеш Баязитова менән Рөстәм Ҡәҙерғолов роликтар матур яңғыраһын өсөн бар күңелен һалып эшләне", - ти "Ашҡаҙар" радиоһының баш мөхәррире Гәүһәр Батталова. "Ырыуың кем?" роликтарын "Ашҡадар" радиоһында көн һайын 08.45, 16.45 һәм 14.15, 23.15 сәғәттәрҙә тыңларға мөмкин. Редакция телефоны: 8 (347) 461-482.




ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ҺӘР ЕРЕК ТӘ ШИФАЛЫ

**Дымлы, батҡыл урындарҙа, йылға буйҙарында ерек (ольха серая) һәм ҡара ерек (ольха черная) аралаш үҫә. Еректең ҡайырыһы асыҡ төҫтә, шыма, ә ҡара еректеке ҡара һоро, ярғыланған. Ҡайһы берҙә ҡайырыһына ҡарап ҡына был ағастарҙы айырыу ауыр. Ул саҡта япраҡтарына иғтибар итергә кәрәк: еректең япрағы ослайып тора, ә ҡараһыныҡы - тупаҫ, саҡ ҡына соҡорланып тора.**

Еректең (ольха серая) тубырсыҡтары, ҡайыры һәм япрағы дауалау өсөн ҡулланыла. Уларҙың составында алкалоид, танин, флавоноидтар, минераль тоҙҙар һ.б. биологик актив матдәләр бар. Еректең ҡайыры яҙҙың тәүге айҙарында (япраҡ ярғанға тиклем), япрағы май - июндә, ә тубырсығы көҙгөһөн йәки ҡышҡыһын әҙерләнә. Был дауалар күләгәле һәм ҡоро урында киптерелә, ҡәҙимгесә һаҡлана. Дөрөҫ һаҡлағанда япраҡтар бер йыл тирәһе, тубырсыҡтар менән ҡайырыһы өс йылға тиклем шифаһын юғалтмай.

**Ерек тубырсыҡтарынан әҙерләнгән төнәтмәне** эс киткәндә, ашҡаҙан һәм бөйән эсәгенең сей яра (язва) ауырыуы булғанда ҡулланырға кәңәш ителә. Төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған тубырсыҡты 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтөябыҡ килеш йылы урында 2-3 сәғәт тоторға кәрәк. Төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр, ас ҡарынға, 1/4 стакан эсергә.

**Еректең ҡайыры ла шифалы.** Төнәтмә яһап, үрҙә һанап сыҡҡан сирҙәргә ҡаршы ҡулланырға була. Төнәтмәне әҙерләү: 2 ҡалаҡ киптереп ваҡланған ҡайырын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтөябыҡ килеш йылы урында 1 сәғәт тоторға кәрәк. Төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр, ашар алдынан, 1-2 ҡалаҡ эсергә. Ерек ҡайырыһынан әҙерләнгән төнәтмәне ауыҙ эсе боҙолғанда, ангина булғанда ауыҙҙы сайҡау өсөн файҙаланырға мөмкин. Тән бешкәндә, экзема, дерматит кеүек тире ауырыуҙары булғанда сылатыу йә ванна яһау рәүешендә ерек ҡайыры төнәтмәһен ҡулланырға ярай.

**Ерек япрағында ла шифа бар.** Унан әҙерләнгән төнәтмә һыуыҡ тейҙереп сирләгәндә, эс ҡатҡанда файҙалы. Төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 балғалаҡ киптереп ваҡланған ерек япрағын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтөябыҡ килеш йылы урында 30-40 минут тоторға кәрәк. Төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр, ашар алдынан 1 ҡалаҡ эсергә. Һыуыҡ тейгәндә дауа йоҡлар алдынан да ҡабул ителә.

Ә бына яҙғыһын **ҡара еректең** (ольха черная) яңы ғына бөрөләнеп сыҡҡан йәш япраҡтары йәбешкәк була, был осорҙа уларҙы йыйып ҡалырға кәрәк. Бының өсөн берәй нәмәне ергә түшәп, япраҡтарҙы шуға таратып һалырға, өйөп ҡуйырға һис ярамай - йылына башлайҙар. Алып ҡайтҡанда ла һәр ваҡыт әйләндереп торорға кәрәк, юғиһә, янып әрәм булалар. Ҡара еректең япраҡтарын һәм бөрөләрен яман шеш ауырыуҙарын дауалағанда ҡулланалар. Бигерәк тә ашҡаҙан аҫты биҙе һәм тура эсәк яман шеше, өлөшләтә ҡыҙыл үңәс яман шеше ауырыуҙарынан файҙаһы булыуы билдәле. Төрлө яман шеш ауырыуҙарынан дауа әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ ваҡланған япраҡтарға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 4 сәғәт төнәтергә, йәки быуҙа 30 минут тотоп йылытырға, шунан һыуытып һөҙөргә. Ашарҙан бер аҙ алда көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә. Дауаны ҡара ерек бөрөләренән әҙерләнгән төнәтмә менән көсәйтергә лә була. Уны әҙерләү өсөн 5 ҡалаҡ бөрөгә 0,5 литр араҡы ҡойорға. Бер айҙан да кәм төнәтмәҫкә. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 30-ар тамсыһын япраҡтарҙан әҙерләнгән төнәтмәгә ҡушып, йәки башҡа үлән төнәтмәһенә тамыҙып эсергә.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# КҮН ӘЙБЕРҘӘР...

## башҡорт кәсебенең юғары өлгөһө

**Тире эшкәртеү боронғо кәсеп төрҙәренең береһе. Тәүге кейемдәр хайуандар тиреһенән булған. Кеше тотонған тәүге ҡоралдар (хайуан һәм ҡоштар өсөн тоҙаҡтар), хәрби кейемдәр (ҡалҡан, панцирь), һаҙаҡтар, егеү кәрәк-ярағы, торлаҡ (тирмә, ҡыуыш), тәүге китаптар яҙылған пергамент та тиренән булған.**

Күндән һығылған, баҫып төшөрөлгән һәм аппликациялы һауыт-һаба киң ҡулланылған. Хәрбиҙәрҙең һәм һунарсыларҙың кәрәк-ярактары оҫта биҙәлеше менән айырылып торған: ҡалъян һәм һаҙаҡ, дары һәм сәкмәташ өсөн аҫмалы муҡсалар, ҡаптырғалар.

Башҡорт оҫталары күнде яҡшы эшкәрткән. Унан кейеҙ йәки тула ҡуныслы аяҡ кейемдәре теккәндәр, һөт һәм ҡымыҙ һауыттары эшләгәндәр.

Күскенсе халыҡтар өсөн күнде орнаментлау биҙәү-гәмәли сәнғәтенең традицион төрө. Биҙәге баҫып төшөрөлгән күн көмөшләтелгән, алтынлатылған, сүкелгән йәки ҡарайтылған биҙәкле (өсәрле япраҡ өҫтөнлөк иткән) металл менән зауыҡланған. Айырыуса әйәрҙәр оҫта биҙәлеше менән билдәле булған.

Бөгөн дә халыҡтың тире эшкәртеү оҫталығы үҙенең зауығын юғалтмаған. Күн әйберҙәр юғары баһаланған һәм бик күп үрнәктәр Рәсәй, Башҡортостан, Венгрия һәм башҡа илдәрҙең музейҙарында һаҡлана. Иғтибарығыҙға башҡорттарҙың был оҫталығына бағышланған "Тире эшкәртеү" тип аталған карточкалар йыйылмаһын тәҡдим итәбеҙ. Унда Башҡортостан Милли музейында һаҡланған әйберҙәр тупланған. Йыйылманы Р.А. Хафизова, А.Р. Хөснуллин төҙөгән, яуаплы редакторы тарих фәндәре докторы, РФ һәм БР атҡаҙанған фән эшмәкәре Р.З. Янғужин.



Баҫып төшөрөлгән биҙәкле күн ҡалъян һәм һаҙаҡ



Металл тәңкәләр менән биҙәлгән күн ҡалъян һәм һаҙаҡ



Ирҙәр баш кейеме - ҡолаҡсын



Ҡабарынҡы итеп ишелгән ҡамсы



Баҫып төшөрөлгән биҙәкле күн ҡаптырға



Семәрләп биҙәлгән күн ҡалҡан (һиплән яһыртылған)



Ҡыҫҡа ҡуныслы аяҡ кейеме



Металл биҙәүесле ҡайыш йүгән



Ҡымыҙ һауыттары - ҡуллыҡ менән муртай





Ҡымыҙ һауыттары - ботлоҡ менән муртай

Ҡымыҙ һабаһы



Ҡайыш йүгән. Ишелгән өләшә

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ ИРЕНӘ ЫШАНЫП...

## түшәк йәймә

Аҡыллы ир шул булыр: ҡулындағын алдырмаҫ, кеше һайын туҡталып, юҡ һүҙ тыңлап ҡаңғырмаҫ. Барынан да бере шул: бөгөнгө эшен таңға ҡалдырмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин аҙ һанлы халыҡтарҙы яратам. Мин бөләкәй һандарҙы яратам. Донъя ана шул аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.

**(Андре Жид).**

Күрә алмаһалар, алмаһындар, тик ҡурҡһындар ғына.

**(Каин).**

Кәрәкмәгән нимә гел ҡыйбат тора.

**(Катон).**

Автор китаптың яртыһын ғына яҙа: ҡалған яртыһын уҡыусы үҙе тултырып ҡуя.

**(Джозеф Конрад).**

Гонаһ ҡылырға теләмәү һәм белмәү араһында айырма ҙур.

**(Мишель Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Илдә енәйәтселек, боҙоҡлоҡ күп булыуына зарлана икән бер егет. Халыҡты нисек итеп тәртипкә күндерергә, тип баш вата икән. Ошо һорау менән бер аҡһаҡалға барған был. Аҡһаҡал унан һорай икән: "Ә боҙоҡлоҡ ҡылған кешегә иң ҡаты яза ни була, тип уйлайһың һуң?" "Үлемдер, моғайын" , - ти егет. "Юҡ, улым, үлем түгел, - ти аҡһаҡал, - киреһенсә, ҡартайып, бер кемгә кәрәгең булмайынса, үлә алмай йөрөү - иң яманы". "Һуң, ул енәйәт ҡылған боҙоҡ әҙәмдәр башлыса йәштәр бит, уларға нисек былдай язаны бирәһең?" "Хоҙай Тәғәләнән ғибрәт өсөн бер йәш енәйәтсене ҡартайтып, үлә алмай йөрөгән бер өрөккә әйләндерәүен һора", - ти икән аҡһаҡал. - Тик был ғәмәлде бар халыҡ алдында ҡылдырыуҙы һора Хоҙайҙан". Егет ышаныр-ышанмаҫ ҡына халыҡты йыя, бер иң яман енәйәтсене тотоп килтереп, халыҡ алдына баҫтыра ла, үҙенең хөкөм ҡарарын иғлан итә: "Был бик күп енәйәттәр ҡылған, бик күп кешеләрҙең ҡарғышын алған әҙәм хәҙер һеҙҙең күҙ алдында бер кемгә кәрәкмәгән, үлә алмаған ҡартҡа әйләнһен!" Һәм ни мөғжизә! Йәп-йәш егет халыҡтың күҙ алдында һөйкөмһөҙ бер ҡартҡа әйләнә. Үҙенең был хәлен күргән егет йүгереп барып упҡынға ырғый, ләкин упҡын уны үҙенә ҡабул итмәй, ул унан тағы ла ҡот оҫҡосораҡ, имгәнгән, яраланған йән эйәһе булып килеп сыға. Шунда был әҙәм үҙенең үлә алмай, бер кемгә лә кәрәкмәгән ләғнәтле йән эйәһе булып йөрөйәсәге, Хоҙай тарафынан шундай хөкөмгә дусар ителеүе тураһында аңлай. Был хәлдә күргән халыҡ тәүбәгә килә. Ошо хәлдән һуң был илдә бер енәйәт тә ҡылынмай, ти."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21043

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
22 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1274